*✓ Фәкирлек - ул аҡса юҡлыҡ ҡына түгел, ул наҙанлыҡ, ул уйлай белмәү, ул һәләтһеҙлек тә. Шуға ла белемһеҙ, наҙан, фекерләй һәм уйлай белмәгән аҡсалы кеше аҡсаһыҙ фәҡирҙән бер ягы менән дә айырылмай.*

*Фәтхула ГӨЛӨН,*
*төрөк шағиры һәм мәғрифәтсеһе.*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23 - 29 ҒИНУАР (ҺЫУЫҒАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru    2002 йылдан башлап сыға    Һатыуҙа хаҡы ирекле    №4 (370)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Донъя буйлап хәбәр йөрөй...**
Башҡортостан хаҡында


5

**Һеҙ кем, көнбайыш башҡорттары,**
йәки Тарихи документтар ни һөйләй?

7

**Беҙ әйтмәһәк, кем әйтер,**
хәҙер әйтмәһәк, ҡасан әйтербеҙ?

8-9

**Ҡурайсылар остазы**
Кәрим Дияров

12

14 ТВ-программа

*КОНКУРС*

# "БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ ҺӨЙЛӘШӘМ"




**Телебеҙҙе урыҫ һүҙҙәре менән "сүпләү", телгә битарафлыҡ һөҙөмтәһендә туған телендә матур итеп һөйләшә, яҙа белмәгән тотош быуын барлыҡҡа килеүе оло бәләбеҙгә әүерелдә. Төрлө йыйын-йыйылыштарҙа, сәхнәләрҙән, трибуналарҙан тороп сығыш яһаусыларҙың йәнде кинәндереп, ҡолаҡтарҙы иркәләп башҡортса һөйләгәненә ҡасан шаһит булдығыҙ? Күптән булған кеүек был хәл. Радио, телевидение тапшырыуҙарында сығыш яһаусыларҙан да шулай уҡ матур башҡортса һөйләште ишетермен тимә! Ә милләттәштәрҙең үҙ-ара һөйләшеүен тыңлап торһаң...**

Хәйер, был хаҡта артыҡ сурытып тормай, ошо бәләнән ҡотолоу алымдарының береһе булыр сара тәҡдим итергә булдыҡ. Республика йылына арнап, **"Башҡорт телендә һөйләшәм" тигән конкурс иғлан итәбеҙ.** Конкурстың төп маҡсаты - балаларҙа, йәштәрҙә туған телдә матур итеп һөйләшеүгә, уйҙарынды, фекерҙәренде тейешле тәртиптә теҙеп, дөрөҫ һөйләмдәр ҡороп яҙырға өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу уятыу. Конкурс мәктәп уҡыусылары һәм студенттар араһында ойошторола. **Сарала ҡатнашыусылар беҙ биргән темаға инша-мәҡәлә яҙа, фекерләү ихлас, төплө, үҙенсәлекле булырға тейеш.** Автор үҙе лә уйланһын, уның ҡулъяҙмаһы уҡыусыны ла уйландырһын. Дөйөм һүҙҙәр, тапалған фекерҙәрҙән ҡасыу кәңәш ителә.

Көс етмәҫлек түгел шарттар, уларҙы үтәү өсөн туған телендә матур һөйләшеүгә һәм яҙыуға ярҙам иткән иң ябай ҡағиҙәләр ҡаныңа һеңешкән булырға тейеш: ғаиләлә туған телдә аралашыу, әҙәби китаптар уҡыу, өлкән быуын һөйләшенә ҡолаҡ һалып, үҙеңдең телмәреңдә булмаған һүҙҙәрҙе үҙләштереү, ғөмүмән, **туған тел моңон һәм көсөн күңеленә һеңдергән булыу.** Бындай баланың һәм йәш кешенең туған телдәге һөйләше һәм яҙмаһы камил булыуына шик юҡ.

Беҙҙең конкурста ҡатнашыусы яҙмаһын үҙ аллы, ата-әсә йәки уҡытыусы ярҙамынан тыш башҡара - был конкурстың төп талабы. Сөнки быны тикшереү мөмкинлеге буласаҡ: иң яҡшы тип табылған эштәрҙең авторҙарын Өфөгә - "Киске Өфө" гәзите редакцияһына саҡырып, үҙ аллы яҙма эш буйынса йомғаҡлау ярышы үткәреп, еңеүсе билдәләнәсәк. Яҙмалар махсус төҙөлгән баһалама комиссияһы тарафынан тикшереләсәк. Ә конкурс һөҙөмтәләре буйынса йыл аҙағында редакция еңеүселәргә махсус бүләктәр - кеҫә телефондары тапшырасаҡ. Конкурсҡа дәртләндереүҙең башҡа төрҙәре лә булыуы ихтимал, был хаҡта беҙ аҙағыраҡ хәбәр итербеҙ. Бәлки, конкурс шарттары тураһында уҡыусыларыбыҙҙың да ниндәйҙер тәҡдиме булыр - ҡабул итәбеҙ.

**Шулай итеп, беренсе тема: "Булыр илдең балаһы бер-береһенә "батыр" тиер, булмаҫ илдең балаһы бер-береһенә "бахыр" тиер". Ошо башҡорт халыҡ мәҡәлендәге аҡылдан сығып, батырлыҡ һәм бахырлыҡ тураһында уйланыуҙар, һығымталар, фекерҙәр сағылырға тейеш ҡатнашыусылар эштәрендә. Башланыҡ!**

**(Теманың дауамы 6-сы биттә).**

*ЯҢЫ РУБРИКА: "ҺУҒЫШТЫ КҮРӘЛМАЙЫМ"*

# ХӘТИРӘЛӘР АША...

## үҙ нәфрәтеңде еткер ҡан ҡойошҡа



**Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүгә 65 йыл тулыуҙы билдәләргә йыйынабыҙ. Ошо ваҡиға алдынан бер аҙ һуғыш хәтирәләренә бирелеп алайыҡ, тип, уйланыҡ та... яңы рубриканы "Һуғышты күрәлмайым" тип атарға булдыҡ.**

Ер шарында бар донъяны дер һелкеткән Икенсе Бөтә донъя һуғышы ҡыйралышы миллиондарса ғүмерҙәрҙе ҡыйып ҡына ҡалманы, унан да күберәк кешеләрҙе мәңге тыйылмаҫлыҡ илаулы, күҙ йәшле, үкһеҙ етем итте, миллионлаған яҙмыштарҙы, ғаиләләрҙе ҡыйратты, күпме ҡатындарҙы ирһеҙ-терәкһеҙ, балаларҙы ағайһыҙ, атайһыҙ, ҡартатайһыҙ ҡалдырҙы, кеше аҡылы һәм хәләл көсө менән төҙөлгән меңәрләгән-меңәрләгән ҡала-ауылдарҙы харабаға әйләндерҙе...

Бөгөн Ер шарында ошо һуғыштан зыян күрмәгән кеше, ғаилә, милләт, дәүләт юҡ һәм ул һуғыш һаман да дауам итә. "Хәбәрһеҙ юғалған һуңғы һалдаттың һөйәктәре табылып, ҡәҙерләп ергә күмелмәйенсә тороп, ул һуғыш һаман да дауам итәсәк", тиҙәр. Шулайҙыр. Ер шарында бер-береһенә ҡапма-ҡаршы тороусы идеялар, байҙар һәм ярлылар, милләттәр һәм дәүләттәр бар сағында ул һуғыш һаман да дауам итер. Ҡайһылыр арала ул мәғлүмәт йә идеялар һуғышы булып тора ла, аңлашыуҙарҙың кульминация нөктәһендә ҡоралға күсеүсән. Хәҙерге заманда ҡоралға күсеүҙең нимәгә алып килерен дә яҡшы беләбеҙ. Барлыҡ ракеталар телгә килһә, Ер шарын күсәренән ысҡындырыр өсөн бер минут етә, тиҙәр. Бына шуның өсөн дә беҙ һуғышты күрәлмайбыҙ.

**"Һуғышты күрәлмайым" рубрикаһына һеҙ Бөйөк Ватан һуғышы яугиренең, тыл һалдатының һуғышҡа һәм тылдағы хеҙмәткә бәйле фәһемле, ғибрәтле йә ҡыҙыҡлы бер хәтирәһе, сәхифәһен; өлкән, йәш кешенең, уҡыусы баланың һуғыштың республикабыҙ һәм милләтебеҙ өсөн килтергән эҙемтәләре тураһында уйланыуҙарын; ғөмүмән, һуғышҡа ҡарата мөнәсәбәтегеҙ тураһында мәҡәләләр ебәрә алаһығыҙ. Мәҡәләгеҙ 1,5-2 биттән артмаһын.**

*✓ Онищенко ыңғай геройҙарҙың тәмәке тартыуын, алкоголле эсемлектәр эсеүен күрһәткән эпизодтарҙы яңы фильмдарҙа ҡулланмау яҡлы. "Әтрәгәләмдәр тартһын да, эсһен дә", - ти ул.*

*Аһ-Аһ!*

# ПЕНСИЯ ӨСӨН... күпме эшләргә?

**Үткән аҙнала Рәсәйҙең финанс министры урынбаҫары Сергей Шаталов пенсия йәше тураһындағы мәсьәләне яңынан ҡуҙғатты. Ул ир-аттың пенсия йәшен - 5 (65-кә тиклем), ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡын 7 йылға (62-гә тиклем) күтәреүҙе тәҡдим итә. Сәйәсмәндәр был аҙымды аҡылһыҙлыҡ тип, ә иҡтисадсылар кәрәкле сара, тип иҫәпләй.**

Сергей Шаталов фекеренсә, Рәсәйҙә пенсия йәшен оҙайтыу һәм хеҙмәткәрҙәрҙең буласаҡ пенсиялары мәсьәләһе ҡасан да булһа ҡуҙғатылырға тейеш ине. Әле СССР ваҡытында уҡ билдәләнгән пенсия йәше ҡулланыла, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн ул - 55, ир-ат өсөн 60 йәштә етә.

Инициативаны РФ Дәүләт Думаһында хупламанылар. Парламенттың түбәнге палата рәйесе Борис Грызлов был теманы 2020 йылға тиклем күтәреү бөтөнләй урынһыҙ, тип тапты. Грызлов раҫлауынса, был ваҡытҡа хөкүмәт үҙ алдына ҡуйған маҡсатына ирешәсәк - рәсәйлеләрҙең ғүмер оҙайлығы артасаҡ. Росстат фаразына ярашлы, 2020 йылға ир-аттың уртаса ғүмер оҙайлығы 4,5 йылға артып, 67,3 йәш тәшкил итһә, ҡатын-ҡыҙҙарҙа был күрһәткес 3 йылға артып, 77,5 йәшкә етәсәк. Бер юлы Дәүләт Думаһы спикеры Пенсия фондына сараларҙы һөҙөмтәле ҡулланырға өйрәнергә һәм "киммәтле һарайҙар төҙөмәҫкә" кәңәш бирҙе.

КПРФ депутаты Виктор Илюхин Шаталовтың тәҡдимен "ҡот осҡос" тип тапты һәм бының өсөн ул яуап бирергә тейеш, тип белдерҙе. "Бөгөн РФ Хөкүмәте күп рәсәйлеләрҙең ауыр хәленән көлөүен дауам итә. Бюджетты тулыландырыу өсөн тағы әллә күпме саралар бар", - ти депутат. Уның менән Рәсәй Фәндәр академияһы Иҡтисад институтының социаль сәйәсәт үҙәге етәксеһе Евгений Гонтмахер ҙа риза. Унынса, Рәсәй халҡы пенсия йәшен күтәреүгә әҙер түгел. "Хөкүмәт пенсия йәшен арттырыуға иң һуңынан, бар саралар ҙа, шул иҫәптән, кредит алыу мөмкинлеге ҡулланылып бөткәс кенә барасаҡ", - тип иҫәпләй Сәйәси технологиялар үҙәге директоры урынбаҫары Алексей Макаркин.

Иҡтисад институты хеҙмәткәре Владимир Назаров әлеге ваҡытта пенсия йәшен күтәреү объектив ысынбарлыҡ һәм уны халыҡҡа хәҙер үк еткереү урынлы, тип белдерә. "Кемгә пенсияға тиклем 10 йыл ҡалған, шуларҙың пенсия йәшен яйлап күтәрергә кәрәк, юғиһә, пенсия системаһы тигеҙлеген һаҡлай алмаясаҡбыҙ. Бер нисә йылдан хаҡлы ялға сығыусыларға пенсия түләү өсөн Пенсия фондының аҡсаһы булмауы ихтимал", - тине ул журналистарға.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**2010 йылда Рәсәй бюджеты пенсия системаһына 4 трлн. һум тирәһе аҡса бүләсәк. Владимир Путин менән Дмитрий Медведев та дәүләттең бөтә социаль бурыстары үтәләсәген белдерҙе.**

*ИШАРА*

# ТӘМӘКЕСЕ - МИНӘН КЕСЕ...

## йәки Онищенкоға ябырылған тиле бәрәндәр тураһында

**Илебеҙҙең баш санитар табибы, Роспотребнадзор етәксеһе Геннадий Онищенконы белмәгән кеше бик һирәктер. Һуңғы йылдарҙа ул халыҡ араһында билдәле сәйәсмәндәрҙән дә былайыраҡ популярлыҡ яуланы. Халыҡ нимә ашай, нимә эсә, ниндәй кейем кейә, ниндәй электрон приборҙар ҡуллана - быларҙың барыһы ла унда профессиональ ҡыҙыҡһыныу уята.**

Үҙегеҙ беләһегеҙ, Рәсәйгә ниндәй генә ҡазалар килмәй ҙә, ниндәй генә хәүеф-хәтәр янамай: суррогат араҡы, ялған молдаван шараптары, әрмән һәм грузин коньяктары, самогон, одеколон, лосьон, "Трояр" һәм башҡа һанап бөткөһөҙ техник таҙартҡыстар ғына етмәгән, ҡош, сусҡа киҙеүҙәре, юл трассалары буйында үҫкән ағыулы бәшмәктәр, мәк һәм тарма, психотроп дарыуҙар, биоэнергетик эсемлектәр, кальянда тарта торған ҡатнашмалар... Иҫкеләре етмәгән, йыл һайын кеше организмы өсөн аяуһыҙ зарарлы булған яңылары әллә ҡайҙан табылып тора.

Әйтергә кәрәк, Геннадий Онищенконың етешһеҙлектәребеҙгә биргән баһалары үткерлеге һәм тапҡырлығы яғынан Рәсәйҙә дан ҡаҙанған Виктор Черномырдиндыҡынан һис ҡалышмай: "Ҡош киҙеүенең сәбәптәрен эҙләгәнсе, ҡоштарҙың йылы яҡтан ҡайтыуына әҙерләнә башларға ваҡыт"; "Беҙ Рәсәйҙе Петр Беренсе башлаған 300 йыллыҡ типтереп эсеүҙән арындырасаҡбыҙ"; "Беҙҙә йорт хайуанын урамға алып сыҡһалар, ул баш бирмәгән хулиганға әүерелә лә ҡуя"; "Бөгөн зыярат власть эшмәкәрлеге һөҙөмтәлелегенең төп критерийы булып тора"; "Әгәр араҡы шешәһендә иҫкәртеүсе яҙыу юҡ икән, ғәфү итегеҙ - кем йәшенмәгән, мин ғәйепле түгел!" һ.б.

Геннадий Онищенконың ошондайыраҡ һүҙҙәренә көләмһерәп ҡараһалар ҙа, миңә уның рәсәйлеләрҙең айыҡ һәм сәләмәт тормошо өсөн янып-ҡарһаланып, йәшәйешебеҙҙә яңы ҡағиҙәләр булдырырға тырышыуы оҡшай. Ул да, башҡа дәүләт эшмәкәрҙәре кеүек, халыҡҡа чиновниктар теле менән мөрәжәғәт итһә, уның әйткәндәрен ҡолаҡҡа ла элмәҫтәр ине.

Рәсәйҙә тәмәке тартыуҙы закон нигеҙендә сикләү өсөн уға ла бик күп көс һалырға тура килде. Ә тәмәке һатыуҙан иҫ китмәле килем алыусы шәхси компаниялар, йәғни тәмәке барондары, бындай законды ҡабул итеүгә теше-тырнағы менән ҡаршы ине, һәм улар Дәүләт Думаһына оялаған лоббистары аша нисек тә булһа ошо закондағы нормаларҙы ҡоро декларацияға әйләндерергә тырышты. Шул саҡта Онищенко депутаттарҙың сәменә тейерлек, намыҫын ҡуҙғатырлыҡ һүҙҙәр әйтә алды: "Хөрмәтле киллер, һеҙ, зинһар өсөн, төҙәберәк атығыҙ, пуляғыҙ тейгән кеше оҙаҡ ғазапланып ятмаһын, шундуҡ үлһен..." - нисек итеп шундай закон сығарырға була?"

2010 йыл башланып та өлгөрмәне, Рәсәйҙең киң матбуғат сараларында тағы ла Геннадий Онищенконың яңы тәҡдимдәренән көлөп кенә түгел, мыҫҡыллап тигәндәй яҙылған мәҡәләләр пайҙа булды. Был юлы федераль ведомство етәксеһененең әлеге лә баяғы тәмәке тартыуға һәм эскелеккә ҡаршы һөйләгән һүҙҙәрен утҡа тота икән журналистика киллерҙары. Эш бына нимәлә. Баҡтиһәң, тәмәке һәм алкоголле эсемлектәр етештереүсе компаниялар, әгәр кинофильм геройҙары бер фильмда 7-8 минут дауамында тәмәке тартып, араҡы эсеп ултырһа, уларҙы төшөрөүҙе финансларға риза икән. Онищенко быны кинематографта аҫтыртын рәүештә тәмәке тартыуҙы һәм алкоголь ҡулланыуҙы пропагандалау, тип атаны. Ыңғай геройҙар рәхәтләнеп тәмәке көйрәткәс, ләззәтләнеп араҡы һемергәс, уларға оҡшарға тырышҡан үҫмерҙәргә ни ҡала? Бындай образдар һәр фильм һайын ҡабатлана башлаһа, улар йәш кешенең аҫҡы аңында тоторобкло өлгө рәүешендә нығыясаҡ бит. Тап шуның өсөн табип Онищенко ыңғай геройҙарҙың тәмәке тартыуын, алкоголле эсемлектәр эсеүен күрһәткән эпизодтарҙы яңы фильмдарҙа ҡулланмау яҡлы. "Әтрәгәләмдәр тартһын да, эсһен дә, ти. Улар үҙҙәре үк ытырғаныу уята бит", - ти ул. Ә Онищенкоға ҡәтғи ҡаршы сыҡҡан журналистар уны Штирлицтың папиросын кәнфит менән алмаштырырға теләүҙә ғәйепләй башланы.

Халыҡ һаулығын ҡайғыртыусының Рәсәй армияһында тәмәке тартыуҙы тыйырға саҡырыуы ла тәмәкеселәр хоҡуҡтарын яҡлаусыларға етә ҡалды. Журналист Дмитрий Быков "Труд" гәзитендә баҫылған мәҡәләһендә совет армияһында хеҙмәт иткән саҡта аслыҡтан тик сигарет тартып ҡына ҡотолоуы тураһында яҙа. Үәт, исмаһам, алдаҡсы ла алдаҡсы, Хужа Насретдин (барон Мюнхгаузен хаҡында әйтеп тә тормайым) ары торһон! Ошо ҡәләм, дөрөҫөрәге, компьютер клавиатураһы оҫтаһы тынғыһыҙ Онищенконы мәғәнәһеҙ эш менән булышыуҙа, йәғни, Быковса әйткәндә, "онизм"да ғәйепләй (үҫмерҙәргә хас бер сетерекле ғәмәлгә ишаралай инде, йәнәһе). Минеңсә, Быковтың үҙенең мәғәнәһеҙ уйҙырмаларын "онизм" тип түгел, етлекмәгән, йәғни "сей-онизм" тип атау йәтешерәк булыр ине.

Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ, тиҙәр халыҡта. Ә Геннадий Онищенко дөрөҫөн һөйләй: Рәсәйҙә йыл әйләнәһенә 400 миллиард дана сигарет етештерелә, һәм яңы тыуған сабыйҙан башлап, ҡарт-ҡороға тиклем һәр кемгә 2911-әр дана тура килә. Һис тартып бөтөрөрлөк түгел бит! Ҡайһы илдә үҙ халҡын шулай ағыулайҙар икән, билдәһеҙ. Тәмәке төтөнөнә уралып, хәмер йылғалары аға. Рәсәйҙең 2 миллион 200 мең алкоголигының үксәһенә тағы ла 500 меңдән артыҡ хәмерһеҙ йәшәй алмаусылар баҫып килә...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Беҙгә лә, бынан ни барыһы 100 йыл элегерәк тәмәке лә тартмаған, араҡы ла эсмәгән халыҡ вариҫтарына, уйланырға ерлек бар. Ысын мәҙәнилегебеҙҙе яһалма һәм ялған, сит-яттарҙан отоп алынған алама күренеш-ғәҙәттәрҙән таҙарта алһаҡ ине. Мин бәләкәйерәк саҡта эскесе әҙәмдәрҙе генә түгел, тәмәке тартыусыларҙы ла аяуһыҙ мәсхәрәләп көләр инеләр. Уҫал ҡушаматтар, төртмәле таҡмаҡтар, тапҡыр әйтемдәр шул хаҡта һөйләй. Ни эшләптер, шуларҙың береһе хәтеремә һеңеп ҡалған: "Тәмәкесе - минән кесе, алабута күмәсе...". Әлеге яманаты сыҡҡан тәмәке һәм алкоголь апологеттарын да "алабута күмәсе", тип атар инем дә, заманында алабута халҡыбыҙҙы аслыҡтан ҡотҡарып ҡалғанлыҡтан, тел әйләнмәй. "Тилебәрән күмәсе", тиһәк, таман булыр: аҡыллы булып күренергә тырышһалар ҙа, улар ошо үлән күмәсен ашап тилергән бәрән һымаҡ ҡоторалар түгелме һуң?**

**Вәли ИҘРИСОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Былтыр Башҡортостанда күп балалы ғаиләләргә ярҙам итеү системаһы үҙгәртелде. Биш һәм унан да күберәк бала тәрбиәләнгән ғаиләләргә ҡарата яңы социаль йөкләмәләр үтәүҙе республика үҙ иңенә алды. Мәҫәлән, бындай ғаиләләргә хәҙер торлаҡ сертификаты бирелә. Бөгөнгә шундай 25 ғаилә ошо сертификат ярҙамында торлаҡ шарттарын яҡшырта алды, тағы өс ғаилә өсөн был мәсьәлә хәл ителеү өҫтөндә.

✓ 11-17 ғинуарҙа Башҡортостанда 15076 кеше, шуларҙың 10643-ө балалар, киҫкен респиратор ауырыуҙары менән ауырып алды. Әле ауырыусылар һаны үҫеү өҫтөндә, әммә эпидемия хәленән түбәнерәк. Әле республикала һаулыҡ һаҡлау, социаль, мәғариф учреждениелары хеҙмәткәрҙәренә, балаларға һәм студенттарға сусҡа киҙеүенә ҡаршы прививкалар яһау дауам итә. Ул 367,6 мең кешегә яһалған да инде. Был маҡсатта республика бюджетынан 60 миллион һум аҡса бүленгән.

✓ Юл-транспорт ваҡиғаһы осраҡтарында бәләгә тарығандар янында, ғәҙәттә, иң тәүҙә водителдәр һәм эске эштәр министрлығы хеҙмәткәрҙәре булала һәм улар тәүге медицина ярҙамы күрһәтә белергә тейеш. Шуға күрә лә "2006-2012 йылдарға "Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген көсәйтеү" федераль маҡсатлы программаһы сиктәрендә БР Һәләкәт медицинаһы үҙәге нигеҙендә Уҡыу-методик үҙәк булдырылды. Уны йыһазландырыу маҡсатында федераль бюджеттан - 2 миллион, республиканан 700 мең һум аҡса бүленде. БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы иһә үҙәк биналарын йыһазландырыуға 900 мең һум аҡса бирҙе.

✓ Бөрө ҡалаһында "Кәрәшен һыуыҡтары - 2010" асыҡ эстрада йыр һәм бейеү фестиваль-конкурсы асылды. Ошо уңайҙан Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов ҡатнашыусыларҙы ҡотлап, ун алтынсы йыл рәттән ойошторолған сараның мәҙәниәтте үҫтереүҙә мөһим этәргес булыуын белдерҙе.

✓ Быйыл февралдән почта хеҙмәте тарифтарының да хаҡы 12 процентҡа артасаҡ. Мәҫәлән, ябай почта карточкаһы ебәреү - 7 һум 70 тин, заказ карточка - 18 һум, 20 грамлы ябай хат - 10 һум 50 тин, заказ хат 24 һум 15 тин, 100 грамлы ябай бандероль 23 һум 10 тин торасаҡ.

✔ *Кавказды ҡорал көсө менән дә, миллиардлап аҡса ярҙамында ла, муллап таратылған орден-миҙалдар менән дә аяҡҡа баҫтырып, Мәскәүгә табындырып ҡуйып булмаясағын Үҙәк власть бөгөн аңламай шикелле.*



*АҘНА ШАНДАУЫ*

# КАВКАЗДЫ АЙЫРЫП СЫҒАРҘЫЛАР

## Хәйерлегәме?

**"Крокодил Гена һәм уның дуҫтары" тигән китапты уҡығанығыҙ барҙыр бит? Ундағы бер персонажды иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле. "Күҙҙәре филиндыҡы кеүек ҙур һәм һары, башы ҡуяндыҡы һымаҡ түңәрәк. Ҡойорого ҡыҫҡа һәм йонтаҫ, айыу балаларыныҡына оҡшаған. Ә ҡолаҡтары иһә... Ундай ҡолаҡтар бер хайуанда ла юҡ шикелле". Таныныҡыҙмы? Был бит Чебурашка, тиерһегеҙ. Эйе, тап шулай. Әфлисундар араһынан килеп сыҡҡан ғәжәйеп бер йәнлек тураһында һүҙ бара унда. Тәбиғәттә юҡ. Ә әкиәттә, тимәк, яҙыусының һәм уҡыусыларҙың фантазияһында бар.**

Ул саҡта президент булған Владимир Владимирович Путиндың указы менән 2000 йылдың 13 майында барлыҡҡа килгән федераль округтар тап ана шул Чебурашка кеүек. Бер ҡараһаң, улар бар һымаҡ. Әммә Рәсәй Конституцияһында улар хаҡында бер һүҙ ҙә юҡ. Улар Рәсәй Федерацияһының субъектары ла, административ-территориаль берәмектәре лә түгел. Ләкин бына инде ун йыл улар нисектер эшләп килә. Уларҙың "баш ҡала"лары, үҙенсәлекле "етәксе орган"дары бар. Улар бер нәмә өсөн дә яуап бирмәй, әммә бөтәһен дә белергә һәм бар нәмәлә ҡатнашырға теләй. Ни өсөн булдырғайны һуң Рәсәй Президенты был "чебурашкаларҙы" (әйткәндәй, уларҙы ойоштороғандан һуң дәүләтебеҙ "матрешка" уйынсығына бигерәк ныҡ оҡшай башланы түгелме)? Журналистар фекеренсә, үҙаллы эштәргә һәм йәшәргә өйрәнеп барған ҡайһы бер төбәктәрҙе "ауыҙлыҡлау" маҡсатында. Суверенитет менән артыҡ "мауығыусы" ҡайһы бер милли республикаларҙы теҙгендә тотоу өсөн. Эйе, сер түгел, Президенттың округтарҙағы тулы хоҡуҡлы вәкилдәре тәүҙән үк урындағы законларҙы федераль ҡанунйәт менән яраҡлаштырыу, ғөмүмән, төбәктәрҙе "тынысландырыу" эшенә әүҙем тотондо. Журналистар хатта уларҙың етәкселәрен генерал-губернатор, тип атап маташты. Йәнәһе, Рәсәй яйлап ҡына 1917 йылға тиклем булған административ-территориаль бүленешкә ҡайтыу юлына баҫты. Тиҙҙән, бик тиҙҙән төбәктәр - республикалар, крайҙар һәм өлкәләр федераль округтар сиктәрендә берләштерелерсәк һәм, ниһайәт, берҙәм һәм иң мөһиме, унитар Рәсәй, тип ауыҙ һыуын ҡоротоусыларҙың көнө етәсәк. Улай булмай сыҡты. Төбәктәр үҙҙәренсә, федераль округтар үҙҙәренсә йәшәүен дауам итте. Эйе, дәүләт ҡаҙнаһынан аҡса алып ултырыусы чиновниктарҙың бермә-бер һаны артты. Хәҙер улар Мәскәүгә һәм төбәктәрҙә генә түгел, федераль округтарҙың "баш ҡала"ларында ла ишәйҙе.

Үткән аҙнала хәл ҡырҡа үҙгәреп китте. Федераль округтар институты яңы һулыш алды, тиергә лә мөмкин. Президент Дмитрий Медведевтың указы менән яңы, һигеҙенсе федераль округ булдырылды. Ябай округ түгел бит әле ул. Төньяҡ Кавказдың иң ҡатмарлы төбәктәре тупланған унда. Үҙәктең дотацияларынан тыш йәшәй алмаған һәм көн дә шартлауҙар яңғырап торған Дағстан һәм Ингушетия, ер өсөн ыҙғыштар тынмаған Ҡабарҙа-Балҡар республикаһы, Ингушетия менән 90-сы йылдарҙан бирле конфликт хәләндә булған Төньяҡ Осетия, рәсми рәүештә именлек урынлаштырылған булһа ла, һаман боевиктар менән көрәшкән Чечня, ҡарасәй һәм черкес милли сәйәси элиталары араһында власть өсөн асыҡтан-асыҡ көрәш барған Ҡарасәй-Черкес республикаһы һәм берҙән-бер милли республика статусына эйә булмаған төбәк - Ставрополь крайы. Округтың "баш ҡалаһы" итеп Пятигорск ҡалаһын һайлау ҙа осраҡлы күренеш түгел. Ул милли республикаларға иң яҡын урыҫ ҡалаһы.

Был федераль округта Рәсәй Президентының тулы хоҡуҡлы вәкиле итеп Красноярск крайының губернаторы Александр Хлопонин тәғәйенләнеүе, уның бер үк ваҡытта Рәсәй Премьер-министрының урынбаҫары вазифаһын биләүе күптәр өсөн көтөлмәгән хәл булды. Беренсенән, Хлопонин Кавказ менән бер нисек тә бәйле түгел. Икенсенән, бындай ҙур хоҡуҡтарға быға тиклем берәү ҙә эйә булғаны юҡ ине әле.

Дөрөҫөн генә әйткәндә, Төньяҡ Кавказ проблемаларын хәл итер өсөн "үҙ кешеһен" ҡуясағы тураһында Президент үткән йылда уҡ Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһен иғлан иткән ваҡытта уҡ белдергәйне. 12 ноябрҙә булды был хәл. Ҡарар ҡабул итеү өсөн Дмитрий Медведевҡа ике айҙан ашыу ваҡыт кәрәк булды. Александр Хлопонинды һайлағанда Президент ни уйланы икән? Красноярск крайының губернаторы ысынлап та Төньяҡ Кавказ проблемаларын хәл итерлек хәлдә, тип уйланы микән ул? Әллә, тик ултырғансы, ошолайтып эшләп ҡарайыҡ, бәлки, берәй йүне сығыр, тип микән?

Рәсәй өсөн Кавказ электән ҡатмарлы бер төбәк булып торҙо. Бер яҡтан, тарихтан күренеүенсә, бында йәшәгән халыҡтар Рәсәйгә ҡушылырға, уның ҡанаты аҫтында йәшәргә теләк белдерә. Икенсе яҡтан иһә, Кавказ халыҡтары Рәсәй экспансияһына ҡаршы көрәш аса. 1785 йылда Рәсәйҙең Кавказдағы наместничествоһы булдырыла. Уның менән башлыса генерал-губернаторҙар идара итә.

Яңы Рәсәй шарттарында ун йылға һуҙылған Чечнялағы һуғыш, Төньяҡ Осетия менән Ингушетия араһындағы ҡан ҡойош, Дағстанда хоҡуҡ һаҡлау органдарына ҡарата ойошторолған террор, балкар халҡының айырылып, үҙ аллы республика булдырырға ынтылышы, Ингушетиялағы сәйәси көрсөк һәм боевиктарҙың акциялары Кавказдағы проблемаларҙы бары тик ҡорал менән генә хәл итеп була, тигән фекерҙе нығытты ғына. Александр Хлопонин хәрби түгел. Ул эшҡыуар. Кавказдағы бар проблемаларҙың иҡтисад менән бәйле булыуы хаҡында илебеҙҙең күренекле ғалимдары быға тиклем әйтеп килде килеүен. Тик уларҙы әлегәсә берәү ҙә тыңламаны. Бәлки, Хлопонин Кавказды сәйәси һәм иҡтисади көрсөктән сығара алыр?

Ғөмүмән, Кавказда йәшәгән халыҡтар хаҡында бөгөн Рәсәйҙә үҙенсәлекле бер фекер формалашҡан: йәнәһе, улар һуғышсан, дөйөм кешелек ҡиммәттәрен ҡабул итә белмәй, урта быуат ҡанундарын хөрмәт итә, ырыуҙарға йәки ҡәбиләләргә тупланып йәшәй һәм ҡан ҡайтарыу, үс алыу, ҡыҙ урлау кеүек ғәҙәттәрҙе өҫтөн күрә, ҡуйынында һәр ваҡыт хәнйәр йөрөтә. Ошо образға ярашлы, Кавказ халыҡтарын цивилизацияға ылыҡтырырға маташтылар. Улар ҡаршы килһә, ҡорал көсөн ҡулландылар. "Аватар" кинофильмын ҡарағандар мине яҡшы аңлар. Һәр бер халыҡ, хатта ул бер нисә тиҫтә кеше генә тәшкил иткән хәлдә лә, үҙ ғәҙәттәренә, йолаларына ярашлы тормош көтөү мөмкинлегенә эйә булырға тейеш. Беҙҙә иһә йөҙәр йылдар буйына халыҡтарға башҡаса йәшәү рәүешен көсләп тағырға маташалар ҙа, һуңынан килеп тыуған хәлгә аптырап ҡарайҙар. Шул уҡ Чечняны ғына алайыҡ. Унда барған һуғыш осоронда ҡулына ҡоралдан башҡа бер нәмә лә тотоп ҡарамаған тотош бер быуын үҫеп сыҡты. Бөгөн уларға егерме - егерме биш йәш. Уларҙы аҡса эшләргә, ғөмүмән, ниндәйҙер файҙалы эш менән шөғөлләнергә кем һәм ҡасан өйрәтер икән? Ҡорал ярҙамында теләгән нәмәгә ирешеү күпкә еңелерәк икәнлеген улар яҡшы аңлай бит.

Кавказды ҡорал көсө менән дә, Федераль үҙәктән миллиардлап килгән аҡса ярҙамында ла, муллап таратылған орден-миҙалдар менән дә аяҡҡа баҫтырып, Мәскәүгә табындырып ҡуйып булмаясағын Үҙәк власть бөгөн аңламай шикелле. Ҡаҙна аҡсаһынан Кавказ баш тартмай. Бүләк-наградаларҙы ла кире ҡаҡмай. Шул уҡ ваҡытта бындағы төбәктәрҙең етәкселеге ҡаты тәртип урынлаштырырға ла ашыҡмай. Юғиһә, Мәскәүҙән аҡса килмәйәсәк бит. Ә былай, республикалағы көсөргәнешле хәлгә һылтанып, өҫтәмә ярҙам талап итергә була. Ғөмүмән, Төньяҡ Кавказ "төйөн"өн бер һелтәүҙә өҙә сабып булмай. 30-50-се йылдарҙа Сталин үткәргән милли сәйәсәт арҡаһында барлыҡҡа килгән күп кенә проблемаларҙы бөгөн йәйап, уйлап сисә башларға кәрәк. Балҡарҙарҙың, нуғайҙарҙың, черкестарҙың, башҡа күп кенә милли аҙсылыҡтарҙың милли-сәйәси һәм социаль-иҡтисади мәсьәләләрен хәл итмәйенсә, тарихи ғәҙеллекте тергеҙмәйенсә, дөйөм Кавказ проблемаларын хәл итеү мөмкин түгел. Яңы федераль округ булдырыу ҙа ярҙам итмәйәсәк.

**Таһир ИШКИНИН.**

*СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ*

# ИРЕҢДЕ ХУРЛАМА ЛА...
## маҡтама ла

**Гәзит уҡыусыларыбыҙға биргәйнек был һорауҙы. Әммә әүҙемлек күрһәтеү тойолманы. Бер генә битараф булмаған уҡыусыбыҙ шылтыратып, һорауға үҙ яуабын ишеттерҙе. Шулай итеп, һорау: "Ни өсөн аҡыллы ҡыҙ-ҡатындар аҡыллы ирҙәрҙең - етешһеҙ, башҡаларының өҫтөнлөктәрен күрергә тырыша?"**

- Хоҙай ниңәләр: "Бер яҡшыға - бер яман, бер шаҡшыға - бер яҡшы", - тип кешеләрҙе бер-береһе менән ишләндерә. Иң тәүҙә балаһын уйлаған, ғаилә именлеген ҡайғыртҡан ҡатын-ҡыҙ иһә ошо дисгармонияны тигеҙләргә тырыша: аҡыллы ирҙең ыңғай яҡтарын бик күпертмәй, сөнки үҙен ҡатынынан аҡыллыраҡ тойған ир-ат тормош иптәшен һанға һуҡмай башлауҫан, ә аҡыл ығынан айырылып тормағандарының етешһеҙлектәрен ҡапланҡырап, һәйбәт һыҙаттарын, өҫтөнлөктәрен алға сығарыңҡырай ҡатын-ҡыҙ. Был әйтелгәндәр яраткан кешегә булған мөнәсәбәттәрҙә нығыраҡ сағыла. "Донъяны, эргәбеҙҙәге кешеләрҙе, үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе матурыраҡ итәйек!" тигән рухи талапты ул, бәлки, шулай тормошҡа ашыралыр. Тағы ла ҡатын-ҡыҙ биҙәнергә, үҙен уратып алған бар нәмәне биҙәргә ярата, шул иҫәптән ир-атты ла.

**Нәзирә КӘРИМОВА. Ейәнсура районы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔ Башҡортостанда енәйәттәр һаны кәмеүе күҙәтелгән. Башҡортостан буйынса эске эштәр министры Игорь Алешин әйтеүенсә, төбәктә 10 мең кешегә 186,3 енәйәт осрағы тап килә. Бигерәк тә ауыр һәм айырыуса ауыр енәйәттәр, урлашыу кәмегән.

✔ Ванкуверҙа үткәреләсәк Олимпиада уйындарында Рәсәйҙән ун ике спорт федерацияһы ҡатнашасаҡ. Ил данын 360-лап спортсы яҡлаясаҡ.Ил йыйылма командаһына Башҡортостандан һигеҙ спортсы - Максим Чудов (биатлон), Дмитрий Васильев (саңғыла трамплиндан һикереү), Сергей Масленников (саңғы икеалышы), Вячеслав Кургинян, Руслан Захаров (шорт-трек) һәм "Салауат Юлаев" командаһы хоккейсылары Дмитрий Калинин, Александр Радулов, Сергей Зиновьев, Виктор Козлов алыныр, тип көтөлә.

✔ Быйыл августа Саҡмағош, Шаран, Бүздәк, Туймазы райондарында үтәсәк мәғариф конференцияһында күтәреләсәк төп тема - мәғарифтың заманса муниципаль моделе буласаҡ. Был хаҡта БР мәғариф министры Зиннәт Аллаяров хәбәр итте. Билдәләнеүенсә, республикала мәғариф системаһын үҫтереү һәр ваҡыт социаль-иҡтисади сәйәсәттең иң алдынғы йүнәлештәренең береһе булды. Һандар ҙа ошо хаҡта һөйләй. Мәҫәлән, БР бюджетындағы сығымдар структураһында мәғариф өсөн тотоноуҙар өлөшө 30 процент тәшкил итә.

✔ "Мәктәп директоры - 2010" Бөтә Рәсәй конкурсына ғаризалар йыйыу башланды. Һуңғы өс йылда мәғариф системаһындағы эшендә ярайһы ғына күрһәткестәргә өлгәшкән етәкселәр унда үҙ көсөн һынап ҡарай ала. Конкурста еңеүселәргә 80, 50, 30 мең күләмендә приздар билдәләнгән. Сара ике этапта үтә: 1-се этап ситтән тороп үткәрелә. Унда 1 майға тиклем конкурс материалдарын ебәрергә кәрәк.

✔ Баш ҡалала Республика йылын рәсми асыу тантанаһы булып үтте. Унда БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев, Башҡортостан райондары һәм ҡалалары хакимиәттәре башлыҡтары ҡатнашты. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев сығышынан һуң баш ҡаланың "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле тарафынан бик матур ойоштороған тамаша күрһәтелде.

✓ "Мәктәптәрҙе ябырға ярамай, был республика етәкселегенең ныҡлы позицияһы. Бөгөн мәктәпте япһаҡ, иртәгә ауыл булмаясаҡ", - тине Премьер-министр.



ДӘҮЛӘТ ХӘСТӘРЕ

# БАЛАЛАР АҠСАҺЫ... арта бирҙе

**РФ Социаль страховка фондының Башҡортостан буйынса төбәк бүлексәһе эшләмәүсе граждандар, шулай уҡ ойошмалар бөтөрөлөү менән бәйле эштән бушатылған ҡатын-ҡыҙҙар иғтибарына шуны белдерә: 2010 йылдың 1 ғинуарынан халыкты социаль яҡлау органдары тарафынан түләнә торған пособиелар кимәле түбәндәгесә буласаҡ:**

- ойошмалар бөтөрөлөү, физик берәмектәрҙең шәхси эшҡыуар сифатында эшмәкәрлеген туҡтатыу, шәхси эш менән шөғөлләнеүсе нотариустарҙың вәкәләттәре туҡтатылыу һәм адвокат статусы менән бәйле, шулай уҡ федераль законларға ярашлы һөнәри эшмәкәрлеге дәүләт теркәүенә һәм лицензияланырға тейеш булған башҡа физик берәмектәрҙең эшмәкәрлеге туҡтатылыу менән бәйле эштән бушатылған ҡатын-ҡыҙҙарға йөклөлөк һәм бала табыу буйынса пособие - 473, 89 һум;
- ойошма бөтөрөлөү сәбәпле эштән бушатылған һәм йөклөлөктөң тәүге осорҙарында уҡ медицина учреждениеларында иҫәптә торған ҡатындарға бер тапҡыр түләнә торған пособие - 473, 89 һум;
- бала тыуғандан һуң бер тапҡыр түләнә торған пособие - 12637,17 һум;
- хеҙмәткә ваҡытлыса яраҡһыҙлыҡ осрағына мотлаҡ социаль страховка ҡаралмаған кешеләргә бала ҡараған өсөн түләнеүсе айлыҡ пособие һәм әсә булыу менән бәйле (шул иҫәптән белем биреү учреждениеларында көндөҙгө бүлектә уҡыусыларға) тәүге балаһын ҡараған өсөн - 2369,47 һум; икенсе һәм унан һуңғы балалар өсөн - 4738,94 һум;
- бала ҡарау буйынса отпуск осоронда ойошмалар бөтөрөлөү сәбәпле эштән бушатылған, шәхси эшҡыуар сифатында эшмәкәрлеген туҡтатыу, шәхси эшен асҡан нотариустарҙың вәкәләтлеге туҡтатылыу һәм федераль закондарға ярашлы һөнәри эшмәкәрлеге дәүләт теркәүенә һәм лицензияланырға тейешле башҡа физик берәмектәр (артабан - бала ҡарау буйынса отпуск осоронда эштән бушатылған кешеләрҙең) эшмәкәрлеге туҡтатылған осраҡта бала ҡарау буйынса айлыҡ пенсияның иң түбән күләме тәүге бала өсөн - 2369,47 һум, икенсе һәм унан һуңғы балалар 4738,94 һум тәшкил итә.
- бала ҡарау буйынса отпуск осоронда эштән бушатылған кешеләргә бала ҡараған өсөн айлыҡ пособиеның иң юғары күләме 9477,88 һум тәшкил итә.

* * *

**Эшкә ваҡытлыса һәләтен юғалтҡан осраҡта мотлаҡ социаль страховка аҡсаһы иҫәбенә пособие күләмдәре түбәндәгесә:**

- йәш ярым тулғанға тиклем бала ҡарау буйынса айлыҡ пособие бала ҡарау буйынса отпуск алдынан эшләнгән 12 календарь айҙағы уртаса эш хаҡының 40 проценты күләмен тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта пособиеның иң түбән күләме - һәр календарь ай өсөн 13 833,0 һум.
- бала тыуғас, бер тапҡыр бирелә торған пособие күләме - 12 637,17 һум;
- йөклөлөктөң тәүге осоронда уҡ медицина учреждениеларында иҫәпкә торған ҡатындарға бер тапҡыр түләнә торған пособие күләме - 473,89 һум.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Былтыр "Рәсәй Федерацияһында урындағы үҙидараны ойоштороуҙың дөйөм принциптары тураһында"ғы Федераль закон бар тулылығында ғәмәлгә ашырыла башланы. Башҡортостанда халыҡҡа иң яҡын торған идара итеү органдарының эшмәкәрлеген көйләүгә ҙур иғтибар бүленә, йыл һайын күсмә семинарҙар уҙғарылып, был өлкәләге проблемалар тикшерелә, тупланған тәжрибә менән уртаҡлашыу ойоштороla. Өфө ҡалаһында муниципаль район һәм ҡала округтары хакимиәттәре башлыҡтарының ошо аҙнала уҙғарылған сираттағы семинарында урындағы үҙидара өлкәһендә барған реформаларҙың һөҙөмтәлелеге хаҡында һүҙ барҙы. Семинарға Мәскәүҙән абруйлы ҡунаҡтар ҙа килгәйне.**

# УРЫНДАҒЫЛАР...

## кеше мәнфәғәте өсөн эшләй



"Һуңғы тапҡыр мин Башҡортостанда 14 йыл элек булғайным. Республика йөҙөндә аэропорт юлынан уҡ тойола башлаған прогресҡа, үҙгәрештәргә ныҡ ғәжәпләндем, - тине Рәсәй политологтары союзы рәйесе Николай Медведев. Билдәле сәйәсәт белгесе, Башҡортостанда муниципалитеттарҙың күп булыуына ҡарамаҫтан, уларҙың башҡа төбәктәр менән сағыштырғанда күпкә һөҙөмтәлерәк структураһы булдырылыуы тураһында белдерҙе.

Федерация Советының Урындағы үҙидара мәсьәләләре буйынса комитеты рәйесе Степан Киричук семинарҙы бына нисек баһаланы: "Һеҙҙә эш бик яҡшы ҡуйылған. Хөкүмәтегеҙҙең ҡатнашыуы бигерәк тә файҙалы. Мөмкинлек булған осраҡтарҙа мин һеҙҙең тәжрибәгеҙ хаҡында мотлаҡ һөйләйәсәкмен. Яңғыҙың ғына бер ни ҙә эшләп булмай. Мин федераль властың да ошондай үҙ-ара йоғонтоло эштә әүҙем ҡатнашыуын теләр инем".

Төрлө кимәлдәге власть органдарының килешеп эшләүенә өлгәшеү - әлеге форумдың төп маҡсаттарының береһе. Семинар эшендә ҡатнашып, үҙенең төплө фекерҙәре һәм тәҡдимдәре менән уртаҡлашҡан БР Хөкүмәтенең Премьер-министры Раил Сарбаев төбәктәрҙең хәл ителмәгән проблемаларын тикшереүҙә федераль властың әүҙемерәк ҡатнашыуы зарурлығын белдерҙе. Ул мәғариф өлкәһендә "өҫтән" төшөрөлгән федераль норматитварҙың мәктәп эшмәкәрлеген көйләүҙә яңы ауырлыҡтар тыуҙырыуын миҫал итеп килтерҙе.

"Кластағы балалар һаны ауыл мәктәбендә - 15, ҡаланыҡында 25 булырға тейеш. Уҡыусылар етмәй икән, мәктәпте ябырға тура килә. Ә мәктәптең ябылыуы урындағы халыҡ өсөн хакимиәт башлығының насар эшләүен һәм уны урынынан бушатыу кәрәклеген аңлата. Ә хакимиәт башлығына ҡуйылған нормативҡа ярашлы ҡарар ҡабул итергә тура килә бит. Мәктәптәрҙе ябырға ярамай, был республика етәкселегенең ныҡлы позицияһы. Бөгөн мәктәпте япһаҡ, иртәгә ауыл булмаясаҡ", - тине Премьер-министр. Ул ошо көнүҙәк мәсьәләне Федераль үҙәктән бер кемдең дә тикшерергә теләмәүе тураһында белдерҙе.

Хөкүмәт етәксеһенең шулай уҡ шәхси хужалыҡтарҙы теркәү һәм уларға һалым нормативтарын билдәләүҙең һис кәрәкмәгән ғәмәл булыуы тураһында фекере әһәмиәтле. "Беҙ ғәмәлдә ауыл хужалығын юҡҡа сығарасаҡбыҙ. Республикала 510 мең шәхси хужалыҡ бар. Уларға һалым һалыуҙан ғына әллә ниндәй килем алып булмаясаҡ. Ә был кешеләрҙә хәүеф уятасаҡ. Кеше нисә баш мал аҫрауын да йәшерергә тырышасаҡ, сөнки малдарын иҫәпкә алып, көс етмәслек һалым түләүгә дусар ителеүҙән ҡурҡа улар", - тип, Премьер-министр семинарҙа ҡатнашыусыларҙың иғтибарын тағы ла бер киҫкен проблемаға йүнәлтте.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Семинарҙа ҡатнашыусылар Өфө ҡала округы хакимиәтенең эш тәжрибәһе менән яҡындан таныша алды. Ҡала етәксеһе Павел Качкаев финанс көрсөгө шарттарына ҡарамаҫтан, баш ҡалала сәнәғәт, тауар етештереү, хеҙмәтләндереү, торлаҡ төҙөлөшө, капиталь ремонт, сауҙа итеү өлкәләренең тотороҡло эшләүе хаҡында һөйләне. 2009 йылда өфөләләрҙең уртаса эш хаҡының 19,5 меңгә етеүе, демографик хәлдең яҡшыра биреүе лә ҡыуаныслы күренеш. "Бына икенсе йыл халыҡтың тәбиғи үҫеше шарттарында йәшәйбеҙ. Ул илебеҙҙә теркәлгән күрһәткестәрҙең иң юғарыларынан булып, 1591 кешегә етте", - тине баш ҡала хакимиәте башлығы Павел Качкаев.**

**Семинарҙа ҡатнашыусылар Өфөлә тәүләп ғәмәлгә индерелгән "Электрон муниципалитет" проекты менән танышты. Был ҡатмарлы электрон система ғәмәлдә ҡала тормошоноң бар өлкәләрен дә үҙ эсенә ала. Бигерәк тә был һаулыҡ һаҡлау, социаль яҡлау, ҡала коммуналь хужалығына ҡараған объекттар менән электрон бәйләнеш булдырыу, муниципаль идара итеүҙе автоматлаштырыу йәһәтенән бик отошло. Был проект артабан киңәйә һәм камиллаша барып, ҡалала йәшәүселәрҙең мәнфәғәтенә хеҙмәт итәсәк. Мәҫәлән, ошо проект сиктәрендә булдырылған "Электрон регистратура" хеҙмәте эшләй башланы. Өфөнөң барлыҡ дауалау учреждениелары дөйөм селтәргә тоташтырылғас, һәр кем үҙ йортонан интернет йәки берҙәм телефон номеры аша табипҡа ҡаралыу өсөн яҙылыу мөмкинлеген алды.**

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Ял көнөндә иртәнге сәғәт 10-да В. Комаров исемендәге Балалар ижады һарайында каратэ-до фудокан-шотокан буйынса Өфө беренселеге һәм чемпионаты үтә. Спорт һөйөүселәр шулай уҡ шәмбе һәм йәкшәмбе 12 сәғәттә "Трамплин"да "Саңғы саҡыра" тигән саңғы ярыштарында ҡатнаша, шәмбелә 14 сәғәттә "Аҡбуҙат" ипподромында ат ярыштарын тамаша ҡыла ала.

✓Өфө Эшҡыуарҙар союзының халыҡты ҡабул итеү бүлмәһе бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттары эшмәкәрлеге мәсьәләләре буйынса бушлай шәхси кәңәштәр бирә. 27 ғинуарҙа "Респект" хоҡуҡ компанияһында - реклама буйынса, 3 февралдә "БизнесПомощь" йәмғиәтендә - договорҙар төҙөү, 10 февралдә Өфө Эшҡыуарҙар союзында - яңы эш асыу, 17 февралдә "БизнесПомощь"та - кадрҙар документтары әйләнеше, 24 февралдә Өфө эшҡыуарҙар союзында - хеҙмәткәрҙәрҙе мотивациялау ысулдары тураһында кәңәштәр алып буласаҡ. 16-18 сәғәттәрҙә ошо адрес буйынса мөрәжәғәт итегеҙ:Өфө ҡалаһы, СССР-ҙың 50 йыллығы урамы, 48/1-се йорт, 201-се бүлмә.

✓2008-2009 йылдарҙа баш ҡалала 49294 кв. метрлы 127 туҙған йорт һүтелде һәм уларҙа йәшәүсе граждандар өсөн 64781 метр майҙанлы 23 яңы йорт төҙөлдө. Бының өсөн Федераль бюджеттан 1,1 млрд һум, ҡала бюджетынан - 1,992 млрд, республика бюджетынан 721 млн һум аҡса тотонолдо. Баш ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә ошо туралағы мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнеүенсә, граждандарҙы туҙған йорттан күсереү темпы тағы ла шәберәк барыр ине, тик быға күптәрҙе суд тәртибендә күсереү кеүек хәлдәр ҡамасаулай.

✓Яңы йыл алдынан баш ҡалала "Вьюговей-2010" конкурсы иғлан ителгәйне. Һауа шарттары ҡырыҫ тороуға ҡарамаҫтан, баш ҡала майҙандары байрамға матур итеп әҙерләнде. Бигерәк тә Киров районы был йәһәттән айырылып торҙо. Шуға ла был районға хаҡлы рәүештә конкурстың беренсе призы бирелдә. Икенсе урынды Совет һәм Ленин райондыры бүлеште, өсөнсө урынға Дим районы сыҡты.

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ДОНЪЯ БУЙЛАП ХӘБӘР ЙӨРӨЙ...

## Башҡортостан хаҡында




**Һуңғы йылдарҙа Башҡортостан тураһында заманса мәғлүмәт бөтә донъя илдәре буйлап тарала, республикабыҙҙың халыҡ-ара бәйләнештәре бик әүҙем үҫешә бара.**

Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының мәғариф, фән һәм мәҙәниәт буйынса махсус ойошмаһы - ЮНЕСКО менән дә бәйләнештәребеҙ бик тотороҡло. 1998 йылда БР Президенты М.Ғ. Рәхимов Указы менән Башҡортостан Республикаһының ЮНЕСКО эштәре буйынса Комитеты булдырылған, ошо юҫыҡта байтаҡ эштәр башҡарылды. Шуларҙың иң күренеклеһе - 2008 йылда ЮНЕСКО-ның Париждағы штаб-квартираһында Рәсәй дәүләтенә ирекле ҡушылыуҙың 450 йыллығына арналған Башҡортостан Республикаһы презентацияһы. Унда ЮНЕСКО эргәһендә аккредитацияланған 120 ил вәкиле ҡатнашлығында тыуған төйәгебеҙҙең тарихи-мәҙәни, ғилми, тәбиғи потенциалын сағылдырған күркәм саралар уҙғарылды. Рәсәй субъекттарынан Мәскәүҙән ҡала икенсе булып, Башҡортостан Республикаһы һәм ЮНЕСКО араһында хеҙмәттәшлек тураһында Коммюникеға ҡул ҡуйылды.

2010 йыл ЮНЕСКО тарафынан Халыҡ-ара мәҙәниәттәр яҡынлашыуы йылы, тип иғлан ителде. Ә ошонан аҙ ғына алдараҡ "Вестник Российской Федерации по делам ЮНЕСКО" тип аталған журналдың тулыһынса Башҡортостан Республикаһына арналған 9-сы һаны баҫылып сыҡты. Журналдың махсус сығарылышының төп темаһы - "Мәҙәниәттәрҙең донъя диалогында Башҡортостан Республикаһы". Бай йөкмәткеле һәм сағыу иллюстрацияланған баҫмала республикабыҙҙың тарихы, бөгөнгө социаль-иҡтисади торошо, мәҙәниәте, сәнғәте, кеше потенциалы, арҙаҡлы шәхестәре һәм тәбиғәт мөғжизәләре хаҡында күркәм мәҡәләләр урын алған. Бөтә материалдар рус һәм инглиз телендә баҫылған. Журналдың ошо һаны Башҡортостанда һәм Рәсәйҙә генә түгел, ЮНЕСКО менән тығыҙ хеҙмәттәшлек алып барған 200-ләп донъя илдәрендә лә таратыласаҡ.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*

### АТАЙ ҘА БАЛА ҠАРАЙ

**Ике балабыҙ бар, өлкәненә - 3 йәш, бәләкәйе 2 айлыҡ ҡына әле. Ҡатыным - студентка. Өлкәнебеҙҙе больницаға һалалар, ошоға бәйле минә хеҙмәткә ваҡытлыса яраҡһыҙлыҡ бюллетене асырҙармы? Эш урынынан 3 йәшкә тиклемге баланы ҡарау өсөн отпуск бирәләме?**

- Әсә кеше яңы тыуған баланы ҡарау өсөн бирелә торған отпускыға хоҡуғы менән файҙаланмаһа, ул хоҡуҡ менән ире файҙалана ала. Йәш ярымға тиклемге бала өсөн пособие күләме уртаса эш хаҡының 40 процентын тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта 1,5 йәшкә тиклемге икенсе бала өсөн пособие 3746 һумдан да кәм булырға тейеш түгел. Был осраҡта тәүге баланы ҡараған өсөн хеҙмәткә ваҡытлыса яраҡһыҙлыҡ көндәре түләнмәй. Ә ғөмүмән алғанда, баланың атаһына бюллетень әсәләргә түләнгән кеүек үк тәртиптә башҡарыла.

### МИРАҪ КЕМГӘ ТЕЙЕШ?

**Өләсәйем менән ҡартатайым 36 йыл бергә йәшәне, ләкин никахтары рәсми теркәлмәгән. Фатирҙы икәүһе исеменә хосусилаштырҙылар. Өләсәйемдең улы (минең атайым) бар, ә ҡартатайҙың балалары юҡ, ул атайымды рәсми рәүештә уллыҡҡа алмаған. Яңыраҡ ҡартатай вафат булды. Өләсәйемә вариҫсы хоҡуғына инеү нисек башҡарыла? Ул фатирға берәйһен теркәй аламы?**

- Никахтары рәсми теркәлмәгән булһа, өләсәйегеҙгә ҡартатайығыҙ менән туғанлыҡ мөнәсәбәттәрен суд аша раҫлатырға тура киләсәк. Әгәр суд уларҙың никах мөнәсәбәттәрен билдәләү тураһында ҡарар сығарһа, шунан һуң ғына нотариус мираҫ ҡабул итеү тураһында мәсьәләне ҡарай ала. Вафат булғандан һуң 6 ай үткәс, ҡартатайығыҙҙың башҡа вариҫсылары булһа - шундай мәсьәләләр ҡараласаҡ, шуға күрә өләсәйегеҙ ваҡытында нотариусҡа мөрәжәғәт итергә тейеш.

Ә фатирға теркәү мәсьәләһен өләсәйегеҙ ирекле хәл итә ала, сөнки ул был фатирҙың 1/2 өлөшөнә хужа.

### АДВОКАТ ЯРҘАМ ИТӘМЕ?

**Һигеҙ мең һумға адвокат хеҙмәте күрһәтеү тураһында, юридик фирма менән килешеү төҙөнөк, ләкин ярты йыл үтеп китте, ә адвокат бер ни ҙә эшләмәне. Килешеүҙе гәмәлдән сығарыу ниәтендә беҙ был фирмаға шылтыратһаҡ та, офистарына килһәк тә, улар беҙҙең менән осрашыуҙан ҡаса башланы. Быңдай осраҡта ҡайҙа мөрәжәғәт итергә?**

- Юридик хеҙмәттәр юридик фирма йәки адвокатура берәмектәре тарафынан тәьмин ителә. Әгәр килешеү адвокатура берәмеге менән төҙөлгән булһа, уларҙың эшенә ялыу менән Адвокаттар палатаһына мөрәжәғәт итергә кәрәк. "Рәсәй Федерацияһында адвокат эшмәкәрлеге һәм адвокатура тураһында" Федераль закондың 17-се статьяһына ярашлы, ышаныслыһы алдында үҙенең профессиональ бурысын башҡармаған йә иһә тейешле кимәлдә башҡармаған хәлдә, квалификация комиссияһы һығымтаһы нигеҙендә РФ субъектының Адвокаттар палатаһы советы ҡарары менән адвокат статусы туҡтатылырға мөмкин. Әгәр ҙә килешеү юридик фирма менән төҙөлгән икән, был осраҡта РФ Граждандар-процессуаль кодексының 131-се статьяһына ярашлы, судҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Һорауҙан аңлашылыуынса, фирма килешеү шарттарын үтәмәгәнлектән, һеҙ уны гәмәлдән сығарыуҙы талап итә алаһығыҙ. Был осраҡта РФ Граждандар кодексының 453-сө статьяһында ҡаралғанса, әгәр килешеүҙе үҙгәртеү йәки гәмәлдән сығарыуға нигеҙ булып яҡтарҙың береһе тарафынан уның боҙолоуы танылһа, икенсе яҡ килешеүҙе гәмәлдән сығарыу менән бәйле зыянды ҡаплатыуҙы талап итергә хоҡуҡлы.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

### БЕР БҮРЕГӘ - ӨС МЕҢ

**Былтырғы ҡышҡы маршрут иҫәбе буйынса республикала 513 бүре теркәлгәйне. Күсеп йөрөүсе был йыртҡыстар апрелдән августа тиклем, йәғни инә бүреләр көсөкләгән осорҙа ғына бер урында төйәкләнә. Әлеге ваҡытта республика урмандарын гиҙеп йөрөүсе бүреләрҙе иҫәпләү бара. Уларҙың һаны ҡырҡа артҡан осраҡта ҡороуҙы иҫкәртеү маҡсатында йәнлектәрҙе атыу башлана. Был сараларға республика бюджетынан аҡса бүленә.**

1 ғинуарҙан 15 апрелгә тиклем бүре менән төлкөгә, аҙаҡ уларҙың тиреһен тапшырыу шарты ҡуйылып, рөхсәт ителгән ысулдар менән һунар иғлан ителде. Һунарсылар үлтерелгән бер бүре тиреһе өсөн - 3 мең һум премия аласаҡ, ә төлкө тиреһе 200 һумға баһаланды. Бөтәһе 100 бүре һәм 550 төлкөгә һунар рөхсәт ителде. Һунарсылар ауланған табышты был төр йәнлектәрҙең ҡотороу фактын тикшереү өсөн "БР Һунарсылар һәм балыҡсылар ассоциацияһы"на тапшырырға бурыслы. Ошонан һуң ғына табыш өсөн аҡса түләнәсәк.

БР Экология министрлығының хайуандар донъяһын һаҡлау идаралығы начальнигы Илдус Яхин әйтеүенсә, 1 ғинуарҙан алып һунарсылар 6 бүре һәм 8 төлкө аулаған да инде - был Шаран районы һунарсыларының эш һөҙөмтәһе.

### ХОСУСИЛАШТЫРЫУ ОҘАЙТЫЛДЫ

**Торлағын хосусилаштырып өлгөрмәгән граждандарға бы гәмәлде ашырып ҡуйыр өсөн тағы ла өс йыл ваҡыт бирелде. РФ Дәүләт Думаһы депутаттары торлаҡты 2013 йылдың 1 мартына тиклем бушлай хосусилаштырыу тураһында закон проектын өс уҡыуҙа бер юлы ҡабул итте. Бының өсөн "РФ Торлаҡ кодексын гәмәлгә индереү тураһында" федераль законға үҙгәртеүҙәр индереләсәк.**

Бынан алда биналарҙы бушлай хосусилаштырыу 2007 йылдың 1 мартынан 2010 йылдың 1 мартына тиклем оҙайтылғайны. Был юлы ла ул тағы өс йылға оҙайтылды. Закон сығарыусыларҙың был ҡарары теләгән бөтә кешеләрҙең дә үҙ торлағы милекселе булып өлгөрмәүе менән аңлатыла. Иң тәүҙә был Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығы хөрмәтенә фатирлы буласаҡ Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына ҡағыла. Икенсе бер сәбәп тә бар: донъя көрсөгө менән бәйле 2009 йылда торлаҡ төҙөү темптарының аҡрынайыуы. Ә был үҙ сиратында һуңлап файҙаланыуға тапшырылыу сәбәпле, торлаҡты законлы милеккә күсереүҙә, һис шикһеҙ, ҡатмарлыҡтар килтерен тыуҙырасаҡ ине.

Закон проектының икенсе яғы - уға ярашлы, хосуси милектән торлаҡты муниципаль милеккә ҡайтарыу ваҡыты ла оҙайтыла. Был иһә алдан күҙалланыуынса, киләсәктә күләме артасаҡ милеккә һалым түләүҙән азат итәсәк.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Ҡышҡыһын бит тиреһен туҡландырыу айырыуса мөһим. Түбәндәге ике битлек бит тиреһен таҙартыу, йәшәртеү менән бергә, күҙ төбөндәге шешкә лә бөтөрә:**

**1)** 1-әр балғалаҡ бал, лимон һуты, ҡаймаҡ, дингеҙ тоҙына виноград емешенең һутын ҡушып болғатырға ла, бит тиреһенә һылап, 20 минут тотҡас, йылы һыу менән йыуып төшөрөп, крем һөртөргә;

**2)** 1 ҡалаҡ эремсекте һөт менән шыйыҡлап, 1-әр балғалаҡ тоҙ менән бал һалып, биткә 20 минутҡа һөртөргә.

**Әгәр ҙә бит тиреһе ҡоро булһа:** 1-әр балғалаҡ ҡаймаҡ менән бал һалып болғатып, бит, муйын тиреһенә һөртөргә һәм 20 минут тотҡас, йылы һыу менән йыуырға.

**Түбәндәге битлек тә яҡшы һөҙөмтә бирә:** 1-әр балғалаҡ ҡырғыстан үткәрелгән кишер менән үҫемлек майына ярты балғалаҡ бал ҡушып, биткә, муйынға һылап, 20 минут тоторға.

Берәй мөһим осрашыу йәки байрам алдынан бер аҙ ябығып алырға теләүселәргә көн дә ҡырғыстан үткәрелгән 100 грамм кишергә 15-20 грамм петрушка тамырын йәки 5 грамм петрушка үләнен турап, 5-әр грамм лимон һуты һәм үҫемлек майы өҫтәп ашарға. Ике аҙна дауамында тоҙҙо аҙыраҡ ҡулланыу, енелсә аштар ашау ҙа 2 килограмм самаһы ауырлыҡтан ҡотолорға ярҙам итер.

Йәйләп ябығыу өсөн 10 грамм меңъяпраҡ үләне, 20-шәр грамм һары мәтрүшкә, киптерелгән диңгеҙ кәбеҫтәһе алып, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм көнөнә стакандың өстән бер өлөшөн йылы көйө өс тапҡыр эсергә. 10 көндән һуң 20 көн ял итеп, тағы ҡабатларға.

10-ар грамм әнис орлоғо, татлы тамыр, 20 грамм киптерелгән диңгеҙ кәбеҫтәһенән төнәтмә эшләп, көнөнә ике тапҡыр ярты стакан эсергә.

Дарыухананан һатып алынған 10 грамм эт муйылы ҡайыры, 20-шәр грамм бөтнөк, петрушка, фенхель емештәре, бәпембә тамырына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, төнгөлөккә йылы көйө эсергә. Был төнәтмәләрҙе ҡулланғанда ит майҙарын, майҙа ҡурылған, тоҙло, маринадлы ризыҡтар ашамаҫҡа һәм күберәк хәрәкәтләнергә кәрәк.

**Флора БИКЕМБӘТОВА**




## ИР БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Ашау ҡағиҙәләре

● Ҡайһы бер хайуандарҙың ите кешеләрҙең күңелен боҙғаны, дошманлыҡ, үс алыу, асыу тыуҙырғаны йәки йөрәкһеҙлеккә килтергәне өсөн, мөмкин булған тиклем үлән аштарын ашарға тырышығыҙ.

● Ит ашамаған халыҡтар башҡаларға ҡарағанда сәләмәтле, ҡеүәтле, шат, һиммәтле булғандары һәм йәш ваҡытта һәр нәмәгә ғәҙәтләнгән өсөн ит ашарға йәш саҡта уҡ ғәҙәтләнмәгеҙ. Йән эйәһенең күҙенән йәш аҡҡанда салып, ҡайнар ҡаҙанға һалып, итен бешереп ашау кеше балаһының күңеленә ауырлыҡ килтерә.

### Эсеү ҡағиҙәләре

● Ашаған ваҡытта эсергә теләһәгеҙ, ауыҙығыҙҙа булғанды йотоп бөтөргәндән һуң ғына эсегеҙ. Эскәндән һуң ауыҙығыҙҙы ҡул йәки кейемегеҙ менән түгел, таҫтамал менән һөртөгөҙ.

● Сәләмәтлек өсөн (күп булмау шарты менән), саф һыуҙа бер нәмә булмаған өсөн, саф һыу эсергә ғәҙәтләнегеҙ, күлдән алынған, еҫләнгән, боҙло һәм ҡарлы һыу эсеүҙән һаҡланығыҙ. Ашағандан ике сәғәт, торғандан бер сәғәт үткәнгә тиклем һәм тирләгәндән һуң һалҡын һыу ҡулланмағыҙ.

● Һөт, ҡәһүә, сәй, лимонад - эсергә яраған әйберҙәр.

● Һөт - балалар һәм кескәйҙәр өсөн еңел үҙләштерелгән эсемлек.

● Һөтлө ҡәһүә ашҡаҙанға файҙалы, үҙләштереүҙе ҡеүәтләндерә. Ул бигерәк тә эҫе илдәрҙә эселә торған эсемлек.

● Сәй (күп булмау шарты менән) - һалҡын илдәрҙә эсеүгә файҙалы эсемлек, ул ашҡаҙанға файҙа бирә, йонсоған кешеләргә ярҙам итә.

● Лимонад - эҫе көндәрҙә эсеүгә файҙалы эсемлек.

● Ишетеү, иҫнәү, күреү ҡеүәтен кәметкәне, һулышты тарайтҡаны, аппетитты бөтөргәне өсөн бер ҡасан да тәмәке тартмағыҙ.

● Малды харап иткәне, үлемгә сәбәп булғаны, үлемесле ауырыуҙар килтергәне өсөн төрлө иҫерткестәрҙән һаҡланығыҙ. Уларҙы ҡулланған кешеләр менән дуҫ һәм таныш-белеш булмағыҙ.

### Табын ҡағиҙәләре

● Ҡунаҡ саҡырырға булһағыҙ, ғөрөф-ғәҙәт буйынса иртәрәк хәбәр итегеҙ.

● Ҡунаҡтарҙы асыҡ йөҙ һәм хөрмәт менән ҡаршы алығыҙ, һәр кемде урынына ултыртығыҙ.

● Ниндәй генә ләззәтле булһа ла, аштарығыҙҙы маҡтамағыҙ, ҡунаҡтарҙы ашарға ҡыҫтамағыҙ(Бер-ике мәртәбә әҙәпле генә әйтһәгеҙ, зарар булмаҫ). Ҡунаҡ итеүсенең вазифаһы ҡунаҡтар алдына аш килтереү була. Ашау һәм ашамау ҡунаҡтарҙың ихтыярындалыр.

● Ҡунаҡтарҙың һәр береһенең янында әҙерәк тороғоҙ, һөйләшегеҙ. Ҡайтҡандарында матур йөҙ менән хушлашып, рәхмәт әйтеп ҡалығыҙ.

● Ҡунаҡҡа саҡырһалар, билдәләнгән ваҡыттан бер нисә минутҡа һуңлап барығыҙ. Йорт хужаһы менән шатланып күрешегеҙ.

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# ТЕЛ СҮПЛӘНӘ, ТЕЛ ЯРЛЫЛАНА...

## Ҡотҡарайыҡ, ау-у-уу!

**Хөрмәтле "Киске Өфө!" Иң уҡымлы гәзиттәрҙең береһенә әйләнеп барыуыңды иҫәпкә алып, һинең биттәреңдә шиғыристарға әҙер рифмалар тәҡдим итмәксемен. Хәҙер бит йырсылар һәләк һөнәрле: үҙҙәре һүҙҙәр теҙмәһе теҙә, үҙҙәре үк шул һүҙҙәрҙең һуҙынҡыларын тындары еткәнсе кинәнеп-кинәнеп һуҙып, шул һуҙымды "йыр" тип атап, сәхнәгә сыға. Улар ишәйгәндән-ишәйә бара, ә борондан ҡалған әҙер рифмалар һаман кәмей.**

Шуға ярҙамға килергә булдым әле. Үҙемдең шиғыр яҙырға дәртем булһа ла, дарманым юҡ, ә әҙер рифмаларҙы әрәм итке килмәй. Фани донъянан китеп барылһа, үҙем менән бергә юҡҡа сығыр, тип борсолам. Рифма тип, бәлки, үҙ ижадымды кәмһетеберәк тә ебәрәмдер. Йыр өсөн әҙер ҡушымта улар. Мөхәббәт тураһындағы йырҙарға айырыуса ҡулайлы булыр, тип уйлайым. Ни тиһәң дә, мин дә йәш булдым. Эх, һөйҙөм дә, һөйөлдөм дә, нәҡ ҡайындар кеүек, мөхәббәттең ялҡынында ла көйҙөм. Шул саҡта үҙ хистәремде рифмаларға һалып, һуҙынҡыларына күкрәгемдә ҡайнап сыҡҡан аҙмаҙ моңомдо ҡушып һуҙып, эс бошҡандарын баҫырлыҡ ҡәҙимге генә көйләп йөрөй торғайным. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы... Шиғыристарға ошондай рифмалар тәҡдим итәм мин:

Малинам, малинам,
Һине һаман һағынам, һағынам.

Вишнәләр, вишнәләр,
Хәлдәремә инегеҙсе,
Аңлағыҙсы, әшнәләр.

Салиха, Салиха,
Сәскәләрен ҡойҙомо икән
Икәүебеҙҙең черемуха?

Абрикос, абрикос,
Әгәр һөйһәң, нығыраҡ ҡос.

Тополь, тополь, тополүк,
Ташлап китмә һин берүк.

Ошондай әҙер ҡушымталарым байтаҡ ҡына. "Ландыштар, ландыштар..." йәки "Ромашкалар, ромашкалар...", тигән йырҙарҙы ишеттем дә, бәй, ынйы сәскә тигән атамаһы булһа ла, ландыштар, тип, болан күҙ тигән ғәжәп матур атамаһы барҙа - ромашкалар, тип йырлайҙар икән, бөтөн сәскәләрҙең дә рус телендәге атамаларына башҡортса рифма уйларға кәрәк, тигән һығымта яһаным, шунан башҡайымды бер туҡтауһыҙ эшләтә башланым. Йәш саҡтарҙағы мутлыҡтар иҫкә төштө. Шиповник, щавель, крапива, папортник тигәндәренә лә рифмаларым бар хатта. Түләүһеҙ өләшәм, ҡәҙерле шиғырист-йырсылар. Мөрәжәғәт итегеҙ үҙемә.

**Ә ШУЛАЙ ҘА...**

**Йөрәк әрней, дуҫтар. Йәштәр генә түгел, билдәле, күренекле, яратҡан йырсыларыбыҙҙың телебеҙҙе ярлыландырып, "ландыштар, ромашкалар" тип йырлауы, тел бутауы аңлашылмай. Уларҙан өйрәнгән йәш йырсыларға ни әйтәһең инде? Йырсылар ғынамы ни! Өлкән быуын, мөмкин булған һәр сараны файҙаланып, йәш быуынға матур, һутлы, һығылмалы, яғымлы, иҫ китмәле бай телебеҙҙе өйрәтә барырға тейеш түгелме? Ә беҙ ярлыландырабыҙ, бутайбыҙ, яңылышабыҙ, башҡортҡа башҡорт телен "русса әйткәндә" тип русса аңлатабыҙ. Балаларыбыҙҙың теле ярлылана бара. Бындай телһеҙлек халҡыңа ҡарата битарафлыҡҡа килтерәсәк бит.**

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ШАҢДАУ



# ҠЫШ БАБАЙ УРЫНЫНА...

## Суфый аҡһаҡалыбыҙҙы ҡайтарайыҡ

**Әхмәр Үтәбайҙың "Башҡорт Ҡыш бабайы суфый ул" тигән мәҡәләһен уҡыным да, суфыйсылыҡ, башҡортлоҡ тураһында ҡайһы бер фекерҙәрем менән уртаҡлашмаҡсы булдым мин дә.**

Милләтебеҙ, телебеҙ тураһында ниндәй генә һүҙ һөйләһәк тә, һүҙебеҙҙе дәлилләр миҫалдар бик күп. Шуға ла балалар, йәштәр менән һөйләшкәндә мотлаҡ ошо дәлилдәрҙе килтерергә онотмайыҡ. Мәҫәлән, "Башҡорт халҡы бик боронғо милләт" тибеҙ икән, уны иҫбатлаусы дәлилдәрҙе Салауат Ғәлләмовтың "Великий Хау Бен" китабынан табырға була:

1. Халҡыбыҙҙың рухи ҡомартҡылары, мифологияһы бар булыуы, һаҡланып килеүе.

2. Археология - ҡәтғи ғилем, теге йәки был мәсьәләнең, фәндең етди принциптарын һаҡлап иҫбат ителеүен раҫлай, уйҙырмаларға юл ҡуймай.

3. Телдә күп мәғәнәле һүҙҙәрҙең, омонимдарҙың күп булыуы. Мәҫәлән, ул - сын, ул - он; йәш - молодой, йәш - күҙ йәше; алма - яблоко, алма - не бери; һауа - воздух, һауа - доит; һал - плот, һал - положи, һ.б.

Ғөмүмән, башҡортмон тигән кеше "Урал батыр" эпосын үҙенең тормошонда рухнамә итеп ҡулланырға бурыслы. Һәм... XXI быуатҡа ныҡлап аяҡҡа баҫып, башҡорт милли үҙаңы үҫешкән осорҙа урыҫтарҙан ингән Ҡыш бабай образын башҡортлаштырып, Ирәмәлдә "йәшәй" тип раҫлау дөрөҫ түгел, тип уйлайым. Сөнки башҡорт асылы менән үҙләштереүсе түгел, ә үҙгәртеүсе. Үҙләштереүсе сифатында йәшәһә, башҡорт милләт булараҡ юҡҡа сығыр ине. Икенсенән, ситтән ингән образ бер ваҡытта ла башҡорт рухиәтенә дөрөҫ йүнәлеш бирмәй, ялған юлдан алып барыусан.

Ябай ғына миҫал. Театр, кино сәнғәтендә матур, мәғәнәле образдар тыуа һәм ваҡыт үтеү, йәғни ошо образдарҙы башҡарыусы актерҙар ҡартайыу менән шул уҡ әҫәрҙе яңынан ҡуйырға теләүсе йәш режиссер яңы идея эҙләй башлай. Шул уҡ әҫәр башҡарыла, әммә унда төп баҫым бөтөнләй икенсе урынға ҡуйыла. Шул уҡ ваҡытта тамашасыларҙың яратыу сифатын үтеп, ғәҙәткә әүерелгән һын, идол, образ яңыһын тыуҙырыуға, яңы башланғыстарға ҡамасаулай. Әммә ваҡыт тигән киң мәғәнәле фәлсәфәүи төшөнсә бар һәм беҙ шуны ла беләбеҙ: йәш ыңғай образда энергия күп. Ә ололарҙағы аҡыл, тиһегеҙме? Хәҙерге заман заңы икенсерәк йүнәлешле, шуның өсөн ололар заман аҡылын аңлап, йәштәр энергияһын дөрөҫ юлдан ебәрергә бурыслы. Ваҡыт тигән төшөнсәнең заманға ярашлы тиҙлеге лә үҙгәрә. XXI быуат ваҡытының тиҙлеге "күҙ асып йомған ара ғына", йәғни тормошта ул бер үк нәмәне ҡабатларға юл ҡуймаясаҡ. Барыһын да ваҡыттың тиҙлеге хәл итәсәк.

Бына беҙ әле һаман Ҡыш бабай, ти ҙә һөйләйбеҙ. Нимә, әллә Ҡыш бабай үлемһеҙлек образымы? Үткән замандың матур бер һынланышы булды, тиеп, уны тарихҡа төпләргә лә ваҡыттыр. Милләтебеҙ булмышында ҡыйыу бер һыҙат бар: ул оҙаҡ уйлай, етди уйлай һәм киҫкен генә хәл итеп ҡуя.

Әлбиттә, Яңы йыл ҡаршылау мөғжизәһе булған Ҡыш бабайға халыҡ шул тиклем ышана, хатта уның үҙ йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре бар. Яңы йыл - сағыу, күҙгә күренгән байрам, күренеш. Ә күҙ күргән нәмәгә табынып, унан мөғжизә көтөү мосолман булмышлы әҙәм өсөн харам, гонаһ. Бының бигерәк тә балалар аңына йоғонтоһо насар.

Тимәк, Яңы йыл байрамын ҡаршылағанда ла беҙ ниҙелер үҙгәртергә тейешбеҙҙер. Яңы образға халыҡ ҡапыл да ятһынып ҡарар, әммә шуныһы ла мөһим: күҙгә күренгән яңылыҡ тәү сиратта рухи яҡтылыҡ өҫтәүсе образ булараҡ тыуа. Тик уны халыҡҡа дөрөҫ еткереү кәрәктер, үҙ асылыңды юғалтмай, күршене рәнйетмәй. Ысынлап та, ниңә ул образ Суфый аҡһаҡал булмаҫҡа тейеш әле? Көнбайыш менән көнсығыш идеялары бәрелешенең ҡап уртаһында ғүмер иткән башҡорт халҡының милли үҙаңы хаҡлыҡ юлы менән үҫеүенә булышлыҡ итер ине ул. Беҙгә милләттең яңы образы кәрәк һәм урыҫтың Ҡыш бабайы урынындағы Башҡорт суфыйы беҙгә был йүнәлештә шул образды һынландырырға булышлыҡ итер ине. Яңы йылда ғына түгел, милләттең яңы эраһында.

Башҡорт асылы менән бик үҙенсәлекле, серле, мөғжизәле. Уның үҙ рухи ҡомартҡыларында ла асылырлыҡ серҙәр күп. Беҙ һүҙ көсөнөң тәьҫирен һаман дөрөҫ аңламайбыҙ. Күпме аҡыллы һүҙ һөйләйбеҙ, фекер әйтәбеҙ, ә һаман милли һүҙбәйләнешкә һаҡ ҡараш түгелбеҙ. Телде кеше түгел, Юғары Аң, Аллаһ ҡөҙрәт көсө менән индергән. Һүҙ көсө! Милли һүҙ көсө! Уны дөрөҫ аңлап ҡулланғанда ғына асылыбыҙҙы аңларбыҙ. Юғиһә, сәйәсәттең үҙебеҙгә ҡаршы әйләнгәнен һиҙмәй ҙә ҡалдыҡ. Бөгөн Аң һуғышы барғанлығын аңларға кәрәк беҙгә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Балалар һәм йәштәргә шуны ла аңлатыу фарыз: башҡорт халҡы асылы менән юғары аңлы милләт. Уның бар байлығы - рухы, теле, ере, моңо. Булмышы менән изге, саф, сит ерҙәр даулап, матди байлыҡ артынан ҡыуып, һуғыш асып йәшәмәгән, әммә үҙ ере өсөн йәнен-тәнен аямаған. Башҡорт булмышының асылын тәрәндән өйрәнеп, аңлаған кеше генә ошо милләттең исеме есеменә тап килеүен, еренең, моңонаң, теленең ниндәй көскә эйә икәнен яҡшы белә. Ошоно белгән кеше генә телен ҡәҙерләй, уның ҡәҙерен балалары ҡанына ла һеңдерә.**

**Лена СИРУСИНА.**
**Баймаҡ районы Күгиҙел ауылы.**

ЯҢЫ РУБРИКА: "АСЫЛЫБЫҘ - БАШҠОРТ!"



# ҺЕҘ КЕМ, КӨНБАЙЫШ БАШҠОРТТАРЫ,

## йәки Тарихи документтар ни һөйләй?

**2010 йылдың 14-25 октябрендә Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы уҙғарылыуы барыбыҙға ла мәғлүм. Киләсәктә Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы ҡабул иткән ҡағиҙәләргә ярашлы, халыҡ иҫәбен алыу һәр ун йыл һайын уҙғарылып торасаҡ, шуның өсөн быйылғы иҫәп алыуҙың әһәмиәтен донъя кимәлендәге ваҡиға итеп баһаларға кәрәк. Рәсәй - күп милләтле ил, һәм һәр кемдең милли үҙбилдәләнеше һөҙөмтәһендә теге йәки был милләткә ҡараған кешеләрҙең дөйөм һаны ла халыҡ иҫәбен алыу барышында асыҡланасаҡ. Билдәле бер объектив сәбәптәр арҡаһында айырым кешеләрҙең генә түгел, ҙур ғына халыҡ төркөмдәренең милли үҙбилдәләнешендә үҙгәрештәр барлыҡҡа килеүе ихтимал. Фән телендә быны этник үҙлектең (идентичность) алмашыныуы менән аңлатырға тырышалар. Әммә беҙгә шуныһы ла мәғлүм: әгәр нәҫел-нәсәбен иң кәмендә ете быуынға тиклем мотлаҡ белергә тейеш булған башҡорттар үҙ шәжәрәһен күҙ ҡараһындай һаҡламаһа, тиҫтәләгән ҡәбилә, йөҙәрләгән бәләкәй ырыуҙарға бүленеп йәшәү, башҡа көслөрәк һәм күп һанлыраҡ ҡәүемдәр тарафынан ассимиляцияға дусар булыу арҡаһында күптән юҡҡа сыҡҡан булыр ине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, совет осороноң билдәле сәйәси тайпылыш-болғаныштары һөҙөмтәһендә кешенең милли үҙбилдәләнеше һанға һуғылманы, төрлө баш-баштаҡлыҡтарға юл ҡуйылды. Мәҫәлән, быуаттар дауамында йәшәп килгән мишәр халҡы милләт булараҡ юҡҡа сыҡты. 1979 йылда Башҡортостанда 935,9 мең башҡорт теркәлһә, 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу шаҡ ҡатырғыс һөҙөмтәләр бирҙе: республикала йәшәгән башҡортарҙың һаны 863,8 меңгә тиклем кәмене. Халҡы артыу урынына 72 меңгә кәмегән башҡорт ауылдарынан ҡырғын үткән, тиерһең. Ә 80-се йылдарҙа ауыл тормошо бөлгөнлөктә түгел ине, тап шул йылдарҙа тыуым да әүҙем генә арта барҙы. Ошо ваҡытта ебәрелгән хаталар төҙәтелеп, халыҡтың милли үҙбилдәләнеш хоҡуғы ғәмәлгә ашырылғас, ысынбарлыҡтың бөтөнләйгә икенсе төрлө булыуы асыҡланды. Был хәлдәрҙән алынған һабаҡтың асылы ҡатмарлы түгел: ата-бабаларың аҫаба башҡорт булғас, милли асылыңды алмаштырыу уларҙың рухына хыянат итеүгә тиң. Ошо хәҡиҡәткә нигеҙләнеп, гәзитебеҙҙә "Асылыбыҙ - башҡорт!" исемле яңы рубрика асабыҙ. Был рубрикала Башҡортостандың төньяҡ һәм көнбайыш башҡорттарының үткәне һәм бөгөнгөһө, ырыу һәм ғаилә шәжәрәләре, теле һәм мәҙәниәте, ауылдарының тарихы, арҙаҡлы шәхестәре, уларҙың милли асылын яҡлау һәм һаҡлау тураһында мәҡәләләр баҫыласаҡ. Хөрмәтле тарихсыларыбыҙҙан, телселәребеҙҙән, яҙыусыларыбыҙҙан, журналистарыбыҙҙан, тыуған төйәгенә, этник асылына битараф булмаған милләттәштәребеҙҙән ошо рубрикаға тәғәйенләп яҙылған мәҡәләләр көтәбеҙ. Яңы рубрикабыҙҙы тарих фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың Фән һәм техника өлкәһендәге дәүләт премияһы лауреаты Әнүәр Әсфәндийәровтың "Западные башкиры по переписям 1795-1917 гг." тигән китабында баҫылған инеш мәҡәләһе менән асып ебәрәбеҙ.**

### 1795 йылғы V ревизия буйынса Ырымбур губернаһының 12 өйәҙендәге башҡорттар һаны:

| № т/б | Өйәҙҙәр | V ревизия буйынса башҡорттарҙың һаны | | | Ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар нисбәте |
|---|---|---|---|---|---|
| | | ирҙәр | ҡатын-ҡыҙҙар | бөтөн башҡорттар | |
| 1. | Верхнеуральск | 10 184 | 8 663 | 18 847 | 1,18 : 0,82 |
| 2. | Бәләбәй | 8 991 | 8 289 | 17 280 | 1,08 : 0,92 |
| 3. | Бөрө | 10 675 | 9 829 | 20 504 | 1,08 : 0,92 |
| 4. | Бөгөлмә | 1 213 | 1 204 | 2 417 | 1,01 : 0,99 |
| 5. | Боғоруслан | 221 | 223 | 444 | 0,99 : 1,01 |
| 6. | Быҙаулыҡ | 580 | 535 | 1 115 | 1,08 : 0,92 |
| 7. | Минзәлә | 8 027 | 9 813 | 17 840 | 0,81 : 1,19 |
| 8. | Ырымбур | 11 556 | 10 632 | 22 188 | 1,08 : 0,92 |
| 9. | Стәрлетамаҡ | 14 137 | 12 992 | 27 129 | 1,08 : 0,92 |
| 10. | Троицк | 7 370 | 7 079 | 14 449 | 1,04 : 0,96 |
| 11. | Өфө | 4 238 | 4 171 | 8 409 | 1,02 : 0,98 |
| 12. | Силәбе | 5 225 | 4 842 | 10 067 | 1,07 : 0,93 |
| **Бөтәһе** | | **82 417** | **78 272** | **160 689** | **1,06 : 0,94** |

Һуңғы йылдарҙа Башҡортостандың социаль-иҡтисади тарихын, XVII-XIX быуаттарҙа бында урыҫ булмаған крәҫтиәндәрҙең күсеп ултырыуын өйрәнеүгә иғтибар ныҡ артты. Припущенник һәм типтәр институттарының килеп сығышын һәм асылын, уларҙың аҫаба башҡорттар менән мөнәсәбәттәрен, типтәрҙәрҙең этник составын, уларҙың Башҡортостандың айырым төбәктәренә килеп төпләнеү ваҡытын һәм темптарын төрлөсә аңлаталар. Шул уҡ ваҡытта Башҡортостан тарихының теге йәки был осоронда башҡорттарҙың, шул иҫәптән көнбайыш башҡорттарының да дөйөм һаны тураһындағы мәсьәлә бер төрлө генә хәл ителмәй. Шуның өсөн Көнбайыш, Төньяҡ-Көнбайыш һәм Төньяҡ-Көнсығыш Башҡортостан халҡының составын һәм ҡайҙа төпләнеүен этник яҡтан өйрәнеү ҙур әһәмиәткә эйә. Был проблемаларҙы тикшереү яңы сығанаҡтарҙы өйрәнеүҙе һәм уларҙы ғилми әйләнешкә индереүҙе талап итә. Ревизия, иҫәп алыу материалдары һәм һөҙөмтәләре 1795-1917 йылдарҙа ауылдарҙа йәшәүсе халыҡтың социаль-иҡтисади хәле, этник составы һәм һаны буйынса төрлө мәғлүмәттәр тупланған ҡиммәтле документаль сығанаҡтар йыйылмаһы булып тора.

Билдәле булыуынса, Рәсәйҙә XVIII быуатта - биш ревизия (1719-1721, 1748, 1762, 1783, 1795 йй.), XIX быуатта шулай уҡ биш ревизия (1811, 1816, 1834, 1850, 1859йй.) уҙғарыла. Ревизия материалдары старосталар һәм старшиналар биргән мәғлүмәт буйынса ялланып эшләгән грамоталы кешеләр тарафынан төҙөлгән, уларға "йәндәрҙе ("ревизские души" - Ред. иҫк.) төшөрөп йә йәшереп ҡалдырған өсөн яуаплылыҡ йөкмәтелеү" ҡаралған. Ревизия мәғлүмәттәре ауыл сходтарында өс мәртәбә тикшерелгән. Башҡорт халҡы ревиз сказкаларында тәүләп 1795 йылда ғына тулыһынса теркәлгән.

Ырымбур губернаһы халҡы буйынса V ревизия мәғлүмәттәре Мәскәүҙә Рәсәй дәүләт боронғо акттар архивында һаҡланған Ерҙәрҙе генераль межалауға "Иҡтисади иҫкәрмәләр" тип аталған документтан алынды. Губернаның бөтә 12 өйәҙе олоҫтарындағы башҡорт ауылдарына ҡараған материалдар ("Иҡтисади иҫкәрмәләр"ҙә Пермь, Вятка һәм Һарытау губерналары өйәҙҙәренең башҡорттары тураһында мәғлүмәттәр 1816 йылғы VII ревизия буйынса бирелә) тәү тапҡыр "Китап" нәшриәтендә 2001 йылда "Западные башкиры по переписям 1795-1917гг." тип исемләнгән китапта баҫылып сыҡты. Һәр олоҫтоң ауылдары исемлегенән һуң хужалыҡ өлкәләре, халыҡ шөғөлдәре тураһындағы мәғлүмәттәр бирелә. Олоҫтоң исеме аталып, уға ҡараған ауылдарҙағы йорт иҫәбе, башҡорттарҙың һәм башҡа халыҡтарҙың һаны күрһәтелә.

1795 йылғы ревизия материалдарын дөйөмләштереү һөҙөмтәһендә 12 өйәҙҙең һәр ҡайһыһында һәм тотош губернала йәшәгән башҡорттарҙың дөйөм һаны асыҡланды (Аныҡ мәғлүмәттәрҙе мәҡәләлә килтерелгән таблицанан ҡарағыҙ). Шулай уҡ ошо мәғлүмәттәр енестәр нисбәтен билдәләү мөмкинлеген бирҙе, ә был этнографтарға башҡорттарҙа ғаилә-никах мөнәсәбәттәренең ҡайһы бер үҙенсәлектәрен асыҡлау өсөн бик мөһим.

Ғилми әҙәбиәттә XVIII быуатта айырым башҡорт хужалығының йәки йортоноң (Русса ҡабул ителгән терминологияға ярашлы - башкирский двор. - Ред. иҫк.) нисә кешенән тороуы хаҡында ҡапма-ҡаршылыҡлы фекерҙәр осрай. Берәүҙәр фекеренсә, ул ваҡыттағы йәмғиәттә ҡушма, йәғни айырымланмаған (атай, ағай-эне ғаиләләре һ.б.) ғаиләле йорттар өҫтөнлөк иткән. Икенселәр раҫлағанса, бәләкәй ғаиләле йорттар күберәк булған. Башҡорт йәмғиәтенең үҫеш кимәлен айырым йортта нисә кеше йәшәүенә ҡарап билдәләп була. Уртаса алғанда, бер башҡорт йортона 6,2 кеше тура килгәнен иҫәпкә алһаҡ, ата-әсәнән һәм балиғ булмаған балаларҙан торған айырым бәләкәй ғаиләле йорттарҙың өҫтөнлөк итеүен билдәләп үтеү артыҡ булмаҫ.

V ревизия материалдары көнбайыш башҡорттарының ниндәй ырыуҙарға ҡарағанын аныҡ билдәләргә мөмкинлек бирә. Минзәлә өйәҙендә Байлар, Бүләр, Йәнәй, Ирәкте, Ҡырғыҙ, Гәрәй, Ҫарылы-мең башҡорт олоҫтарының, Бөгөлмә өйәҙендә - Ҡырғыҙ, Юрмый, Ҡыр-йылан, Байлар олоҫтарының аҫаба ерҙәре, Бәләбәй өйәҙендә Бүләр, Ҡыр-йылан, Кальнин ( дөрөҫөрәге - Ҡаңны), Ҡырғыҙ, Дыуанай, Елдәк, Ирәкте һәм Меңдәрҙең Ҡырҡөйлө-, Илкүл-, Күл-иле-, Ҫаралы-мең башҡорттары биләгән ерҙәр йәйрәп ята. Бөрө өйәҙе территорияһында Ҡаңны, Шәмшәҙе, Танып, Елдәк, Эске Йылан, Таҙлар, Бүләр, Ирәкте Ҡырғыҙ, Йылан, Ҡыр-Йылан, Гәрәй, Урман-Гәрәй, Ҡыр-танып, Өфө-Танып, Сунлар, Уран, Балыҡсы олоҫтарының аҫаба биләмәләре булған. Пермь губернаһының Уса өйәҙендә Ғәйнә олоҫо башҡортарының 28, Пермь өйәҙендә - 2, Красноуфим өйәҙендә - өпәй, ҡошсо, һыҙғы башҡорттарының 27 ауылы була.

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**
**(Дауамы бар).**

# Беҙ әйтмәһәк, хәҙер әйтмәһәк,

**Күренекле шағир, прозаик, Учалы районының Муса Мортазин исемендәге премия лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Алма-Атала уҙғарылған төрки илдәре шиғриәтенең II халыҡ-ара фестивале лауреаты Мәүлит ЯМАЛЕТДИНдың был уйланыуҙары төрки халыҡтарының уртаҡ рухи мираҫы булған Орхон-Йәнәсәй яҙмаһына мөнәсәбәтебеҙ, йәғни парадоксаль битарафлығыбыҙ тураһында. Был битарафлыҡта халыҡтарҙың, тотош дәүләттәрҙең үҙ тарихына һәм киләсәгенә вайымһыҙлығы ла сағыла. Әлбиттә, әҙип был мәсьәләгә ҡағылышлы күп кенә мәҡәләләр яҙҙы, әммә был сығышында ул ошо проблеманы өр-яңыса ҡуя, һәм шуның менән киң йәмәғәтселектең иғтибарын йәлеп итер, тигән уйҙабыҙ. Һүҙ - Мәүлит Байгилде улына.**

## Тел ғәли йәнәптәре...

Ер шарында 2500-ҙән алып 5 меңгә тиклем тел иҫәпләнә. Донъя халыҡтары телдәренең аныҡ ҡына һанын теүәл әйтеүе ҡыйын, сөнки төрлө телдәр араһындағы айырма һәм бер үк телдәге төрлө диалекттар араһындағы айырмалыҡтар шартлы булып тора. Иң ныҡ таралғандар иҫәбенә ҡытай, инглиз, һинд, испан, урыҫ, индонезия, ғәрәп, бенгал, португал, төрки телдәре инә. Донъя телдәре үҙҙәренең туғандаш генетик бәйләнештәре буйынса һиндевропа, алтай, африка-азия һәм башҡа тел ғаиләләренә ойоша.

Билдәле булыуынса, Урал-алтай тел ғаиләһенә ҡараған башҡорт теле төрки телле ҡыпсаҡ төркөмөнөң ҡыпсаҡ-болғар төркөмсәһенә инә. Ул XX быуаттың 30-сы йылдарындағы тел ғилеме билдәләүенсә, ҡыуаҡан һәм юрматы диалекттарынан тора. Һуңғы йылдарҙағы классификация буйынса, "ҙ" өнө урынына "з", ә "һ" менән "ҫ" өндәре урынына "с" өнө ҡулланылған көнбайыш диалекты ла башҡорт теленең бер тармағы булараҡ танылды. Дөйөм алғанда, был телдә Башҡортостан Республикаһынан тыш, Силәбе, Ырымбур, Һамар, Һарытау, Ҡурған, Свердловск, Пермь, Төмән өлкәләрендә, шулай уҡ Татарстанда йәшәгән милләттәштәребеҙ һөйләшә. Башҡорт телендә аралашыусы диаспора шулай уҡ Яҡут-Саха, Коми Республикалары, Чита өлкәһе, Урта Азия, Ҡаҙағстан республикаларында ла байтаҡ ҡына.

Башта уҡ шуны әйтеп китергә кәрәк: телдәренең фонетик һәм грамматик үҙенсәлектәре буйынса ҡыпсаҡ һәм уғыҙ тармаҡтарына айырылған төрки халыҡтары Ер шарында 200 миллионға яҡын. Был сама менән урыҫ халҡының бөгөнгө һанынан 50 миллионға күберәк, тигән һүҙ. Айырма тик шунда: Рәсәйҙәге урыҫ милләте йыл һайын яҡынса 1 миллионға кәмей, ә төрки халыҡтары, киреһенсә, арта бара.

Үрҙә әйтелгәндәр беҙгә шундай һығымта яһарға мөмкинлек бирә: башҡорт этносы яңғыҙлыҡ синдромына дусар булған милләт түгел, ә 200 миллионлыҡ ҡәрҙәш халыҡтар ғаиләһенең айырып алғыһыҙ бер өлөшө. Тимәк, уның теле лә йотолоуға, тормоштан алып ташлауға хөкөм ителгән кескәй тел итеп түгел, ә ҙур һәм мөһабәт төрки донъяһының үҙенсәлекле бер киҫәге рәүешендә ҡаралырға тейеш.

## Парадокстарҙың беренсеһе...

Башҡорт теле төрөк, әзербайжан, төркмән, үзбәк, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, сыуаш телдәре кеүек үк, боронғо яҙма телдәр рәтенә инә. Шуныһын айырыуса һыҙыҡ өҫтөнә алып китергә кәрәк: боронғо төркиҙәр икенсе халыҡтарҙан үҙләштерелгән яҙма менән файҙаланмаған, ә үҙ алфавитын, үҙ яҙмаһын булдырған. Һүҙ ыңғайында урыҫ халҡы тарихынан бер миҫал килтереп үтеү урынлы булыр. Нисек кенә парадоксаль күренмәһен, улар тарихта яҙмаһыҙ халыҡ булараҡ теркәлгән. Беҙ бөгөнгө көндә лә файҙаланған кириллицаны боронғо Киев Русе Дунай Болгарияһынан ҡабул итеп ала, йәғни, ул үҙләштерелгән яҙма, тип атала.

Боронғо төрки яҙмаһына килгәндә, беҙҙең алыҫ ата-бабаларыбыҙ бераүҙекенә лә оҡшамаған үҙ алфавитын, үҙ графикаһын булдырыуға өлгәшкән. Быны беҙ Йәнәсәй йылғаһы үҙәнендә һәм Монголиялағы Орхон йылғаһы буйҙарында табылған ташъяҙмаларҙа, йәғни, ташҡа ырып яҙылған руник текстарҙа күрәбеҙ. Ул боронғо ҡомартҡыларға беҙҙең эраның VI-VIII быуаттарында Тымыҡ океандан алып Ҡара диңгеҙгәсә һуҙылған Төрки ҡағанлығының барлыҡҡа килеү тарихы, уның сәскә атыу осоро һәм юҡҡа сығыуы һүрәтләнә. Әйткәндәй, Ҡытай, Иран, Һиндостан һәм Византия менән дипломатик мөнәсәбәттәр урынлаштырыуға өлгәшкән Төрки ҡағанлығы хәҙерге Рәсәй Федерацияһы биләмәләрендәге иң тәүге бойондороҡһоҙ һәм үҙаллы дәүләт була. Әммә бөтә донъяға билдәле булған был фактты ғүмер баҡый инҡар ителеүе һәм Рәсәй тарихының IX быуаттың уртаһында ғына барлыҡҡа килгән Киев Русенән башланып китеүе ғәжәпкә ҡалдыра. Былдай мөнәсәбәт үҙ тарихың тамырҙарына балта сабыуға тиң. Ә бит Ер йөҙөндә ошоға оҡшаш миҫалдар етерлек. Мәҫәлән, Көньяҡ Америка ҡитғаһында боронғо цивилизация булдырған ацтек, инҡә, майя халыҡтарын алайыҡ. Америка индеецтары тип йөрөтөлгән был халыҡтар шулай уҡ баҫҡынсылар тарафынан буйһондорола, улар төҙөгән йөҙәрләгән ҡалалар емерелә, мәҙәни традициялары юҡҡа сығарыла. Ләкин айырма шунда: был бөйөк цивилизацияларҙың варисҭары булған Мексика, Перу, Гондурас һәм Гватемала дәүләттәре үҙ илдәренең боронғо тарихын әлеге буйһондоролған халыҡтарҙың данлы тарихы менән бәйләй һәм улар төҙөгән рухи ҡомартҡылар менән хаҡлы рәүештә ғорурлана. Тимәк, әгәр беҙ бөтә донъяла ҡабул ителгән гуманизм идеялары һәм хоҡуҡи нормаларҙы таныу юлына баҫҡанбыҙ икән, Рәсәйҙең боронғо тарихын беҙҙең эраның VI-VIII быуаттарында Евразия киңлектәрендә төҙөлгән Төрки ҡағанлығын, уның матди һәм рухи мәҙәниәтен өйрәнеүҙән башларға тейешбеҙ.

Беҙ алдараҡ телгә алған Орхон-Йәнәсәй руник яҙмалары нәҡ шул Күк Төрк дәүләтенең рухи мәҙәниәтен кәүҙәләндереүсе мәшһүр ҡомартҡыларҙан һанала. Ҡайһы бер урындары шиғыр юлдарына тартымыраҡ мәҡәл-әйтемдәрҙе хәтерләткән ташъяҙма ҡомартҡылар тураһындағы тәүге мәғлүмәт XVIII быуат баштарында пәйҙә була. Был ҡомартҡыларҙы Полтава һуғышында эсиргә эләгеп, Тобольск ҡалаһына һөргөнгә ебәрелгән швед офицеры аса һәм табыш хаҡында Европа ғалимдарына хәбәр итә. Ошонан 150 йылдан ашыу ваҡыт үткәндән һуң ғына, 1889 йылда, урыҫ ғалимы Ядринцев һәм 1897 йылда археолог һәм этнограф Клеменц бер-бер артлы Күлтәгингә, Билгә ҡағанға, Тонйуҡуҡҡа бағышланған ташъяҙмаларҙы фән донъяһына аса. Шуныһы ҡыҙыҡлы: был ике ғалим да революцион рухлы интеллигенция вәкилдәре менән ҡатнашып, алдынғы ҡарашлы түңәрәктәр ойошторған өсөн батша хөкүмәте тарафынан Себер һөргөнөнә ебәрелә һәм улар боронғо яҙма ҡомартҡыларҙы тотҡонда саҡта аса.

Анекдотты хәтерләткән был ваҡиғаның аҙағы тағы ла фәһемлерәк: боронғо төрки яҙма ҡомартҡыларын һәр яҡлап тикшереү өсөн иң беренсе ғилми экспедицияны урыҫ дәүләте түгел, ә 1890 йылда Финляндияның Фәндәр академияһы ойоштора. Унан һуң 1 йыл үткәс кенә Рәсәй Фәндәр академияһы академик Радлов етәкселегендә Себергә экспедиция ебәрә. Ҡомартҡы текстарын расшифровкалау мәсьәләһендә лә беҙ үҙ ҡулы аҫтындағы халыҡтарға һәр яҡлап хәстәрлек күрһәтергә тейешле Рәсәй империяһына түгел, ә әлеге лә баяғы Европаға бурыслыбыҙ. 1893 йылда Дания ғалимы Томсен төрки ташъяҙмаларын уҡырға асҡыс таба һәм бынан һуң инде беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың драматизм тулы яҙмыштарын сағылдырған Орхон-Йәнәсәй ҡомартҡылары бөтә донъяға билдәле була.

## Парадокстарҙың икенсеһе...

Беҙҙең өсөн шуныһы айырыуса әһәмиәтле: бөтә донъя ғалимдары бөгөн боронғо төрки ҡомартҡыларын яҙма әҙәбиәт иҫәбенә индерә. Шул уңайҙан урыҫ тюркологтарының береһе, филология фәндәре докторы Стеблеваның фекерен килтереү урынлы булыр. Ул 1993 йылда Мәскәүҙә нәшер ителгән "Поэзия древних тюрков" исемле китапҡа баш һүҙендә бына ниҙәр яҙа: "...Все это означает, что в древности на обширном пространстве Центральной Азии и Южной Сибири был распространен общетюркский литературный язык и существовала длительная письменная традиция...

...Разнообразие средств поэтической изобразительности как в орхонских, так и енисейских текстах, показывает законченность их художественного стиля. Поэтому можно предположить, что они испытали влияние длительной фольклорной и литературной традиции, начиная по крайней мере с VI века - времени становления Тюркского каганата. Не исключено также, что основные тенденции этой традиции сложились еще раньше...

...Вместе с тем, эти тексты являются принадлежностью уже письменной литературы, поскольку нам известны их авторы. Малую и Большую надпись в честь Кюль-тегина, а также надпись в честь Бильге-кагана создал родственник правящего дома Юлук-тегин, надпись в честь Тоньюкука предположительно сочинена им самим..."

Хәҙер инде Рәсәй Федерацияһы мәктәптәрендәге урыҫ әҙәбиәте дәреҫтәренең программаһына иғтибар итәйек. Унда яҙма әҙәбиәттең иң боронғо өлгөһө итеп "Слово о полку Игореве" әҫәре бирелә. Был ҡомартҡы хаҡында энциклопедияла шундай аңлатма килтерелә: "Памятник древнерусской литературы конца XII века... Соединив книжные и фольклорные традиции, неизвестный автор создал уникальное произведение лиро-эпического жанра..."

Һеҙ, моғайын, аңлатмалағы ике нәмәгә иғтибар иткәнһегеҙҙер. Беренсеһе - "Слово о полку Игореве" әҫәренең барлыҡҡа килеү ваҡыты. Ул Орхон-Йәнәсәй яҙма ҡомартҡыларына ҡарағанда кәм тигәндә 600-700 йылға һуңыраҡ ижад ителгән. Парадокстарҙың икенсеһе - был әҫәрҙең авторы билдәһеҙ булыу. Ә тел ғилемендә һәм филологияла ҡабул ителгән дөйөм закон буйынса, авторы булмаған ижад емеше яҙма әҙәбиәт өлгөһө тип ҡаралырға тейеш түгел. Тимәк, Орхон-Йәнәсәй ташъяҙмалары Рәсәй Федерацияһында йәшәгән төрки халыҡтарҙың, шул иҫәптән башҡорттарҙың, рухи мираҫына ҡараған иң боронғо һәм иң ысын яҙма әҙәбиәт өлгөләре булып сыға. Тик был бөйөк ҡомартҡыларҙың Рәсәй кимәлендә һаман да тейешенсә баһаланмауы, ахмаҡ нигилистарса инҡар ителеүе аянысলы. Илеңдең боронғо тарихына төкөрөп ҡарау, уның рухи-мәҙәни ҡиммәттәренә ҡәҙерһеҙ мөнәсәбәт үҙ-үҙеңде күрәләтә ярлыландырыуға, дәрәжәңде төшөрөүгә тиң.

*Телдәренең фонетик һәм грамматик үҙенсәлектәре буйынса ҡыпсаҡ һәм уғыҙ тармаҡтарына айырылған төрки халыҡтары Ер шарында 200 миллионға яҡын. Был сама менән урыҫ халҡының бөгөнгө һанынан 50 миллионға күберәк, тигән һүҙ. Айырма тик шунда: Рәсәйҙәге урыҫ милләте йыл һайын яҡынса 1 миллионға кәмей, ә төрки халыҡтары, киреһенсә, арта бара. Үрҙә әйтелгәндәр беҙгә шундай һығымта яһарға мөмкинлек бирә: башҡорт этносы яңғыҙлыҡ синдромына дусар булған милләт түгел, ә 200 миллионлыҡ ҡәрҙәш халыҡтар ғаиләһенең айырып алғыһыҙ бер өлөшө. Тимәк, уның теле лә йотолоуға, тормоштан алып ташлауға хөкөм ителгән кескәй тел итеп түгел, ә ҙур һәм мөһабәт төрки донъяһының үҙенсәлекле бер киҫәге рәүешендә ҡаралырға тейеш.*

## Себер һөргөнөнә рәхмәт

Заманында бынан 150 йыл элек ташҡа ырып яҙылған тер-

✓ ***Был һөйләшеүҙән һуң һеҙҙең йәнегеҙҙе өйкәп, ауыр таш булып баҫып торған кәмһенеү һәм камил булмағанлыҡ комплексы бер аҙ еңеләйер, сөнки быға тиклем: "Һеҙ - яҙмаһыҙ халыҡ", - тип кәмһетеп килделәр бит.***

# КЕМ ӘЙТЕР, ҡасан әйтербеҙ?

ки яҙмаларын табып, уларҙы фән донъяһына асыр өсөн кемдәрҙелер һөргөнгә ебәрергә кәрәк булған. Икенсе төрлөрәк итеп әйткәндә, Орхон-Йәнәсәй ташъяҙмаларының донъяға билдәле булыуы өсөн беҙ Полтава һуғышында әсиргә төшкән швед офицерының, үрҙә исемдәре телгә алынған прогрессив ҡарашлы урыҫ ғалимдарының яҙмыштарын селпәрәмә килтергән Себер һөргөнөнә бурыслыбыҙ. Хәҙер был көләмәскә оҡшаған ваҡиғалар сылбыры көнөлдә ирония тойғоһо уятһа ла, ул ваҡытта шундай хөкөмгә дусар ителгәндәрҙә көлкө ҡайғыһы булмағандыр. Беҙҙең өсөн шуныһы мөһим: улар үҙҙәренең гражданлыҡ бурысын намыҫ менән үтәп, үҙ замандары өсөн ҙур ҡаһарманлыҡ ҡылған мәшһүр заттар. Әлбиттә, үткән эшкә - салауат, тигәндәй, уларҙың фиҙаҡәр хеҙмәттәрен тарих хөкөмөнә ҡалдырырға һәм хәҙерге көн менән йәшәргә тейешбеҙ. Әммә шулай булһа ла, көнөлде ҡайта-ҡайта тынғыһыҙ уй-тойғолар борсой: бик күп ғалим-энтузиастарҙың тырышлығы менән донъя фәненә асылған боронғо төрки ташъяҙмалары үҙҙәре ҡасанға тиклем Себер һөргөнөндә булыр? Төрки халыҡтарының ғына түгел, ә бөтә донъя цивилизацияһының рухи-мәҙәни байлығы һаналған был ҡомартҡыларҙы Мәскәү ҡасан үҙ дәүләтенең боронғо мираҫы һәм ҡаҙанышы итеп таныр? Ғөмүмән, булырмы ундай көн? Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был һорауҙарға бер кем аныҡ ҡына яуап бирә алмай, һәм улар, элекке кеүек үк, һауала аҫылынып ҡала.

## Тамсы тама-тама...

Шуныһын да әйтеп китергә кәрәк: ошо мәҡәләлә телгә алынған мәғлүмәттәр, тәү ҡарашҡа парадокс булып яңғыраған факттар киң йәмәғәтселеккә мәғлүм түгел. Улар бары тик тюркология һәм тел ғилеме өлкәләрендә шөғөлләнеүсе бик тар ғына даирәләге ғалим-тикшеренеүселәргә таныш. Ихтимал, ул һеҙҙең ҡайһы берегеҙгә лә файҙаһыҙға һүҙ көрәштереү, ең эсенән йоҙроҡ төйөү һымаҡ күренер. Ләкин халыҡта: "Тамсы тама-тама ташты тишә", - тигән әйтем бар. Беҙ әйтмәһәк, кем әйтер һәм хәҙер әйтмәһәк, ҡасан әйтербеҙ? Ғөмүмән алғанда, был өлкәләге тәүге һүҙҙе швед, фин, датчандар күптән әйткән, образлы итеп аңлатҡанда, ауыҙыбыҙға сәйнәп ҡаптырған. Инде уның йотоуына ҡалғанды кемдәрҙән көтөргә һуң?

Икенсенән, һүҙебеҙҙең төп маҡсаты - һеҙҙең күңелдәрҙә төрки халыҡтарының, уның бер өлөшө булған башҡорт милләтенең данлы тарихы, бөйөк мәҙәниәте өсөн ғорурлыҡ тойғоһо уятыу. Бәлки, был һөйләшеүҙән һуң һеҙҙең йәнегеҙҙе өйкәп, ауыр таш булып баҫып торған кәмһенеү һәм камил булмағанлыҡ комплексы бер аҙ еңеләйер, сөнки быға тиклем: "Һеҙ - яҙмаһыҙ халыҡ", - тип кәмһетеп килделәр бит. Был аҡты күрәләтә - ҡара, ә ҡараны, киреһенсә, аҡ, тип раҫлау менән бер. Ошонда ирекһеҙҙән 1922 йылда Францияға эмиграцияға китергә мәжбүр булған бөйөк урыҫ философы Николай Бердяевтың әйткәне иҫкә төшә. Ул үҙенең бер хеҙмәтендә: "Россию и русский народ можно характеризовать лишь противоречиями",- тип яҙа.

## Үҙ Конституцияһына үҙе ҡаршы Рәсәй...

Бөгөн элекке автономиялы, ә хәҙер үҙаллы республикалар мәктәптәрендәге милли компонент тирәләй ҡуйырған бәхәстәрҙе лә Рәсәйҙең маңлайына һуғылған әлеге хурлыҡлы ҡапма-ҡаршылыҡ мөһөрө менән генә аңлатырға була. Ысынлап та, үҙ Конституцияһына үҙе ҡаршы килгән дәүләт Рәсәйҙән башҡа донъяның бер генә нөктәһендә лә юҡ. Тәү ҡарашҡа, Рәсәй Федерацияһының төп законы бөтә кешелек донъяһы өсөн уртаҡ булған хоҡуҡ нормаларына таяна, дөйөм гуманистик идеяларға тоғро булырға тырыша, шәхестең һәм милләттәрҙең айырып алғыһыҙ хоҡуҡтарын гарантиялай кеүек. Ул шулай уҡ айырым халыҡтарҙың телдәрен, рухи-мәҙәни ҡиммәттәрен һаҡлауға ла ҙур әһәмиәт бирә төҫлө. Ләкин ысынбарлыҡта беҙ быларҙың тап киреһен күрәбеҙ. Һәр хәлдә, үҙ аллы республикаларҙың мәғариф системаһындағы милли компонентҡа ҡаршы башланған һөжүм шундай фекергә килергә мәжбүр итә. Милли республикаларҙағы төп халыҡтарҙың теленә, мәҙәниәтенә һәм тарихына ҡарата булған бындай кире мөнәсәбәттең милләттәрҙе бер-береһенә яҡынайтыуға, үҙ-ара ихтирам тойғоһо тәрбиәләүгә түгел, ә бер-береһенән ситләштереүгә йүнәлтелеүе көн кеүек асыҡ. Әгәр, әйтәйек, милли республикаларҙа йәшәгән урыҫ йәки украин балаһы татар, башҡорт, сыуаш телен белһә, уларҙың мәҙәниәтен, тарихын өйрәнһә, унан кемгә зыян? Бөтә кешелек донъяһының үҫеш тарихы шуны күрһәтә: Ер йөҙөндәге барлыҡ ыҙғыш-талаштарҙың, ҡан ҡойошло һуғыштарҙың, дөйөмләштереп әйткәндә, фажиғәле ваҡиғаларҙың нигеҙендә бер-берендең мәҙәниәтен ихтирам итмәү, башҡаларҙың милли традицияларын инҡар итеп, шовинизм юлына баҫыу ята. Бөгөн тарихи үҫештең федерализм принциптарын һайлаған Рәсәй дәүләтенең мәғариф өлкәһендәге сәйәсәте ныҡ һағайта, әлбиттә. Шулай уҡ бар донъяны шаулатҡан үҙгәртеп ҡороуҙар бары тик фарс, ә иғлан ителгән демократик лозунгтар һәм хоҡуҡ нормалары яланғас декларация ғына булып ҡалыр микән? Халыҡтарҙы яһалма рәүештә изоляциялап прогресҡа ирешеү, башҡаларҙы кәмһетеп бөйөк булыу мөмкин түгел. Һәр хәлдә, үҙ аллы республикаларҙың халыҡ мәғарифы программаларынан милли региональ компонентты алып ташларға ынтылыуҙы тик шул юҫыҡта ғына аңлатырға мөмкин. Ғөмүмән, Рәсәй сәйәсмәндәренең сәйер сығыштарынан, ҡарарҙарынан шундай тойғо ҡала: беҙ, әйтерһең, үҙгәртеп ҡороуҙарҙан һуң XXI быуат яғына түгел, ә XIX, VIII быуаттар тарафына хәрәкәт итәбеҙ.

***Боронғо төркиҙәр икенсе халыҡтарҙан үҙләштерелгән яҙма менән файҙаланмаған, ә үҙ алфавитын, үҙ яҙмаһын булдырған. Боронғо төрки яҙмаһына килгәндә, беҙҙең алыҫ ата-бабаларыбыҙ берәүҙекенә лә оҡшамаған үҙ алфавитын, үҙ графикаһын булдырыуға өлгәшкән. Быны беҙ Йәнәсәй йылғаһы үҙәнендә һәм Монголиялағы Орхон йылғаһы буйҙарында табылған ташъяҙмаларҙа, йәғни, ташҡа ырып яҙылған руник текстарҙа күрәбеҙ. Ул боронғо ҡомартҡыларға беҙҙең membership эраның VI-VIII быуаттарында Тымыҡ океандан алып Ҡара диңгеҙгәсә һуҙылған Төрки ҡағанлығының барлыҡҡа килеү тарихы, уның сәскә атыу осоро һәм юҡҡа сығыуы һүрәтләнә.***

## Уңышлы тәжрибәләр бар бит...

Ә бит бөйөк булыу өсөн шул турала декларация артынан декларация иғлан итеү түгел, ә бер-берендең мәҙәниәтенә, милли ғөрөф-ғәҙәттәренә, теленә үҙ-ара ихтирамлы булыуҙа етә. Халыҡтарҙың һыйышып йәшәү тарихында байтаҡ уңышлы тәжрибә тупланған. Миҫал өсөн, ут күршебеҙ булған шул уҡ Финляндияны алайыҡ. Илебеҙҙә үҙгәртеп ҡороуҙар башланған йылдарҙа "Аргументы и факты" гәзитендә баҫылған мәғлүмәттән күренеүенсә, ундағы халыҡтың 6 проценты ғына швед телендә һөйләшә. Ләкин шулай булыуға ҡарамаҫтан, закон уларға тормоштоң бөтә өлкәләрендә лә туған телен ҡулланыуҙы гарантиялай. Кафеларҙа, рестарандарҙа, магазиндарҙа һатыусылар һәм официанттар килеүселәргә фин йә швед телендә мөрәжәғәт итә. Белдереүҙәрҙе, банк счеттарын, эш ҡағыҙҙарын, социаль һәм мәҙәни тәғәйенләнештәге учреждение исемдәрен ике телдә яҙыу тураһында әйтеп тораһы ла юҡ. Фин һәм швед телдәрен өйрәнеү бөтә мәктәптәрҙә лә мотлаҡ, ә юғары уҡыу йорттарында белем алыу, диплом һәм диссертация яҡлау һайлаған телдә алып барыла. Минең тәрән инаныуымса, ысын демократия һәм федерализм нигеҙҙәре тап шундай принциптарға таянырға тейеш.

Һүҙемде төрки халыҡтарының уртаҡ әҙәби мираҫы һәм донъя цивилизацияһының бөйөк рухи хазинаһы булған Орхон-Йәнәсәй руник яҙмаларына ҡағылышлы фекерҙәр менән тамамлағы килә. Бынан 13 йыл элек "Башҡортостан", "Йайыҡ" гәзиттәрендә минең "Тантананы ни менән ҡаршыларбыҙ? "исемле мәҡәләм баҫылғайны. Ул бер аҙ борсолоулы уйҙар менән ошолай тамамлана: "...Бер нисә йылдан беҙ XXI быуатҡа аяҡ баҫасаҡбыҙ. Әйтеүемсә, ул төрки яҙма әҙәбиәтенең 1500 йыллыҡ юбилей быуаты. Ни менән ҡаршы алырбыҙ уны? Башҡорт теленә бөтә йәмәғәтселек иғтибары һәм дәүләт юғарылығындағы ҡурсалау менәнме, әллә иҫ киткес вайымһыҙлыҡ һәм маңҡортлоҡ менәнме? Халыҡты халыҡ итеп тәрбиәләүсе милли мәктәптәр менәнме, әллә үҙ милләтенә ҡарата кәмһенеү, хурланыу тойғоһо уятыусы урыҫ мәктәптәре менәнме? Һорауҙар, һорауҙар... Уларға яуапты беҙ бөгөн ғәмәли эштәребеҙ, рухи мираҫтарыбыҙға ҡарата көндәлек хәстәрлек менән яуап бирергә тейешбеҙ. Ә рухи мираҫ киләсәк быуынға тел һәм яҙма ярҙамында еткерелә. Үҙ хазиналарыбыҙҙы үҙебеҙ тейешенсә баһалап, уларға лайыҡлы хөрмәт күрһәтмәһәк, беҙҙе кем хөрмәт итер?"

**ЫСЫНЛАП ТА...**

**Үҙ-үҙен ихтирам итмәгән кешегә хатта яҡын туғандары ла хөрмәт күрһәтмәй. Беҙ тотош милләт, халыҡтарҙың үҙ-ара мөнәсәбәте мәсьәләләре хаҡында һүҙ алып барҙыҡ. Эйе, ҙур һәм ҡеүәтле төрки милләттәренең айырып алғыһыҙ бер тармағы булған башҡорт халҡының данлы һәм оло тарихы, ҡабатланмаҫ матди һәм рухи мәҙәниәте, үҙенә генә хас традициялары бар. Иң мөһиме, беҙҙең алыҫ ата-бабаларыбыҙ яҙмалы һәм әҙәбиәтле халыҡ булған. Был, әлбиттә, ҙур ғорурлыҡ. Әммә былар барыһы ла беҙҙең индәргә бик оло яуаплылыҡ һәм бурыс та өҫтәй. Бөгөн һәммәбеҙ ҙә бер төптән булып, ошо яуаплылыкты бөтә тәрәнлегендә тойоп, ата-бабаларҙан мираҫ булған бурысҡа тоғро ҡалһаҡ ине.**

**Мәүлит ЯМАЛЕТДИН.**



✓ *Сығып булмаç утлы һарайҙарға*
*Инеп бара бит һуң халҡыбыҙ.*
*Һөрәнләйем тағы дүрт тарафҡа:*
*Ҡапҡаларҙы яба һалығыҙ,*
*Ҡапҡаларҙы яба һалығыҙ.*








Мин - көтөүсе. Йәйләүҙәрҙән китеп,
Малды ҡыуа инек ҡышлаҡҡа.
Ҡара һыуыҡ. Ямғыр. Уйҙарымда
Усаҡ ҡына ине ул саҡта.
Усаҡ ҡына ине ул саҡта.

Дошманыңа теләмәçлек теләк:
Әгәр көтһәң һарыҡ көтөүен -
Һин көтмә лә юлдар ҡыҫҡарыуын,
Һин көтмә лә ваҡыт үтеүен.

Һин ашыҡһаң, тиҙлек әкренәйә,
Ваҡыт әкренәйә, ул туҡтай.
Ана, ваҡыт өйөр артындағы
Сатан һарыҡ булып һылтыҡлай.

Бына, бер үр ҡала, бер боролош,
Һәм беҙ етәсәкбеҙ ҡышлаҡҡа.
Һарыҡтар ҙа һиҙҙе - кемуҙарҙан
Саба башланылар шул яҡҡа.

Эттәр ҡыуа төштө. Ашыҡһындар,
Мин уларҙы юрый тыйманым.
Шул саҡ нисек тотон күрмәгәнмен,
Тотон есен нисек тойманым...

Һарай яна... Минең һарыҡтарым
Тура тартып саба ҡапҡаға.
Ә бригадир ҡапҡаларҙы япмай,
Янғын, янғын, тиеп, саң ҡаға,

Ә һарыҡтар асыҡ ҡапҡаға
Яҡынлаша, саба талымһыҙ.
Эттәр ярһып ҡыуа, мин ҡысҡырам:
Ҡапҡаларҙы яба һалығыҙ.
Ҡапҡаларҙы яба һалығыҙ.

Тик ҡапҡаны инде ябып булмай,
Ҡапҡаларға инде ут ҡапҡан.
Кемдер ҡаршы төштө һарыҡтарға
Теге яҡтан, ә мин был яҡтан.

Ярһып аҡырамын, әйтерһең дә,
Үҙемә ут ҡапҡан тиерһең.
Нисек кенә булһын туҡтатырға,
Туҡтатырға һарыҡ өйөрөн.

Мин өлгөрҙөм. Тик бер генә һарыҡ
Сабып үтте һарай эсенә.
Сәбәләнәм, өйөр туҡтатам, тип,
Сәбәләнәм, түҙмәй эҫенән.

Өйөр бер аҙ тайшанғандай итте,
Мин уйланым: былар туҡталды.
Туҡтау ҡайҙа, теге бер һарыҡтан
Айырылманы, эскә уҡталды.

Ә ул һарыҡ сығып килә ине,
Ырғый-ырғый, түҙмәй эҫегә.
Өйөр үҙен этеп алып китте
Янып торған һарай эсенә.

Өйөр мине янған утҡа этә,
Ҡаршылашыр көс юҡ быларға.
Ҡотолорлоҡ бер генә юл ҡалды:
Ул да булһа - ҡолау. Ҡоларға!

Бына, мин бысраҡта аунап ятам,
Әйтерһең, бер үлән ҡыяғы.
Мине тапап, мине иҙеп үтә
Меңәрләгән һарыҡ тояғы.

Янған һарай, гүйә, көтөп торған
Көтөүемдең инеп бөтөүен,
Кинәт кенә төштө бүһерелеп,
Ут аҫтында ҡалды көтөүем.

Мин уларға берсә көйөп баҡтым,
Көлөп баҡтым, баҡтым йәлләп тә.
Әй, иҫәүән, меҫкен һарыкбаштар,
Йәндәрегеҙ булһын йәннәттә...

...Әле тормош тап теге көҙ кеүек,
Тәндәр түгел, йәндәр күшегә.
Был болғаныш замандарҙы үтеү
Енел тиһенме ни кешегә.
Енел тиһенме ни кешегә.

Яуап тапмай шаулы йыйындарҙа,
Майҙандарға халыҡ йыйыла:
"Ҡайҙа былтыр биргән вәғәҙәләр,
Алданылар, - тиҙәр, - быйыл да!"

Мөнбәрҙәргә сыға ораторҙар,
Ялҡын һүҙле, ялҡын теллеләр.
Ана, берәү сыҡты. Һәр һүҙенә,
"Һай, афарин! Ура! " - тинеләр.

Минә таныш ошо ут йомғағы,
Дәү ҡанаттан ялҡын телдәре.
Был бит теле менән һарай һала,
Утлы һарай бының телмәре.

Һәр һүҙе ут... Минең күҙ алдымда
Янып торған һарай һынлана.
Һәм намыҫым һөрән һала минә:
"Әй, көтөүсе, тиҙерәк! Һуңлама!"

Һәм мин сығам халыҡ ҡаршыһына:
"Туғандар, тим, зинһар, туҡтағыҙ!
Тыныс аҡыл кәрәк: майҙандарҙа
Тамаҡ ярыу барыбер толҡаһыҙ".

Бер һүҙемә мең һүҙ ырғыталар -
Халыҡ ярһыу, халыҡ талапсан.
Мин уларҙы туҡтатҡым да килә,
Тапалғым да килмәй ҡабаттан.

Һәм мин сәфәр сығам сал тарихҡа,
Мең һорауҙың эҙләп яуабын.
Баҡһаң, мин бит әлмисаҡтан бирле
Халҡым янған утта янамын.

* * *

Мин бит башта Арҡайымда янам,
Һөйәнтүҙә янам һуңынан.
Утлы һарай килә тарих буйлап,
Халыҡҡынамдың үткән юлынан.

Утлы һарай беҙҙе эҙәрләкләй,
Уяу ғына булһаҡ ярай ҙа.
Анра һарыҡ булһаҡ, оҙаҡламай
Ҡаласаҡбыҙ утлы һарайҙа.

* * *

Урыҫтарҙың сабый балалары ла
Русса белә, русса һөйләшә, -
Тиеп аптыраған беҙҙә берәү...
Әй, Мәхмүтйән ҡусты, мең йәшә.

Бер һин генә булһаң икән дә бит,
Урыҫ һүҙҙәренә табынған.
Тик һиненсә фекер йөрөтөүсе
Йөҙәр менләп башҡорт табылған.

Әгәр ҙә һин тик утыҙ йыл әүәл
Урыҫ һөйләшенән көнләшһәң,
Башҡорттоң бит хәҙер ҡап яртыһы
Тик урыҫса ғына һөйләшә.

Ҡотоптарҙан ҡайтып төшә ейән,
Бүләр тураһында һүҙ ҙә юҡ.
Ҡартатайҙың һүҙен аңламайҙар,
Ундай һүҙҙәр, тиҙәр, беҙҙә юҡ.

Мин уларға берсә көйөп бағам,
Илап бағам, бағам көлөптәр.
Янып барған һарайҙарҙан сығып,
Ҡасып барған ҡомаҡ кеүектәр.

Урыҫ рухы бында, урыҫ еçе,
Русса бейей, русса йырлайҙар.
Беҙ ҡытайса ҡыланырбыҙ микән,
Баҫып алһа беҙҙе ҡытайҙар.

Хәҙер күпме башҡорт сабыйының
"Пап, мам" тиеп теле асыла.
Был бит шул уҡ утлы һарайҙарға
Инеп барыуыбыҙ асылда.

Сығып булмаç утлы һарайҙарға
Инеп бара бит һуң халҡыбыҙ.
Һөрәнләйем тағы дүрт тарафҡа:
Ҡапҡаларҙы яба һалығыҙ,
Ҡапҡаларҙы яба һалығыҙ.

* * *

Быйылғы көҙ ғәжәп ҡырыҫ килде,
Көн аралаш яуа ямғыры.
Иҫкә төшә ошо көҙҙәй бер йәй -
Бала сағым... пионер лагеры.

Компартия... үҙенең йырын йырлап,
Бәүелткәндер беҙҙе бишектә.

Беҙ шат инек, хәҙер генә бына
"Лагерь" һүҙе йәндә өшөтә.

Өйрәттеләр нисегерәк тороп,
Нисегерәк яуап бирергә;
"Әй, партия! Һинең эшең өсөн,
Беҙ әҙербеҙ утҡа керергә!"

Анттар әйттерәләр. Ярһыталар.
Утҡа кермәй кеше, ярһытмай.
Йүгерешә пионерважатыйҙар,
Башлап сапҡан... теге һарыҡтай.

Анды иретеп, ҡалыптарға ҡойоп,
Ҡорос кеүек ҡатырмаҡсылар.
Әҙерләмәкселәр партияға
Зомбиҙар һәм комикадҙелар.

Ғибрәттәрен бындай тәрбиәнең
Һаман еталманым мин аңлап.
Янып торған утҡа ҡыуғандар бит,
Фекерҙәрҙе беҙҙең быҒаулап.

Һәр ауылда яҡҡандар был утты,
Мәсет манараһын ҡолатып.
Был "крематорийҙы" үткән бала
Үҙ атаһын һатҡан "кулак" тип.

Был "крематорийҙы" үткән бала
Танкҡа ҡаршы сапҡан аттарҙа...
Сәбәп тә юҡ кеүек ғәйепләргә,
Ғәйеп тә юҡ кеүек аҡларға.

...Мин уларға берсә көлөп бағам,
Көйөп бағам, бағам илаптар.
Ут күбәләгендәй ғәйеп була
Имән яҡһындай ир-аттар.

Мин - көтөүсе. Һеҙ уҡыған кеше,
Ошо хаҡта, зинһар, яҙығыҙ:
Янып барған һарай ҡапҡаларын
Ябығыҙ, тим, яба һалығыҙ.

* * *

Мин - көтөүсе. Һеҙ уҡыған кеше.
Мин ауылда, ә һеҙ ҡалала.
Һеҙҙең унда хәлдәр нисегерәк?
Ә беҙҙеке бигерәк алама.

Был тормоштоң холоҡ-фиғелдәрен
Аңым инләй алмай, ҡаңғырам.
Барлыҡ ҡаралтыһын һатып эсеп,
Янғыҙ улым үлде яңыраҡ.

Әрләне ул Рәсәй батшаларын,
Бер өҙләкһеҙ низер һөйләнде.
Эскенәйем янып бара, тине,
Ыҫҡындыр, тип, көмөш төймәмде.
Хыялдары шундай сағыу ине,
Аҡылы сос ине баламдың.
Ниәтенә аҡ нәҙерҙәр әйтеп,
Аҡ өмөттәр генә бағланым.

Мин бит уға өйрәтмәнем түгел,
Иҫ белгәне бирле тылҡыным:
Ауыр булһа ла түҙ, эсмә, тинем,
Хәҙер бына ҡороно тоҡомом.

Типһә, тимер өҙәр төçлө ине,
Бер бәһлеүән ине торғаны.
Майҙанда ал бирмәç көслө ине,
Араҡының булды ҡорбаны.

Һуңғы бер-ике йыл эсендә лә,
Ундан ашты инде ундайҙар.
Бер-бер артлы үлеп торһалар ҙа,
Эсеүҙәрен барыбер ҡуймайҙар.

Арта бара хәҙер ауылда ла
Аҡылдары зәғиф балалар.
Былар бит, ней... теге... янып торған
Һарайҙарға инеп баралар.

Ил түрәһе белмәй микән ни һуң,
Ни уйлайҙар икән башлыҡтар?
Берәй әмәл табыр кәрәк ине,
Бөтә бит һуң инде башҡорттар.

Беләм, башҡорт күндәм, намыҫсан ул,
Хөкүмәт бер шипкерт ташлаһа,
Тыйылырҙар ине, былайынса,
Йота бит һуң "йәшел аждаһа".

Араҡы ла беҙҙең халыҡ өсөн
Утлы һарай бит ул, аңлаһаң.
Сәбәп итеү кәрәк, бындай эштә
Ярҙам көтөп булмай Алланан.

* * *

Һин бит шағир. Ошо янғындарға
Йөрәгеңдән һин дә урын бүл.
Оло-Тәләк янып торһон унда,
Янып торһон унда Чернобыль.

Йырыңа ҡуш ошо ялҡындарҙы,
Ярһып йырла.
Әгәр танһалар -
Йөрәгеңдә булһын Салауатҡа
Утлы тимер һуҡҡан тамғалар.

Утҡа сапҡан халыҡ ҡаршыһына
Йөрәк ташла, табып сараһын.
Һыбайҙары төшөп ҡараһындар,
Йөйәүҙәре ятып ҡараһын.

Ҡайғыларҙың ҡайһыһы ла ҡыйын,
Тик күрмәйек йорт-ил ҡайғыһын.
Тиндәр араһында тиң булмайса,
Башҡорт аслан уттан айбанһын.

Ҡараһаҡал, Алдар һәм Зәкиҙәр,
Батыршалар күпме тырышты.
Нишләп тырышмайбыҙ ҡалдырырға
Хыялдарға торош тормошто.

* * *

Хыялдарым ожмах кеүек ине,
Хыялдарҙан шундай мин ундым.
Тормош һалҡынында өшөп-туңһам,
Хыялыма инеп йылындым.

Ҡаңғырыҡтан, ваҡлыҡтарҙан ҡастым,
Булмышыма һеҙҙе был ғәҙәт.
Хыял һарайымда, үҙ Мәккәмдә
Изгелеккә ҡылдым ғибәҙәт.

Шау хис кенә ошо һарайымда
Бәхет - батша, ҡайғы - кәнизәк.
Табындарҙа йәнәш ултырҙылар
Үткән тарих менән киләсәк.

Бында илау, һулыу, үлеү ҙә юҡ,
Мәңгелек яҙ ине был илдә.
Үлгәндәр ҙә, тыуыр кешеләр ҙә
Йәшәй ине минең күңелдә.

Һәм мөхәббәт ләззәтенән башҡа,
Ут күрмәгәйне был баштағыҡ.
Ярһыуымды баҫа алмай, ҡат-ҡат
Яна инем шунда ташланып.

✔ *Аллаһы Тәғәлә, үҙе Ҡөрьән яҙғандағыса, шиғри тел асҡысы биреп, шағирҙарға оло бурыс йөкмәтеп, миссия менән тыуҙыра, тиҙәр. Шағир үҙ бурысын үтәгәс, бер көн дә донъялыҡта тотмай, кире үҙ янына ала, тиҙәр.*



Батша ҡыҙын алдым, һәм ҡатыным
Фәрештәләй генә ул тапты. -
Бәхет һулышын тойҙом. Ләкин ҡапыл
Һарайыма минең ут ҡапты...

...Шаһитымын күпме янғындарҙың,
Тик быңдайын юҡ һис күргәнем.
Хыял яна, йылдар, айҙар яна,
Көндәр яна, яна төндәрем.

Был эҫегә, бәлки, түҙә алмаҫ
Йөрәккенәм бер мәл ярылыр -
Ҡотҡарырға хыял һарайымды
Мин табырмын әмәл барыбер.

Ҡомаҡ кеүек барыбер сығып ҡасмам,
Ҡурҡыныс бар ерҙән һаҡланып.
Бары, көс бир, Аллам!
Етһен көсөм,
Анра һарыҡтарҙай янмаҫ өсөн,
Утлы һарайҙарҙан ҡапланып.

* * *

Һаҡла, Тәңрем, утлы һарайҙарҙан!
Янғындарҙан һаҡла! Эй, Аллам!
Халҡым менән ҡайсаҡ ғорурланам,
Халҡым өсөн ҡайсаҡ оялам.

Ғүмер баҡый мин көтөүсе булдым,
Минә, ярай, уҡыу теймәне.
Ә һеҙ ҡайсаҡ юҡты һөйләйһегеҙ,
Бер дөйөләй итеп төймәне:
-Урыҫ-француз һуғышына башҡорт
Утыҙлап полк биргән!
-Йә? Шунан?!
-Төньяҡ амурҙары" исемләнеп,
Алғасҡыла йөрөгән!
- Йә? Шунан?!

Ул һуғыштың ҡуҡыш башындай бер
Фәтүәһе беҙгә тейһәсе!
Шуны тылҡыу һеҙгә мәртәбәме
Иҡтисади йәки сәйәси?

Һүҙҙәрегеҙ ҡыҫыр ғорурланыу,
Бер тамсы юҡ әрнеү юлағы.
Шуны ишеттемме, -
Йөҙйәшәр ҡарт -
Сабый кеүек илә илағым.

Уны белеү оло ғилем түгел,
Үә фән өсөн түгел ул һандар.
Ҡеүәтләрҙәр ғүмерендә бер ҡат
Һуғыш яланында булғандар.

Мин был хаҡта һөйләүҙәрҙе тыям,
Мин тыймаһам, һеҙҙе кем тыяр?

(Етмеш йәше тулған ҡарттарға һәм
Шағирҙарға ғына ихтыяр).

Мин бойорам! Сөнки дүрт-биш йылдан
Әйләнермен ҡара тупраҡҡа.
Шуның өсөн минең һөйләгәнде,
"Тыуған ер һөйләй" тип тыңларға!

...Ул ғорурлыҡ түгел, бер ҡатлылыҡ,
Хатта меҫкенлек бит ул һандар.
Кем алдында тоғролоғоҙҙо
Иҫбатлайһығыҙ һеҙ, уландар!

Любезники, имеш, любизар, тип,
Ҡотос әйткән, тиҙәр. Ыстырам!
Сираттағы утҡа һөсләткән ул,
Һалпы яҡҡа һалам ҡыҫтырған.

Күпме башҡорт ҡайтмаған шул яуҙан! -
Беләме ул йырсы кисереп?
Ҡаһымдарҙы нисек үлтергәнен,
Шул ҡотостар ағыу эсереп?

Өшөгәндә һеҙҙе йылыттымы
Сәмрегошло оло ил тажы?
Сит баһаға мохтаж халыҡмы беҙ,
Ситтәр баһаһына мохтажмы?

Сит баһаға тик ҡол ҡуҡырая,
Онотмағыҙ ошо һүҙҙәрҙе.
Кем һуң улар, беҙҙе баһаларға,
Кем һуң әле улар үҙҙәре?

41-ҙәге һуғыш. Тағы башҡорт...
Тағы һыбай... Танк, туптарға
Ҡаршы сапты...
Ғәзиздәрем минең,
Ваҡыттыр бит аҡыл туплярға!

Ә һин, шағир, ҡыҫҡа хәтерләһең.
Һин, ахыры, онота башланың.
Башҡорттарҙы ҡырыу хаҡындағы
Васыятын Петр батшаның.

Рәсәй тулы Петр вариҫтары,
Уяу булыу кәрәк ҡалай ҙа.
"Любезники" тип, йә "воры" тип тә
Ҡыуаларҙар утлы һарайға...

...Хуш! Бәхил бул! Шиғыр итеп яҙ һин
Был хаттарҙы. Булһа язырлыҡ.
Мин бушандым. Хәҙер ҡәберҙә лә
Тыныс күңел менән ятырлыҡ.

Ошоларҙы һинә һөйләрмен тип,
Уйларлыҡмы ине ул саҡта...
Мин көтөүсе инем, йәйләүҙәрҙән
Малды ҡыуа инек ҡышлаҡҡа...

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# ЯНЫР ӨСӨН ТЫУҒАЙНЫ...

Һәр шағирҙың, әҙиптең бер (уҙа барһа, ике-өс) иң төп әҫәре булыусан. Ижадсының йөҙөн билдәләгән ундай әҫәрҙәр ваҡыт һынауын уңышлы үтеп, уҡыусы, халыҡ хәтеренә яҙыусының исеме менән берҙәй үк булып уйыла, исеменең синонимына, символына әүерелә. Шуның өсөн дә беҙ теге йәки был шағирҙың, яҙыусының исемен ишетеү менән тәүҙә шул әҫәр күҙ алдына килә. Әйтәйек, беҙ "Һуғыш һәм солох" романы, тиһәк, Лев Толстойҙы, "Евгений Онегин" романы, тиһәк, Александр Пушкинды, "Карт һәм диңгеҙ" хикәйәһе, тиһәк, Эрнест Хемингуэйҙы, Аҡмулла, тиһәк, "Башҡорттарым уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк" шиғырын, "Аҫар", тиһәк, Ризаитдин Фәхретдиновты, Шәйехзада Бабич, тиһәк, "Беҙ үҙебеҙ башҡорттар" шиғырын, "Йәмле Ағиҙел буйында" поэмаһы, тиһәк, Рәшит Ниғмәтиҙе, "Йөрәк" шиғыры, тиһәк, Рәшит Назаровты "Туған тел" шиғыры, тиһәк, Рәми Ғариповты, Рәмил Ҡолдәүләт тиһәк, "Килен" шиғыры иҫебеҙгә төшә. Был исемлекте тағы ла бик оҙонға һуҙырға булыр ине.

Шуның кеүек, беҙ Рәйес Түләк, тиһәк, иң тәүҙә "Яныу" поэмаһы иҫебеҙгә төшә. Уның киң билдәле "Кашмау" поэмаһын да "Рәйес Түләк синонимы" исемлегенә индерергә була. "Яныу" поэмаһына килгәндә, был әҫәр шағирҙың асылын, шағир булараҡ донъяға яралыу һәм унан китеү маҡсатын бар тулылығында сағылдыра кеүек. Улай ғына түгел, Рәйес донъяға тик ошо әҫәрен яҙыу маҡсатында тыуған һәм уны яҙғас, донъялыҡтан китеп барған кеүек...

Мин бушандым. Хәҙер ҡәберҙә лә
Тыныс күңел менән ятырлыҡ,-

тип юҡҡа ғына әйтмәй ул әҫәрҙең аҙағында. Аллаһы Тәғәлә, үҙе Ҡөрьән яҙғандағыса, шиғри тел асҡысы биреп, шағирҙарға оло бурыс йөкмәтеп, миссия менән тыуҙыра, тиҙәр. Шағир үҙ бурысын үтәгәс, бер көн дә донъялыҡта тотмай, кире үҙ янына ала ла, тиҙәр. Шулайҙыр. Юҡһа шағирҙарҙың йөшен ялтлағандай ҡыҫҡа ғына ғүмерен нисек итеп аңлатаһың инде? Рәйес Түләк иһә, беҙҙе берсә тетрәндереп, берсә һоҡландырып йәшнәне, бәлә-ҡазаларҙан, һәләкәттәрҙән иҫкәртергә теләп, поэмаһындағы лирик герой-көтөүсе кеүек, "янған һарайҙарға" үҙе инеп янды ла, беҙҙе иҫкәртеп китте кеүек. Яныр өсөн тыуғайны, яна-яна бурысын үтәп китте шағир. Иҫкәртеүе аңыбыҙға кҫсте, заңыбыҙҙы яныуы йылыта.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

*АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО*

## ИР ТИҺӘҢ ДӘ ИР - ТОРҒАНЫ БЕР СИР

Ауылда яңғыҙ ғына бала булып үҫкән Хәмәтйән ағай булды. Ҡулынан һис бер эш килмәй. Нимә генә эшләһә лә ҡатынына һалына. Хатта ашағанда ла үҙен ашауҙан туктатырға бойора. Эшкә бер көн ике төрлө - һары һәм ҡара туфли кейеп килгән. Иптәштәре әйткәс: "Эх, йүнһеҙ ҡатын, ҡарамаған бит", - тимәһенме. Үҙ аяғын үҙе күрмәгәнгә ҡатын гәйепле булып сыҡҡан. Йәй Хәмәтйән ашығып ҡайтып инә лә: "Ҡатын, тиҙ генә балта һабын рәтләп бир, мин сәй ҡайната торам", - ти. Баҡтиһәң, япраҡ аҙыҡ бәйләргә баралар икән. Хәҙер ҙә йәйы сыҡһа, ҡатын балта һапла әле, тип көләшәләр. "Йәпһеҙ һәнәк, ағас ҡул" тигән мәҡәл ошондай ирҙәргә әйтелгән инде.

## АНАУ КЕШЕ ТҮРӘГЕҘМЕ?

Элек ҡыш буйы колхозсылар урман ҡырҡып, алыҫ ауылда яталар ине. Араларында йыуан кәүҙәле, ҡыҙыл йөҙлө Шәрәф тә бар. Былар янына бер ауыл кешеһе килә. Бер аҙ торғас, ул: "Анау кеше түрәгеҙме әллә, өләштә күп ашай, үҙе йыуан, елкәһенә тиклем ҡыҙыл", - тип бышылдап ҡына һораша. Ҡалғандар ни, өй һелкетеп көләләр. Шәрәф тә шул ябай колхозсы, бында түрә юҡлығын аңлаталар.

Борондан байҙар, түрәләр йыуан, ҙур ҡорһаҡлы итеп һүрәтләнә. Теге кешелә лә шул тойғо һаҡланған. Төрлө күренеш-хәлдәр һыулы ҡутыр кеүек бит ул, ҡутыры төшә, урыны ҡала. Һимеҙлек тә кеше күңелендә өлөш ашаусы түрәләр, байҙар булып ҡалған.

## ҒӘЙШӘ ҺӘМ ШОКОЛАД

Ғәйшәнең бәләкәйҙән нимәне булһа ла ҡуйынына тыға торған ғәҙәте булды. Буй етеп, тормош ҡорғас та шул ҡылығын ҡуймаы. Бер мәл былар күрше ауылға туйға барған. Өҫтәлдә һый күп, шоколад кәнфит күҙҙе ҡыҙҙырып ята. Ҡайтабыҙ, тип уйлағандыр инде,Ғәйшә байтаҡ кәнфитте ҡуйынына йәшерә. Юҡ, ҡайтмайҙар, йоҡларға ҡалалар. Төнөн ире һыу эсергә торһа, түшәк тә, кейеме лә әллә нәмәгә буялған. Ғәйшәне уятһа, ул да буялған. Иренен, "эш боҙоп" ятҡанбыҙ, тип уйлап, ҡото алына, ә Ғәйшә хәлде шунда уҡ аңлай: шоколадтар ирегән. Шунан аҙаҡ Ғәйшә шоколад һүҙенән дә уҡшый, ҡаса башлай. Кешеләргә ҡыҙыҡ: бөгөн дә өҫтәлдә шоколад күренһә, Ғәйшәне иҫкә төшөрөп көләләр. Насар ғәҙәт оятҡа ла ҡалдыра, иң татлы ризыҡтан да биҙҙерә, тел тирмәнендә лә әйрәлтә шул.

## "ҺАЙ, БУШ ЫШТАН..."

Автобус туҡталҡаһында байтаҡ йәштәр араһында Сәрби әбей ҙә тора. Төрлө машиналар килеп китеп тора, буй-буй салбар кейгән йәштәрҙе алып китеп бара. Әбей һаман тороп ҡала. Уның да ыштаны буй-буй, тик оҙон күлдәк кенә күрһәтмәй. Бер аҙ торғас, әбей күлдәк итәктәрен күтәреп, бөрмәһенә ҡыҫтыра. Быны таныш шофер Сәгмән килеп туктай ҙа: "Инәй, ниңә улай күлдәгенде күтәреп тораһың?" - тип ғәжәпләнә. Әбей:"Аптырағандан инде, улым, машиналар буй ыштанлы ҡыҙҙарҙы ала ла китәләр, мин торам да ҡалам, мин дә буй ыштанымды күрһәтәйем, тим", - тип яуаплай. Сәгмән көлә, көлкө ауылға тарала. Хәҙер ҙә туҡталҡала торғанда, буй ыштанлылар бармы, тип көләләр. Кейем дә кешене кеше араһына сығара шул.

## НАФИҒА САША

Ауылда урыҫ, башҡорт, сыуаштар аралашып, гөр килеп йәшәй, өс телдә лә һөйләшәләр. Мәктәптә Нафиға еңгә ғүмер буйы йыйыштырыусы булып эшләне. Бер көндө физкультуранан уҡытырға Саша Кузнецов килде, бөтәһе менән дә танышып йөрөй был. Сират еңгәгә еткәс, "Нафига" тип урыҫсалап әйтә был. Саша, был еңгә мине мыҫҡыл итә, тип уйлап, директорға ошаҡлай. Бөтәһе лә көләләр, егет аптырай. Еңгәнең исеме шулай тип төшөндөрәләр.

Әммә Сашаға "Нафига" ҡушаматы бөтә ғүмеренә тағылды. Әле лә Сашалар осраһа, "Нафига" тип көлөшәләр. Саша башҡортса яҡшы белә, әммә уҡытыусы булғас, урыҫса ғына һөйләшергә уйлағандыр инде. Белгәнен йәшергән - оятҡа ҡалған, тәрән соҡорға ла тәгәрәгән, тигәнде белеп етмәгәндер шул.

## "ТЕЛ БЕЛМӘГӘНДЕ ҠУЛ БЕЛӘ"

Ғәли күп йылдар урыҫ ауылында тирмәндә эшләне. Хужа ла урыҫ. Әммә Ғәли һис кенә лә урыҫса өйрәнә алманы, арлы-бирле генә һупаланы. Бер көн ауылдан Сапон ҡарт, Изелхан бабай килә быныӊ янына, тиҙҙән туй булыуын, 1 тоҡ он кәрәклеген һөйләйҙәр, хужаны ла саҡырырға булалар. Был икәү ҡайтып киткәс, Ғәли хужаға: "Сапонға один мешок, Изелханға один мешок, свадьбага один мешок, ты пойдешь әпәт пять мешок мука надо", - тип аңлата. Урыҫ бер ни аңламай, свадьба һүҙен ишеткәс кенә, ладно, давай, тип ҡуя. Ғәли кис менән 8 тоҡ он төйәп, Сапон менән Иҙелханға алып барып бирә. Урыҫты ни, иҫерткәнсе һыйлайҙар, уныһы күпме он киткәнен дә белмәй. Ғәлиҙең теле урыҫса шәп белмәһә лә, ҡулдары бик шәп булып сыға, 1 тоҡ урынына 8 тоҡто "осора". Тирмән һүҙе сыҡһа, ошо хәлде һөйләмәй ҡалмайҙар әле лә. Белмәһәң дә һупала, тигәне ошо инде.

## АҠСА БИРМӘҺӘҢ, ӨТӘҪЛӘЙЕМ

Дәүләтбикә әбейҙең иркә генә Иштуған исемле улы булды. Бер бөртөк булғас ни, бик иркә һәм үҙ һүҙле булып үҫте. Егет ҡорона етһә лә, кәләш тә алманы. Эсергә лә өйрәнде был. Эшләмәгәс, аҡсаһы юҡ, әсәһенең пенсияһын таптырып бер була. Әсәһе аҡса бирмәһә:"Аҡса бирмәһәң, өтәҫләйем", - тип янай. Улар ғүмер баҡый ҡыйыҡһыҙ ситән аласыҡта йәшәне, мөрйәне тыштан ябып ҡуялар ине. Иштуған ишекте терәтә лә, ҡыйыҡҡа менеп, мөрйәне томалай, төтөн эскә тула, әбей сәсәй башлай. Шунан ни хәл итһен, аҡса биреп, инәлеп, мөрйәне астыра. "Янғыҙ бала түгел, аяҡ аҫтынан сыҡҡан яу бит ул", - тип үҙе зарлана. Әле лә "Аҡса бирмәһәң, өтәҫләйем" һүҙе телдән төшмәй, бурысҡа йә эсергә аҡса һораусылар ҡүберәк ҡулланa уны.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы.**

✓ *Бер осрашыуҙа нисек һынап өлгөргәндер, асылда, ул миңә үҙенең моң аманатын тапшырҙы. Был яҙмаларҙы мин күҙ ҡараһы һымаҡ һаҡлайым, уларҙы тыңлағанда, Кәрим ағайҙың васыятын ишеткәндәй булам.*

*ИНТЕРНЕТТАН*



# ДУҪЫҢДЫ ҠУНАҠҠА САҠЫРҺАҢ...

## һалым түлә

■ 20 ғинуарҙан РФ Һалым кодексы статьялары, шулай уҡ айырым закон акттарына үҙгәрештәр үҙ көсөнә инде. Улар буйынса, Рәсәй гражданлығын алыу йәки унан сығыу өсөн дәүләт пошлинаһы күләме арта. Сит ил паспорты өсөн дәүләт һалымы ла үҙгәрә. Иҫке өлгөләге паспорт оло кеше һәм 14 йәшкә тиклемге балалар өсөн 300 һум торасаҡ, өлкәндәр өсөн биометрик паспорт - 2,5 мең ярым, балалар өсөн - 1 200 һумға барып баҫа. Федераль закондағы үҙгәрештәргә ярашлы, электрон мәғлүмәт йөрөтөүсе сит ил паспорттарының яраҡлылыҡ ваҡыты 10 йылға тиклем оҙайтылған. Бындай паспорттар өсөн дәүләт пошлинаһы 2 меңгә тиклем буласаҡ. Сит ил кешеһе Рәсәйгә инеү һәм сығыу визаһы өсөн - 600 һум, сикте күп тапҡыр үтеү өсөн 1000 һум түләргә тейеш була. Башҡа дәүләт вәкилен ҡунаҡҡа саҡырыу өсөн рәсәйле 500 һум түләйәсәк. Сит ил эшселәрен эшкә йәлеп итеү 6 меңгә барып баҫасаҡ. Сит ил кешеһе йәки гражданлығы булмағандар 2 мең түләп, эшләүгә рөхсәт ала ала. Рәсәйлеләр иҫке сит ил паспортының яраҡлылыҡ ваҡыты сыҡмаһа ла яңы сит ил паспортын алыу хоҡуғына эйә.

■ "Кортес" тикшеренеү-аналитика үҙәге мәғлүмәттәренә ҡарағанда, донъя баҙарында нефть ҡиммәтләнә, шуға ла яҙға ҡарай бөтә яғыулыҡ төрҙәренә лә хаҡтар күтәреләсәк. Йыл башынан Рәсәйҙә АИ-92 маркалы бензин уртаса - 38, АИ-95 - 28 тингә арзанайған, әммә күмәртәләп алыу хаҡтары артҡан. Росстат мәғлүмәттәре буйынса, яңы йыл байрамдары ваҡытында Рәсәйҙең 43 субъектында бензинға хаҡтар төшкән, 28 төбәктә шул килеш ҡалған.

■ Россельхознадзор рәйесе Сергей Данкверт белдереүенсә, тиҙҙән Рәсәй Исландияның ете предприятиеһынан ит һәм ит продукттары һатып ала башлаясаҡ. Уларҙың бишәүһе - һарыҡ, икәүһе йылҡы ите етештереү менән шөғөлләнә. Бынан тыш, был ил Рәсәйҙе балыҡ продукцияһы менән дә тәьмин итәсәк.

■ Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығы башланғыс синыфтар уҡытыусыһының статусын һәм эш хаҡын күтәреү тураһында норматив документтар әҙерләне һәм тиҙҙән улар Хөкүмәткә тәҡдим ителәсәк. Бынан тыш, Фурсенко белдереүенсә, уҡытыусыларҙың аттестация үтеү мәсьәләһендә лә үҙгәрештәр буласаҡ.

■ 1 ғинуарҙан Рәсәйҙә хлор менән эшкәртелгән ҡош итен тыйған санитар нормалар үҙ көсөнә инде. Мәктәп, башҡа белем биреү учреждениелары ашханалары, шулай уҡ колбаса етештереү өсөн һыуытылған иткә өҫтөнлөк бирелә, ә ит быға тиклем хлор иретмәһе ҡулланып һыуытыла ине. Асыҡланыуынса, хлор иткә лә һеңеп өлгөрә һәм һаулыҡҡа ҙур зыян килтерә. Шуға ла хәҙер хлор менән эшкәртеү тыйыла, тик яңы йылға тиклем ситтән индерелгән продукция был тыйыуға эләкмәй, шуға ла ит һатып алғанда иғтибарлы булығыҙ. Республика етештереүселәре тулыһынса яңы нормаларға күсте һәм итте һыуытыу өсөн боҙло һыу ҡуллана башланы.

■ Өфө косметология үҙәгендә көн һайын яҡынса ете операция яһала, пластик операцияларҙың һаны йылына 2 меңгә етә. Ҡатын-ҡыҙҙар йөҙ тиреһен тарттырыу, күкрәкте, ирендәрҙе ҙурайтыу, артыҡ майҙарҙы алып ташлатыу өсөн мөрәжәғәт итә. Яратҡан артисына йәки ҡолаҡтарын эльфтыҡына, тештәрен вампирҙарҙыҡына оҡшатыуҙарын һорап та киләләр, хирургтар, ғәҙәттә, бындай үтенестән баш тарта. Шулай ҙа күҙҙәрен ҙурайтырға теләүселәр иң күбе иҫәпләнә. Пластик хирург ярҙамына көслө зат вәкилдәре лә йыш ҡына мөрәжәғәт итә.

*КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ*

# ҠУРАЙСЫЛАР ОСТАЗЫ БУЛДЫ

## ҡурайсылар оҫтаһы

**Быуаттар төпкөлөнән беҙҙең көндәргә килеп еткән ҡурай сәнғәте йылъяҙмаһында исемдәре алтын хәрефтәр менән уйылған шәхестәр араһында Кәрим Дияровтың лайыҡлы үҙ урыны бар. Борондан килгән йола был: ҡурайсы көйҙө уйнар алдынан тарихын һөйләр, төрлө ырыуҙарға, төбәктәргә хас варианттарын уйнап ишеттерер, йыры булһа, йырын да йырлар, бейеү көйө икән, бейеүен дә бейеп күрһәтер булған. Асылда, ҡурайсымын тигән ир аҫылы ҡурайҙа уйнау маһиры булыу менән бергә, тарихсы ла, фольклорсы ла, йыраусы ла, бейеүсе лә, сәсән дә булған. Шуның өсөн дә халыҡ ҡурайҙа уйнаған һәр кемде ҡурайсы тип атамаған, был ҙур исемде ҡәҙерен белеп кенә, лайыҡлыларға ғына биргән.**

Кәрим Мөхәмәҙиә улы Дияров ысын ҡурайсы булды. Уның магнитофон таҫмаһына яҙҙырып ҡалдырған 120 яҙмаһы Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты фондында, тиҫтәнән ашыу яҙмаһы Башҡортостан радиоһы фондында һаҡлана, ете тиҫтәнән ашыу әҫәрҙең тарихы, легенда-риүәйәттәре, ноталары, йыр текстары китапта баҫылып сыҡты (Кәрим Дияров "Сал Уралдың моңдары". Төҙөүселәре - Р.Шәкүр, Ф.Камаев, Өфө, 1988).

Башҡорт бейеүе белгесе Лидия Нагаеваның "Танцы восточных башкир" (Москва, 1981) тигән монографияһында Кәрим ағайҙың башҡорт бейеүе тураһында һөйләп биргән мәғлүмәттәре, бейеп күрһәткән хәрәкәттәренең атамалары килтерелә. Лидия Ислам ҡыҙы "Хазина" телетапшырыуында: "Башҡорт бейеүе буйынса мәғлүмәт юллап сыҡҡан сәфәремдең башында уҡ Кәрим Дияровҡа осрауыма әле булһа ҡыуанам, - тигәйне. - Кәрим ағайҙы беҙҙең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ҡурайсы тип белә инек, ә ул маһир бейеүсе лә икән. Ул миңә бик күп хәрәкәттәрҙең мәғәнәһен аңлатты, уларҙың халыҡта нисек аталыуын, йәғни терминдарын әйтеп бирҙе".

Миңә беренсе тапҡыр Кәрим ағайҙы 60-сы йылдар уртаһында үҙебеҙҙең өйҙә күрергә насип булды. Ул йылдарҙа үҙешмәкәрҙәрҙең төбәк смотрҙары үткәрелә торғайны. Ҡыштың салт аяҙ бер көнөндә беҙҙең Таулыҡай ауылына күрше тирә-яҡ ауылдарҙан халыҡ таланттары йыйылды. Һәр тарафтан шат тауыштар ишетелә, күңелдәр күтәренке, клубта, шулай уҡ ҡайһы бер өйҙәрҙә репетициялар бара. Беҙҙең өйгә Салауат исемендәге колхоздың ун бишләп ҡурайсыһы йыйылған: уларҙы атайымдың ике туған ағаһы ҡурайсы Ғәтиәт олатай алып килгән. Араларынан бик абруйлы берәүҙең һәр кәңәше иҫәпкә алына, һәр төҙәтмәһе шунда уҡ үтәлә. Репетициянан һуң был ағай икенсе бер ҡурайын алып уйнап ебәреүгә көмөштәй сыңғырап торған саф тауышлы апай ҡушылып йырлап алды. Аҙаҡ атайым менән әсәйемдең оло ихтирам менән телгә алыуҙарынан уларҙың Фәрзәнә һәм Кәрим Дияровтар булғанын белдем (аҙағыраҡ Кәрим ағай йәш сағында Темәстә уҡыған осорҙа әсәйемдең яҡын ағаһы, мәшһүр йыраусы Әбдрәхим Исҡужиндан халыҡ сәнғәте һабаҡтары алғанын да белдем - **Ю.Ғ.**).

1-се Республика башҡорт интернат-мәктәбендә уҡығанда мәшһүр ҡурайсы-остаз Әҙһәм Исҡужиндан тәүге ҡурай һабаҡтары алыу, университетта уҡығанда данлыҡлы ҡурайсылар Рәхмәтулла Бүләкәнов, Абдулла Хәлфетдиновтар менән яҡындан аралашыу бәхете эләкте. Ҡурай сәнғәтенә ныҡлап ылығып өлгөрөлгәндер - 1976 йылдың йәйендә Баймаҡ районының Ниғәмәт ауылына Кәрим ағайҙарға барҙым. Ул кем балаһы икәнемде һораны ла мине бер ниндәй ғәжәпләнеүһеҙ ҡабул итте, Фәрзәнә апай шунда уҡ һый-хөрмәтен әҙерләне. Кәрим ағайҙың ҡурылдай астмаһы өйәнәгенән яфаланған мәле ине, шуға ул ҡурайҙа уйнаманы, әммә минән бер нисә көй уйнатты. Тиң күреп һөйләште, йыш ҡына телевидениела, радиола, сәхнәлә йырҙарҙы, көйҙәрҙе боҙоп башҡарыуҙар, яһалма биҙәктәр менән мауығыуҙар ишетелгәне (аҙаҡ белеп-күреп йәшәнем, Кәрим ағай бындай хилафлыҡтарға аяуһыҙ булды, кәрәк саҡта, кәрәк ергә хат яҙҙы, саң ҡаҡты - **Ю.Ғ.**) тураһында фекер алыштыҡ. Шунан магнитофонынан дүрт сәғәт буйы уның яҙмаларын тыңланыҡ. Был осрашыу яҙмышыма ни ҡәҙәре йоғонто яһаясағын күҙ алдыма ла килтермәй инем әле.

Сентябрь айында Кәрим ағайҙан миңә посылка килеп төштө. Асып ҡараһам... Үҙенең магнитофон яҙмалары! Ҡушып һалған хатында әллә ниндәй яңғырауыҡлы һүҙҙәр ҙә яҙмаған, тик йәйге әңгәмәне дауам иткәндәй, ҡайһы бер фекерҙәрен килтергән, уңыш теләгән. Бына шундай иҫ киткес баҫалҡы, оло йөрәкле кеше ине Кәрим ағай! Белмәйем, бер осрашыуҙа нисек һынап өлгөргәндер, асылда, ул миңә үҙенең моң аманатын тапшырҙы. Был яҙмаларҙы мин күҙ ҡараһы һымаҡ һаҡлайым, уларҙы тыңлағанда, Кәрим ағайҙың васыятын ишеткәндәй булам. Бына шул аманатты алғандан һуң, Кәрим ағайҙың вафатына хәтле 9 йыл буйы беҙ йыл һайын күрешеп, аҙна



Фоторәсемдә: Дамир Вәлиев, Кәрим Дияров, Юлай Ғәйнетдинов

✓ *Даими тырышлыҡ һалыу ҡапыл күрһәтелгән әүҙемлеккә ҡарағанда һөҙөмтәлерәк. Ул кешене маҡсатҡа яҡынайта, шул уҡ ваҡытта көтөлмәгән хәл-ваҡиғаларҙы йырып сығырға ярҙам итә.*



һайын тигәндәй хат алышып йәшәнек.

Йәй Кәрим ағайға барһам, мотлаҡ урманға сабынлығына алып сығыр ине. Үҫеп ултырған ҡурайҙарға теймәй, уратып саба, берәй матур ҡурайҙы ҡырҡып алып, миңә биреп яһарға ҡуша. Кинйә улы, минең ҡорҙаш Батыр шул урында үләнгә ашъяулыҡ йәйеп, бәләкәй табын әҙерләй. Кәрим ағай төрлө көйҙәрҙе уйната, ҡайһы бер көйҙө ҡабаттан уйнатып, кәңәшен әйтә. Айырыуса "Баяс"ты иғтибар менән тыңлар ине. "Элек Ирәндек буйҙарында ҡурайсының кимәлен "Баяс"ты еткереп уйнай алыуы буйынса билдәләгәндәр", - тиер ине. Ирәндек-Һаҡмар төбәге борондан ҡурайсылары менән дан тотҡан. Кәрим ағай үҙ ғүмерендә байтаҡ ҡурайсы күргән кеше булараҡ, Хәмит Әхмәтовҡа тиң ҡурайсыны ишеткәнем булманы, тиер ине. Хәмит ағай уйнаған урында кеше үҙ-ара һөйләшә алмаған - бер-береңде ишетерлек булмаған. Тәртә йыуанлыҡ ҡурайҙа уйнаған ул, сөнки ҡәҙимге ҡурай сыҙамай, сатнай торған булған.

Кәрим ағай үҙе ҡурайҙа боронғоса, тандыр ғына, моңоноң дәрәжәһен, тәмен белеп, тойоп уйнаны. Ер шарында бихисап тынлы музыка ҡоралдары бар, әммә тик ҡурайсы ғына ҡурай тауышына үҙенең күкрәк моңон ҡушыу (ҡурайҙа тауыш сығарыу үҙенсәлеге уға бындай мөмкинлек бирә - **Ю.Ғ.**) оҫталығына эйә, һөҙөмтәлә традицион ҡурайсы уйнағанда үҙенә күрә музыкаль ансамбль яңғырауы хасил була. Кәрим ағай традицион ҡурайсы эталоны булды, тиһәм дә арттырыу булмаҫ. Тағы шуныһы: ҡурайҙа уйнаһынмы, йырлаһынмы, уның башҡарыуына иҫ киткес теүәллек хас ине: бер бөгөлөш тә төшөп ҡалмай, артығы ла юҡ.

БАССР-ҙың 50 йыллығы кеүек ҙур байрамдарҙа, ғәҙәттә, райондарҙан ҡурайсылар йыйып, Өфөнөң, Мәскәүҙең, Ленинградтың, башҡа ҙур ҡалаларҙың оло сәхнәләренә сығара торғайнылар. Урал аръяғы райондары ҡурайсыларының танылған лидер Кәрим Дияровтың ярҙамына таянғанын иҫләүселәр бөгөн дә бар. Бөгөн урта һәм өлкән быуындан байтаҡ ҡурайсылар Кәрим ағайҙы үҙенең оҫтаҙы һанай икән, был һис тә ғәжәп түгел. Кәрим ағай ғүмеренең аҙағынаса йыр, көй йыйҙы, өйрәнде. Йырҙы сыҡҡан төбәгендә өйрәнергә тырыша ине. "Орсоҡ"то, мәҫәлән, Әбйәлил районында ҡунаҡта отоп алһа, "Томан"ды Учалыла ишеткәнсә йырлар һәм ҡурайҙа уйнар ине.

Кәрим ағайҙың аманаты миндә халыҡ ижады ынйыларын йыйыу ҡомары көсәйеүгә - шәхси архив туплай башлауға, аҙағыраҡ Башҡортостан телевидениеһында "Хазина" ижад берекмәһен ойоштороп, юғалып барған йырҙарҙы, көйҙәрҙе яҙып алып, халыҡҡа ҡайтарыуға этәргес булды. 1978 йылда ҡурайсыларҙың Йомабай Иҫәнбаев исемендәге призына I республика бәйгеһендә Кәрим ағайҙың яҙмаларынан өйрәнгән "Күбәташ" һәм "Боронғо Заһиҙә" көйҙәрен башҡарыуымды Гран-При дәрәжәһе менән билдәләнеләр.

70-се йылдарҙың аҙағында Кәрим ағай ике тапҡыр Өфөгә килеп ҡайтты. Тәүгеһендә бер аҙна самаһы миндә, ятаҡта йәшәне, Башҡортостан радиоһына (Фәниә Хәлитова-Сөләймәноваға рәхмәт, былдай шәхестәрҙең ҡәҙерен белде һәм студияла яҙыу мөмкинлеген хәстәрләне - **Ю.Ғ.**) тиҫтә ярым көй яҙҙырҙы. Дамир Вәлиев кеүек ҡурай моңона битараф булмаған ғалимдар, яҙыусылар һ.б. менән таныштыу, дуҫлашты. Икенсе килеүендә күҙенә операция яһатты. Рәхмәт Марат ағай Аҙнабаевҡа, үҙе килеп ҡарап йөрөнө. Ул ваҡытта Өфө дәүләт сәнғәт институтында музыкаль фольклор түңәрәге алып барырға тура килгәйне. Түңәрәккә йөрөүсе ул саҡтағы студенттар Тәнзилә Үҙәнбаева һәм Флүрә Килдейәрова Кәрим ағай ятҡан дауаханала башҡорт халыҡ йырҙарынан ғына торған рәсми булмаған концерт бирҙе. Үҙенең аманатынан "Баяс", "Кәкүккәй", һ.б. йырҙарҙың башҡарылыуы Кәрим ағай өсөн ҙур ҡыуаныс булды, ә башҡа ауырыуҙарҙың ни хәтлем ҡәнәғәт булып ҡалғаны тураһында әйтеп тораһы ла түгел.

1981 йылда Кәрим ағай Өфөгә килде. Маҡсаты - китап сығарыу ине. Үҙе яҙған тексты әҙәби яҡтан эшкәртеү өсөн яҙыусы, ғалим Рәшит Шәкүргә мөрәжәғәт итте, әҫәрҙәрен нотаға һалыу өсөн мин уны фольклорсы, сәнғәт фәндәре кандидаты Фәрит Камаев менән таныштырҙым. Китапҡа инәсәк әҫәрҙәрҙең исемлеген төҙөү бурысын Кәрим ағай миңә йөкмәтте. 72 әҫәрҙән торған исемлек әҙерләнем. Фәрит Камаев сағыштырмаса тиҙ арала көйҙәрҙе нотаға һалды. Тик нәшриәттең ҡыбырлауы яй булдымы, әллә башҡа сәбәпме, китап сығыу һуҙылып китте. Кәрим ағай, исмаһам, китабымды Фәрзәнә күрһә ярар ине, тип тырыша ине һәм... китабын күрмәй, үҙе 1985 йылда яҡты донъянан китте. Шөкөр, 1988 йылда сыҡҡан китапты Фәрзәнә апай күрҙе.

Кәрим Дияров 1910 йылдың 15 ғинуарында Ырымбур губернаһы Орский өйәҙе (хәҙерге Баймаҡ районы) Басай ауылында тыуа, кесе йәштән байҙарҙың малын көтә. Бәләкәйҙән белемгә ынтыла (тәүге уҡытыусыһы, Беренсе Бөтә донъя һуғышында әсирлектә булып ҡайтҡан, немец телен һыу кеүек эскән, башҡорт ауылдары буйлап баш-баштаҡлыҡ ҡылып йөрөгән Руденконың палачтары менән тиңһеҙ алышта батырҙарса һәләк булған Шаһимгәрәй Мусин тураһында һоҡланып һөйләр ине - **Ю.Ғ.**), тыуған ауылында, шунан Темәстә мәктәптә уҡый, артабан Өфөлә юғары уҡыу йортона инеү өсөн әҙерлек курсын тамамлай, бер аҙ тыуған яғында уҡытҡас, кире Өфөгә килә, Башҡорт дәүләт педагогия институтының физика-математика факультетында уҡый. Бөйөк Ватан һуғышында һауа-десант ғәскәрҙәре составында ҡатнаша.

Кәрим ағайға 1953 йылдың март айында төпкөл ауылда бер мәжлестә булырға тура килә, табындаштарын һоҡландырып, ҡурайҙа уйнай, йырлай, бейей. Өйҙә радио юҡ, гәзит килеп етмәгән, мәжлестә ултырыусылар Сталиндың үлгәнен ҡайҙан белһен? НКВД-ға хәбәр еткереүсе табыла. Халыҡтар юлбашсыһын юғалтҡанда байрам иткәнһең, тип, уны ҡулға алалар, бер төн ултырып сыға. Аҙаҡтан инде ҡайһы бер көнләшеүселәр, күрә алмаусылар үҙҙәренең аҫтыртын ошаҡ-ялыуҙарында ошо бер төн бик аҫтында ултырып сығыу фактын файҙалана ла инде. Хатта 80-се йылдар башында Башҡортостан телевидениеһынан Кәрим Дияров тураһында фильм төшөрөргә юлға сығыуҙарын белеп ҡалған берәүҙең обкомға шылтыратыуы арҡаһында ижади төркөмдөң ниндәй мажараларға тарыуы тураһында ул саҡта телевидение режиссеры Рәис Исмәғилев "Хазина" тапшырыуында һөйләгәйне.

30-сы йылдарҙа мәшһүр башҡорт йырсыһы, башҡорт милли профессиональ музыка сәнғәтенә нигеҙ һалыусы, композитор Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың гастролдәрендә уға ҡушылып ҡурай уйнап йөрөүе Кәрим ағай өсөн оло бер мәктәп була. Кәрим Дияров Ирәндек-Һаҡмар зонаһы халыҡ сәнғәте мәктәбенең талантлы бер вәкиле, дауам итеүсеһе булараҡ, Әбүбәкер Хөсәйенов, Әбдрәхим Исҡужин, Дауыт Аманғолов, Сөнғәт Байбулов, Ғиниәт Ушанов, Хәмит Әхмәтов, Солтан Ибраһимов кеүек тиҫтәләрсә халыҡ сәнғәте маһирҙарынан алған рухи хазиналарҙы теүәл, саф көйөнсә килер быуындарға тапшырҙы. Бөгөн Баймаҡ районында Кәрим Дияров исемендәге призға ҡурайсылар бәйгеләре үткәрелә, уның мираҫын музыка мәктәптәре, училищелары уҡыусылары, Өфө дәүләт сәнғәт академияһы талиптары өйрәнә. Йылдар үткән һайын беҙ Кәрим Дияровтың ҡәҙерен нығыраҡ беләбеҙ, һағынып иҫкә алабыҙ. Ҡурай өсөн, тимәк, халҡы өсөн йәнен фиҙа ҡылған улын халыҡ онотмай һәм онотмаясаҡ та.

**Юлай ҒӘЙНЕТДИНОВ.**

*БАЛАЛАР ҺӨЙЛӘЙ*

# АЯҒЫМДЫ ЙЫУҺАМ...

## кроссовки һыя ул

**Балалар донъяһы үҙе бер мөғжизә бит. Тик беҙ күп ваҡыт ул мөғжизәне күрмәйбеҙ, быға ваҡытыбыҙ ҡалмай. Шулай балалар үҫеп етә, үҙ аллы тормошҡа аяҡ баҫа. Ейән-ейәнсәрҙәр була башлағас ҡына иҫенә килә ҡайһы кеше: "Балаларым да шулай ҡыҙыҡ булдымы икән?"- тип аптырай. "Баланың балаһы балдай татлы", тип юҡҡа әйтмәйҙәрҙер инде. Шуға ла олатай-өләсәйҙәрҙе ейән-ейәнсәрҙәренең һөйләше, мәҙәктәре, мөғжизәле донъяһы тураһында аҡ ҡағыҙға теркәп барырға саҡырабыҙ. Ҡыҙыҡ хәлдәр тураһында беҙгә лә яҙып ебәрегеҙ. Ә әле беҙ Баймаҡ районы Билал ауылынан бер өләсәй - Гөлдәр ӘЛИБАЕВА яҙғанды тәҡдим итәбеҙ:**

- Ейәнем Илнар бик аҡыллы бала. Уға алты йәш. Уның менән һөйләштәге ҡайһы бер ҡыҙыҡтарҙы яҙып ебәрәйем әле, тинем.

- Һеңлем күрше ауылдан ҡунаҡҡа килеп китте. Машинаны үҙе йөрөткәнен күргәс, ейәнем: "Ниңә инәйем машинаны үҙе йөрөтә, бабайы юҡмы ни?" - тип һораны.

- Магазинда кроссовки һайлайбыҙ. Берәүһе ейәнемә бик оҡшаны ла ул, тик уға яраған размеры булмай сыҡты."Тырнағымды ҡырҡып, аяғымды йыуһам, һыя ул, әйҙә, алайыҡ та ҡуяйыҡ" , - ти был.

- "Алдашҡан кешене алдаҡсы, тиҙәр, ә урлашҡан кеше урлаҡсы буламы?"- тип һорай ейәнем бер көндө.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Бөгөн эшләй алырҙайҙы иртәгәгә ҡалдырма

**Һинең ҡасан да булһа, ҡатмарлы һәм буталсыҡ проблема килеп тыуғанда, уны нисек хәл итергә белмәгән сағың булдымы? Бындай хәлгә ҡалғанда күптәр төшөнкөлөккә бирелеүсән.**

1770 йылдар уртаһында, донъяға лорд Честерфилд булараҡ танылған Филипп Дормер Стенхоуп, тормошта кәрәкле аҡыллы кәңәштәр биреп, улына хаттар яҙа. Уның кәңәштәре араһында бөгөн киң билдәле "Бөгөн эшләй алырҙай эшеңде иртәгәгә ҡалдырма" тигән әйтем дә була.

Был әйтемдең хаҡлығын әллә күпме миҫалдар менән раҫларға була. Әйтәйек, проблема килеп тыуыу менән хәл итмәһәң, ул тағы ла ҡатмарлаша. Бәләкәй генә ҡыйынлыҡтарҙы әүҙем һәм ыңғай рәүештә юҡ иткәндә, ғәҙәттә, улар ҙурға китмәй. Мәҫәлән, бәләкәй генә яраны, шундуҡ таҙартып, тәрбиәләгәндә, ул тиҙ бөтәшә. Әгәр инде уға тейешле иғтибар бирмәһәң, уның тора-бара ялҡынһынып, шешеп китеүе һәм етди медицина ярҙамы талап итеүе ихтимал. Шулай итеп, әһәмиәтһеҙ генә күренгән уңайһыҙлыҡтар ҙа ҙур проблемаға әүерелеп китеүе мөмкин.

Әгәр һин яҡынлашып килгән имтихан алдынан, йә булмаһа, башҡарылған эш өсөн баһа көткәндә тулҡынлана торғандарҙан икән, ныҡлы ихтыярлы бул. Үҙеңде юғалып ҡалғандай итеп тойғанда, ауыр күренгән һорауҙарға ҡарата кәрәкле материалдарҙы һәм яҙмаларҙы тыныс ҡына ҡарап сығыу хәлде күпкә еңеләйтә. Шулай иткәндә, уларҙы иртәгәһенә ҡабалан рәүештә ятлап ултырырға тура килмәйәсәк. Даими тырышлыҡ һалыу ҡапыл күрһәтелгән әүҙемлеккә ҡарағанда һөҙөмтәлерәк. Ул кешене маҡсатҡа яҡынайта, шул уҡ ваҡытта көтөлмәгән хәл-ваҡиғаларҙы йырып сығырға ярҙам итә.

Әгәр ҙә кемдер дуҫына ыуалып барыусан нескә ваза ебәрергә ниәтләй икән, ул уны яҡшы итеп төрөп, хәүефһеҙерәк ысул менән ебәрәсәк һәм был ваза, моғайын да, тәғәйен кешеһенә яҡшы торошта барып етәсәк. Һәм, киреһенсә, ваза насар ғына төрөлөп, төрлө урау юлдар аша ебәрелһә, уның ватылыуы бик тә ихтимал. Ошо миҫал теләһә ҡайһы проблемаға йәки ҡатмарлы хәл-ваҡиғаға ҡарата ла хәҡиҡәт булып тора: проблемаға ни тиклем битараф булһаң, ул шул тиклем ҙурая бара.

Беҙҙең һәр кемебеҙ бәләкәй аҙымдар яһап, төп маҡсатына табан бара. Беҙ был кәрәкле аҙымдарҙы яһауҙан туҡтаһаҡ, үҫеш тә туҡтай. Лорд Честерфилд кәңәшенә ҡолаҡ һалып, йәғни бөгөн башҡара алырҙай эште иртәгәгә ҡалдырмаһаҡ, беҙ алға ҡарай илтеүсе, тәртипкә һалынған, тигеҙ һәм ныҡлы хәрәкәткә өлгәшә алабыҙ.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**



## 25 ЯНВАРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 11.45**

11.45 "Ералаш"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.10 "Давай поженимся!"
17.00 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Школа", 9-я серия. Сериал
18.50 "След". Сериал
19.40 "Жди меня"
20.20 "Спальный район", 47-я серия.
21.00 Время
21.30 "И все-таки я люблю..."
22.30 "Осведомленный источник в Москве", 1-я серия
23.30 "Школа", 9-я серия. Сериал
00.00 "Ночные новости"
00.10 "Познер"
01.10 "Гении и злодеи"
01.40, 03.05 "Срочное фото". Детектив
03.00 Новости
03.10 "Убийство в клубе "Чиппендейлс". Детектив

### РОССИЯ 1

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 11.50**

11.50 "Когда на юг улетят журавли..." Мелодрама
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Когда на юг улетят журавли..." Мелодрама. Продолжение
16.30 "Кулагин и партнеры"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести-Башкортостан"
17.50 "Вести. Дежурная часть"
18.20 "Кармелита. Цыганская страсть". Сериал
19.00 "Слово женщине", 6-я серия.
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Райские яблочки", 1-2-я серии.
22.50 "Городок"
23.50 "Вести+"
00.10 "Свихнувшиеся". Драма
01.45 "Призраки Миссисипи". Драма
04.25 "Городок. Дайджест"

### НТВ

05.55 "Королева Марго"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Кулинарный поединок"
09.30 "Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Мангуст". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара-2".
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00, 23.15 "Сегодня"
19.30 "Паутина-3". "Кукушкины дети", 1-я и 2-я части. Сериал
21.30 "Последнее путешествие Синдбада", 9-я и 10-я серии. Сериал
23.35 "Ямакаси". Драма
01.15 "Роковой день"
01.45 "Боевая бригада". Боевик
03.50 "Особо опасен!"
04.25 "Страсть убивает"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Ватан. События недели"**
**09.55 Погода**
**10.00 "Виктория"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.35 "Сатраш"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск.яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**16.40 "Оперный сезон"**
**17.15 "Виктория"**
**18.05 Поет Фануна Сиражетдинова**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Наш мир"**
**20.05 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Память"**
**21.00 "Деловой форум"**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Спортивный интерес"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 26 ЯНВАРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.10 "Давай поженимся!"
17.00 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Школа", 10-я серия. Сериал
18.50 "След". Сериал
19.40 "Пусть говорят"
20.20 "Спальный район", 48-я серия
21.00 "Время"
21.30 "И все-таки я люблю..."
22.30 "Осведомленный источник в Москве", 2-я серия
23.30 "Школа", 10-я серия
00.00 Ночные новости
00.20 "На ночь глядя"
01.00 "Помеченный смертью". Боевик
02.40, 03.05 "Роллеры". Комедия
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "В круге первом"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал
12.45 "Две стороны одной Анны".
13.40, 17.50 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вызов". Сериал
15.45 "Суд идет"
17.00 "Вести"
18.00 "Кармелита. Цыганская страсть". Сериал
19.00 "Слово женщине", 7-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Райские яблочки", 3-я и 4-я серии. Сериал
22.50 "В круге первом", 1-я серия.
23.50 "Вести+"
00.10 "Крах". Криминальная драма
02.10 "Горячая десятка"
03.20 "Закон и порядок"
04.15 "Честный детектив"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

05.55 "Королева Марго"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Квартирный вопрос"
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Мангуст". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30, 18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара-2".
19.30 "Паутина-3". "Кукушкины дети", 3-я и 4-я серии
21.30 "Последние путешествие Синдбада", 11-я и 12-я, закл. серии
23.15 "Сегодня"
23.35 "Тот самый человек". Боевик
01.10 "Главная дорога"
01.45 "Огонь из ниоткуда". Фантастика
03.40 "Страна надежды". Драма

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Полезные новости"**
**09.35 "Виктория"**
**10.30 "Действующие лица"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**12.40 "Мерген"**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.30 "Судьбы радужные нити"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Межрегиональный фестиваль "Золотая юрта". Г. Лорка. "Дом Бернардо Альбы". Спектакль Стерлибашевского народного театра**
**16.55 Мультфильм**
**17.05 "Виктория"**
**17.55 "Сэнгелдэк"**
**18.10 Новости (на башк. яз.)**
**18.35 "Родословная малой Родины"**
**18.55 Чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "ХК МВД" (Балашиха)**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Уфимское "Времечко"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Криминальный спектр"**
**23.25 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 27 ЯНВАРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.10 "Давай поженимся!"
17.00 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Школа", 11-я серия
18.50 "След". Сериал
19.40 "Пусть говорят"
20.20 "Спальный район", 49-я серия
21.00 "Время"
21.30 "И все-таки я люблю..."
22.30 "Осведомленный источник в Москве", 3-я серия
23.30 "Школа", 11-я серия
00.00 Ночные новости
00.20 "На ночь глядя"
01.00, 03.05 "Бездна". Приключения
03.00 Новости
03.20 "Преступные мысли"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05,04.15 "Маршал песни. Соловьев-Седой"
10.00 "В круге первом"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал
12.45 "Две стороны одной Анны".
13.40, 17.50 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вызов". Сериал
15.45 "Суд идет"
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
18.20 "Кармелита. Цыганская страсть". Сериал
19.00 "Слово женщине", 8-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Райские яблочки"
22.50 "В круге первом", 2-я серия
00.00 "Вести+"
00.20 "Назначение". Трагикомедия
03.15 "Закон и порядок"
03.05 "Большая любовь-3"

### НТВ

05.55 "Королева Марго"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Дачный ответ"
09.30 "Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Мангуст-2". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30, 18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара-2".
19.30 "Паутина-3". "Паук", 1-я и 2-я серии
21.30 "Возвращение Синдбада", 1-я и 2-я серии
23.15 "Сегодня"
23.35 "Приключения Плуто Нэша". Фантастическая комедия
01.20 "Американские кузены". Комедия
03.10 "Особо опасен!"
04.20 "Дневник памяти". Мелодрама

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Виктория"**
**10.30 "Галерея изящных искусств"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**17.15 "Виктория"**
**18.05 "Учим башкирский язык"**
**18.25 "Солдаты Победы"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Наш мир"**
**20.05 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Историческая среда"**
**21.05 "Формула успеха"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Тай-тулак"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 28 ЯНВАРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.10 "Давай поженимся!"
17.00 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Школа", 12-я серия
18.50 "След". Сериал
19.40 "Пусть говорят"
20.20 "Спальный район", 50-я серия
21.00 Время
21.30 "И все-таки я люблю"
22.30 "Человек и закон"
23.30 "Школа", 12-я серия
00.00 Ночные новости
00.20 "Судите сами"
01.10, 03.05 "Сломанная стрела". Боевик
03.00 Новости
03.20 "Рыцари южного Бронкса". Драма

### РОССИЯ

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "В круге первом". Сериал
11.00, 14.00, 17.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 Тайны следствия". Сериал
12.45 "Две стороны одной Анны".
13.40, 16.30, 17.50, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вызов"
15.45 "Суд идет"
16.30 "Кулагин и партнеры"
18.00 "Кармелита. Цыганская страсть". Сериал
19.00 "Слово женщине", 9-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Райские яблочки", 7-8-я серии
22.50 "В круге первом", 3-я серия
23.50 "Вести+"
00.10 "Столкновение". Криминальная драма
02.30 "Закон и порядок"
03.25 "Большая любовь-3"

### НТВ

05.55 "Королева Марго"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Первая кровь"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00, 23.15 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Мангуст-2". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30, 18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
19.30 "Паутина-3". "Паук", 3 - 4-я серии
21.30 "Возврщение Синдбада", 3-я и 4-я серии
23.35 "Не называй меня малышкой". Фантастический боевик
01.30 "Одержимость". Триллер
03.40 "Противостояние". Боевик

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Полезные новости"**
**09.35 "Виктория"**
**10.30 "Тай-тулак"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**12.35 "Ступени к успеху". Программа Сибайского ТВ**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.25 "Историческая среда"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**16.30 "Народные мелодии**
**17.05 "Виктория"**
**17.55 "Сэнгелдэк"**
**18.10 Новости (на башк. яз.)**
**18.35 "Родословная малой Родины"**
**18.55 Чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Локомотив" (Ярославль). Прямая трансляция**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Мятежных строк цена". Г. Шафиков**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 29 ЯНВАРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Обручальное кольцо", 160-я серия
16.10 "Давай поженимся!"
17.00 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Криминальные хроники"
18.30 "Поле чудес"
19.30 "Пусть говорят"
20.20 "Спальный район", 51-я серия
21.00 Время
21.30 Концерт Михаила Задорнова
22.50 "Закрытый показ" с Александром Гордоном". "Палата № 6". Драма
01.40 "Прощай, Чарли". Комедия
03.40 "Династия драконов". Приключения
05.00 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15, 04.00 "Мой серебряный шар"
10.10 "Дворжецкие. Вызов судьбе"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия"
12.45 "Две стороны одной Анны"
13.40, 17.50 "Вести. Дежурная часть"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вызов"
15.45 "Суд идет"
16.30 "Кулагин и партнеры"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести-Башкортостан"
18.00 "Кармелита. Цыганская страсть"
19.00 "Слово женщине", 10-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Райские яблочки", 9-я-11-я серии
23.45 "Первая любовь". Мелодрама
01.15 "Городок"
01.45 "Золотой Орел". VIII Торжественная церемония вручения Национальной кинематографической премии. Прямая трансляция
03.45 "Туристас". Мистический триллер
05.10 "Ха"

### НТВ

05.55 "Королева Марго"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "И снова здравствуйте!"
09.30 "Особо опасен!"
10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Мангуст-2". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.30 "Следствие вели..."
20.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
20.55 "Фокусник". Криминальная драма
22.50 "Женский взгляд"
23.35 "Меченый атом". Детектив
01.35 "Настоящее преступление". Криминальная драма
04.05 "Омут". Триллер

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.30 "Виктория"**
**10.20 Мультфильм**
**10.30 "Артылыш"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**16.50 "Виктория"**
**17.40 "Йома"**
**18.00 "Хазина". Ишимбайский район**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 "Новости" (на башк. яз)**
**19.30 "Наш мир"**
**20.05 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Парламентский вестник"**
**21.00 "Райхан"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Уфимское "Времечко"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Криминальный спектр"**
**23.25 "Мелодии зимних вечеров". По окончании: погода**

## 30 ЯНВАРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.40, 06.10 "Всего одна ночь"
06.00 Новости
07.30 "Играй, гармонь, любимая!"
08.10 Дисней клуб: "Чип и Дейл спешат на помощь", "Черный плащ"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости
10.10 "Смак"
10.50 "Чехов. Неопубликованная жизнь"
12.20 "Дама с собачкой". Драма
14.00 "Что съесть, чтобы похудеть"
15.10 "Карьера Димы Горина". Лирическая комедия
17.00 Новый "Ералаш"
17.30 "Кто хочет стать миллионером?"
18.20 "Станислав Жук. Великий одинокий". Док. фильм
19.30 "Хрустальный лед". 3-я Церемония вручения ежегодной Премии в мире фигурного катания
21.00 "Время"
21.15 "Перевозчик". Боевик
23.00 "Прожекторперисхилтон"
23.30 "Отпуск по обмену"
02.00 "С терраасы"
04.20 "Акула"

### РОССИЯ 1

05.25 "Круг". Детектив
07.10 "Вся Россия"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00, 11.00, 14.00 "Вести"
08.10, 11.10, 14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.45 "Субботник"
09.25 "Девица Бигелоу, или Жевательная история"
09.30 "Волшебная лампа Аладдина". Сказка
11.20 "Качество жизни"
11.35 "Дела и люди"
11.45 "Рецепты здоровья"
12.10 "Формула совершенства"
12.15 "Комната смеха"
13.10 "Сто к одному"
14.30 "Жил, чтобы помнили. Леонид Филатов"
15.20 "Большая семья. Наумовы"
17.15 "Субботний вечер"
19.00 "Кто хочет стать Максимом Галкиным"
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "Дом без выхода". Мелодрама
00.25 "Черный гром". Боевик
02.25 "Презумпция невиновности". Криминальная драма
05.00 "Городок"

### НТВ

05.45 "Вокруг света за 80 дней". Приключения
08.00, 10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ". Лотерея
08.50 "Без рецепта"
09.25 "Смотр"
10.25 "Главная дорога"
11.00 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.25 "Особо опасен!"
14.05 "Кремлевская кухня"
15.05 "Своя игра"
16.25 "Жажда экстрима". Драма
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа максимум"
21.00 "Русские сенсации"
21.50 "Ты не поверишь!"
22.40 Хоккей. Матч Звезд КХЛ
01.20 "Анализируй это". Комедия
03.25 "Кошмар дома на холмах". Фильм ужасов

### БСТ

**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.05 "Доброе утро!"**
**08.50 Погода**
**08.55 Мультфильм**
**10.40 "Волшебный курай"**
**11.10 И. Юмагулов. "Наркес". Спектакль Салаватского Башкирского Государственного драматического театра**
**13.30 "Теплый дом"**
**14.00 Новости (на башк. яз.)**
**14.20 "Сулпылар"**
**14.40 "Дарю песню"**
**16.10 "Братья Флаб". Мультсериал**
**16.35 Николас Бирд в Уфе "Поющий полицейский из Голливуда"**
**17.35 "Млечный путь". Рауф Муртазин**
**18.35 "На своей земле"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.20 "Дарю песню"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.35 Поет Светлана Хакимова**
**21.10 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Судьбы радужные нити"**
**22.35 На сон грядущий"**
**23.25 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 31 ЯНВАРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Королева "Зубная щетка"
06.30 "Муж собаки Баскервилей"
07.50 "Служу Отчизне!"
08.20 Дисней клуб: "Кряк-бригада", "Клуб Микки Мауса"
09.10 "Здоровье"
10.00 Новости
10.10 "Непутевые заметки"
10.30 "Пока все дома"
11.20 "Фазенда"
12.00 Новости
12.20 "Борис Невзоров. Герой-любовник, холостяк"
13.20 "Найти и обезвредить". Детектив
15.00 "Мода" и времена Леонида Брежнева". Док. фильм
16.10 "Моя мама - невеста". Мелодрама
17.30 "ДОстояние РЕспублики"
21.00 Воскресное "Время"
22.00 "Большая разница"
23.00 "Южное Бутово"
23.50 "Башни-близнецы". Драск
02.10 "Изюминка". Комедия
04.10 "Акула"

### РОССИЯ 1

05.25 "Меня это не касается". Детектив
07.20 "Смехопанорама Евгения Петросяна"
07.50 "Сам себе режиссер"
08.35 "Утренняя почта"
09.10 "Деннис-мучитель". Семейная комедия
11.00, 14.00 "Вести"
11.10, 14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан. События недели"
11.50 "Городок"
12.20 "Черчилль". Детективный сериал
14.30 Беседа со Святейшим Патриархом Московским и Всея Руси Кириллом
14.55 "Честный детектив"
15.25 "Аншлаг и Компания"
17.10 "Танцы со звездами". Сезон-2010"
20.00 "Вести недели"
21.05 "Терапия любовью". Мелодрама
23.05 "Специальный корреспондент"
00.05 "Маверик". Вестерн
02.40 "Граница". Триллер

### НТВ

05.15 "Африканское сафари". Приключения
06.40 "Легион супергероев-2"
07.30 "Дикий мир"
08.00, 10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.20 QUATTRORUOTE
10.55 "Очная ставка"
12.00 "Дачный ответ"
13.25 "Особо опасен!"
14.05 "Алтарь победы"
15.05 "Своя игра"
16.20 "Адвокат". "Пристав". Детективный сериал
18.25 "Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.55 "Чистосердечное признание"
20.25 "Версия". "Кровавая баня". "Контрольный выстрел". Сериал
23.55 "Авиаторы"
00.30 "Солнцестояние". Фильм ужасов
02.15 "Король улиц". Криминальная драма
04.10 "Адреналин". Криминальная драма

### БСТ

**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.05 "Для вас, ветераны!"**
**08.40 Погода**
**08.45 Мультфильм**
**10.30 "Бабушкин сундучок"**
**11.00 "Тэмле"**
**11.30 "Сулпылар"**
**11.50 "Семэр"**
**12.05 "Байтус"**
**12.25 "Телекомпас"**
**13.00 "Ледовые площадки Уфы"**
**13.10 "Дарю песню"**
**14.30 "Братья Флаб". Мультсериал**
**15.00 "Салям". Воскресный выпуск**
**15.20 "Вальса звук прелестный..." Концерт**
**15.5Ә "Галерея изящных искусств"**
**16.25 "Новое кино"**
**16.50 "Фестиваль филармоний". Нефтекамская филармония представляет**
**18.10 "Дарю песню"**
**19.35 "Родные напевы"**
**20.35 "Крылья"**
**21.10 "Лото 6 из 40"**
**21.30 "Ватан". События недели"**
**22.15 Погода**
**22.420 "Вечер. сом"**
**23.05 Художественный фильм. По окончании: погода**

## Һылыулығыңды таныт, һылыуҡай!

"Һылыуҡай" гүзәллек бәйгеһе старт ала. Һайлап алыу турҙары республикабыҙҙың түбәндәге ҡала һәм райондарында: Учалыла - 25 ғинуарҙа, Нефтекамала - 28 ғинуарҙа, Сибайҙа - 1 февралдә, Иҫке Собханғолда - 2 февралдә, Стәрлетамаҡта - 4 февралдә, Өфөлә - 5 февралдә үтәсәк. Конкурстың ярым финалы 6 февралдә "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы бинаһында, финалы "Нефтселәр" мәҙәниәт һарайында уҙасаҡ.

Һайлап алыу турында ҡатнашыу өсөн ғаризалар **miss-asia-ufa@mail.ru** һәм Өфө ҡалаһы, М.Ғафури урамы, 11, "Тамыр" студияһы адресына ҡабул ителә. Белешмәләр өсөн телефондар:

**8 (347) 291-25-57, 273-19-47, 8-919-146-20-08**

## ИҒЛАН

**6 февралдә Әбйәлил районының Байым урта мәктәбен 1970, 1975, 1980, 1985, 1990, 1995, 2000, 2005 йылдарҙа тамамлаусыларҙы осрашыуға саҡырабыҙ. Башлана сәғәт 15.00.**

**Ойоштороу комитеты.**

* * *

**Редакцияға тәжрибәле водителде эшкә саҡырабыҙ.**

*ТӘГӘРМӘС ТИРӘЛӘЙ...*



# ҠАЛА ИХАТАЛАРЫН...

## сүп-сар машинанан таҙарт

**Муниципаль властар ҡала һәм райондарҙы ташландыҡ транспорт сараларынан таҙартыуға тотондо.**

Бынан ҡырҡ йыл элек үҙенең тәүге машинаһын һатып алыусылар ул ваҡыттағы автобилде ихатала урынлаштырыу ҡағиҙәләре тураһында күп һөйләй ала. Бөгөн иһә киң һәм бөхтә Өфө урамдары ҡапыл тарайып ҡалды. Машиналар бөтә тыҡырыҡтарҙы, балалар майҙансыҡтарын баҫып алды, хатта кисен газонда ла буш урын табыуы ауырға тура килә. Бына шул машиналар араһында һәр ваҡыт ҡара тап булып күптән үҙ быуынын кисергән һәм хужалары тарафынан онотолған бер нисә иҫке машина һөлдәләре күҙгә ташлана.

Республикала автотранспорт һаны йылына 10 процентҡа артып тора. Һәм тирә-йүнде йәмһеҙләп ултырыусы эшкә яраҡһыҙ автомобилдәр ҙә күбәйә. Экологтар ҙа был хәлгә саң ҡаға. Тарҡалыу продукты, эшкәртелгән май, һыуытыусы шыйыҡса ҡалдыҡтары ергә һеңеп, тупраҡтағы һыуға һәм канализацияға эләгә. Бигерәк тә аккумуляторҙағы көкөрт кислотаһы һәм ҡурғаш ағыулы матдә булараҡ, тирә-яҡ мөхитте бысратып ҡына ҡалмай, урындағы халыҡтың сәләмәтлегенә туранан-тура тәьҫир итә.

Икенсе яҡтан, ташландыҡ автотранспортҡа һәр ваҡыт коммуналь хеҙмәттәр зарлана. Ихата һәм юл уртаһында ҡалдырылған машиналар, бигерәк тә ҡыш көнө, йыйыштырыусы техникаға тирә-йүнде яҡшылап таҙартырға ҡамасаулай. Һөҙөмтәлә боҙға әүерелгән тәрән соҡорҙар һәм ҡар ҡатламдары күптәр өсөн ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Торлаҡ тракторсылары ихаталарҙы ҡарҙан таҙартҡан ваҡытта шәхси автомобилдәргә зыян килтереү осрағына тап була, шуға күрә лә бындай бәләгә тарымаҫ өсөн хәүефле урындарҙы урап үтеүҙе хуп күрә. Муниципалитеттар иһә, нисәнсе йыл инде күмәк һәм күп ҡатлы автомобиль ҡуйыу урындары булдырыу мәсьәләһен хәл итә алмай. Торлаҡ-коммуналь хужалығы предприятиеһында әйтеүҙәренсә, ихаталарҙы техника ярҙамында йыйыштырыу тәүлегенә ике тапҡыр башҡарылырға тейеш. Ә бындай ҡатлаулы урамдарҙан хатта янғын һүндереү һәм тиҙ ярҙам күрһәтеү машиналары ла үтә алмаған осраҡтар була.

Был күптәнге проблема инде ул, әммә әлегә тиклем үҙенең автомобилен ирекле рәүештә утилгә тапшырырға теләк белдереүсе юҡ. Шуға ла автомобиль хужаларының ҡулланыуға яраҡһыҙ транспорт сараларын яңынан эшкәртеүгә үҙ аллы тапшырырға теләмәүҙәренә ҡаршы саралар күрелә башланы. Яңы закон буйынса вайымһыҙ автомобиль хужаларына 15 меңдән алып 20 меңгә тиклем штраф һалыу ҡаралған. Коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәре һәм милиционерҙарҙың ихаталар буйлап рейдтар уҙғарҙы ла инде. Һөҙөмтәлә, Өфө территорияһында ҡулланыуға яраҡһыҙ ике меңгә яҡын транспорт саралары асыҡланды, шуларҙың өстән ике өлөшө тап шул йорт ихаталары тирәһендә урын биләп тора ла инде. Штраф түләтеү урындарына йылына 400-ҙән ашыу ҡулланыуға яраҡһыҙ автомобиль урынлаштырыла.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*




# ИҪКЕҺЕ - 50 МЕҢ...

## Отабыҙмы, отолабыҙмы?

**8 марттан илдә иҫке автомобилдәрҙе утилизациялау программаһы старт ала. Рәсәйлеләр яңы программа сиктәрендә бынан 10 йыл һәм унан да алдараҡ сығарылған иҫке машина урынына яңыһын һатып алыу өсөн 50 мең һумлыҡ субсидия алыу мөмкинлегенә эйә буласаҡ.**

Тик иҫке машина ла, һатып алынасағы ла Рәсәйҙә йыйылған булырға тейеш. Был турала Премьер-министр Владимир Путиндың Минпромторг башлығы Виктор Христенко менән осрашыуында белдерелгәйне. Ил етәкселеге иҫәпләүенсә, бындай юл менән 200 меңгә яҡын иҫке машинанан ҡотолоп буласаҡ.

Автомобилдәр түбәндәге талаптарға яуап бирергә тейеш: 1999 йылда йәки унан да алдараҡ етештерелгән; рөхсәт ителгән дөйөм массаһы 3,5 тоннанан артмай; тулы комплектлы; һуңғы хужаһының милкендә 1 йылдан ашыу иҫәпләнә; хоҡуҡты раҫлаусы документтары тейәл. Минпромторгтың рәсми сайтында субсидия юллауҙың ете аҙымы ла күрһәтелгән **(www.minprom.gov.ru)**.

Белгестәр араһында "бер тәҙрә" тип йөрөтөлгән сертификат юллауҙың бындай ысулы бик уңайлы. Ҡулланыусы яңы автомобиль һатып алырға теләгән дилерға килә һәм ҡалған эште дилер үҙе башҡарып, сертификат ала. 50 меңлек сертификатты ла ҡулығыҙға бирмәйәсәктәр, ә автомобиль һатып алғанда ташлама яһаясаҡтар. Яңы автомобиль мотлаҡ Рәсәйҙә йыйылған булырға тейеш. Теләге булған кешеләр был процедураларҙы үҙе лә үтә ала, әммә белгестәр фекеренсә, был күпкә ҡиммәткә төшәсәк. Ә дилерға мөрәжәғәт иткән осраҡта автомобиль хужаһына дилер хеҙмәте, ышаныс ҡағыҙы тултырыу һәм машинаны утилизациялау өсөн генә түләргә тура киләсәк һәм был сумма 3 меңдән ашмаясаҡ, ти улар. Әйткәндәй, был механизм әлегә тулыһынса эшләнмәгән, шуға ла үҙгәрештәр булыуы ла ихтимал.

Программала тәүҙә Рәсәйҙең 19 төбәге генә ҡатнаша, тип белдерһәләр ҙә, ағымдағы йылдың 8 мартынан 1 ноябренә тиклем дауам итәсәк тәжрибә бар төбәктәрҙә лә үтәсәк. Был яңылыҡты Автомобиль сәнәғәте һәм ауыл хужалығы машиналары төҙөү департаменты белгестәре лә раҫлай. Сөнки проект 200 мең машинаға иҫәпләнгән, бының өсөн 10 млрд. һум аҡса бүленгән. Тағы ла 1 млрд. һум автомобилдәрҙе утилизациялау пунктына ташыусы ойошмаларға транспорт сығымдары өсөн субсидия сифатында бүленә. Әлегә өҫтәмә финанслау тураһында мәғлүмәт юҡ, тимәк, был аҡса ҡулланылып бөтөү менән проект туҡтаясаҡ. Департамент белгестәре әйтеүенсә, бер кеше бер нисә автомобиль тапшыра ала. Тик ул бер сертификатҡа бер генә машина алырға хоҡуҡлы.

Департаментта булдырылған электрон база һәр сертификаттың яҙмышын күҙәтергә мөмкинлек бирә. Билдәле булыуынса, проектта дилер һайлау буйынса сикләүҙәр юҡ, йәғни унда Рәсәй дилерҙарының барыһы ла ҡатнаша ала.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Дәүләт иҡтисади көрсөк шарттарында һатып алыусыларын юғалтҡан автомобиль сәнәғәтенә ярҙам итеүсе тағы ла бер механизм ҡабул итте. Әммә эксперттар Рәсәйҙә был сара иҡтисад өсөн дә, ябай халыҡ өсөн дә файҙаға булмау ҡурҡынысы барлығы тураһында иҫкәртә. "Финам Менеджмент" ойошмаһы эксперты Дмитрий Баранов, был хәүеф иң тәүҙә бөтә Рәсәй ысынбарлығын сорнап алған ҡатмарлы бюрократик процедуралар тарафынан янаясаҡ, тип белдерә. Минпромторг тәҡдим иткән процедура ла бынан азат була алмаясаҡ. Аналитик фекеренсә, былтыр льготалы автокредит программаһындағы кеүек, килеп тыуған ҡытыршылыҡтарҙы юҡҡа сығарыу өсөн был программаға ла төҙәтеүҙәр индерергә кәрәк буласаҡ. Рәсәй автомобиль етештереүселәре берләшмәһенең директоры Игорь Коровкин әйтеүенсә, яңы автомобиль һатып алғанда дәүләт биргән 50 мең һум ташлама менән ҡулланырға теләүселәр күп буласаҡ. Рәсәйҙә бөгөн еңел автомобиль паркы 30 млн. автомобилдән тороуы, уларҙың яртыһының 10 йылдан ашыу ҡулланылышта булыуын да иҫәпкә алһаҡ, хатта ажиотаж тыуыуы ла ихтимал. Был осраҡта автодилерҙар ҙа үҙҙәренең шарттарын көсләп тağа башлаясаҡ. Етмәһә, программа тормошҡа ашырылған мәлдә етештереүселәр йәки һатыусылар автомобилдәргә хаҡ күтәреүе лә ихтимал һәм был дисконт алған иҫке машина хужалары файҙаһына булмаясаҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА әҙерләне.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

### Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**5 февралдә** Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең халыҡ артисы **Зинира Атнабаеваны** ҡотлап, театр **"Өҙөлгән туй"** спектаклен күрһәтәсәк.

Мәскәүҙә ижад итеүсе яҡташыбыҙ Нәркәс Искәндәрова Вуди Аллендың "Осоусы лампа" пьесаһы буйынса **"Хыял сүплеге"** спектакле өҫтөндә эш башланы. Спектаклдең премьераһы **26-27 февралдә** көтөлә.

**24 ғинуарҙа** Ф.Бүләковтың **"Мөхәббәт ҡарағы"** музыкаль комедияһы.

**26 ғинуарҙа** К.Кизиның **"Кәкүк ояһы"** психологик триллеры.

**27 ғинуарҙа** Ф.Бүләковтың **"Эх, күгәрсенкәйҙәрем!"** мелодрамаһы

**28 ғинуарҙа** Н.Ғәйетбаевтың **"Әй әттәгенәһе, ирем ҡайтты!"** комедияһы.

**29 ғинуарҙа** М.Кәрим әҫәре буйынса **"Ауыл адвокаттары"** спектакле.

**30 ғинуарҙа** М.Буранғоловтың **"Шәүрәкәй"** романтик-музыкаль драмаһы.

**Бәләкәй сәхнә**

**28 ғинуарҙа** Т.Миңнуллиндың **"Яратыу гонаһмы?"** драмаһы

**Кем алыҡ?**

**Түбәндәге һорауҙарға тәүгеләрҙән булып дөрөҫ яуап биреүсе ике кеше театр тамашаларына саҡырыу ҡағыҙы менән бүләкләнәсәк. Йәгеҙ, кем алыҡ?**

1. "Әй әттәгенәһе, ирем ҡайтты!" спектакленең композиторы кем?
2. "Эх, күгәрсенкәйҙәрем!" спектакленең режиссеры кем?
3. "Кәкүк ояһы" спектаклендә төп герой Макмерфины кем башҡара?

**Телефон: 8-937-3419192**

*ҠОТЛАЙБЫҘ!*

Ғинуарҙа тыуған көнөн билдәләүсе уҡыусыларыбыҙҙы - **Ҡырмыҫҡалы районынан** Әминә Ҡусҡарованы, Филарис Ҡусҡаровты, Рәмил Ғәниевты, Закира Лотфуллинаны, **Бөрйәндән** Таңһылыу Ҡыуандыҡованы, З. Сәғитованы, Зәйтүнә Айытбаеваны, Зөфәр Юлдашевты, Зәки Сәғитовты, **Баймаҡ районынан** Гөлзаһира Һабанғолованы, Ғәзирә Мөьминованы, Фәйзиәхмәт Байбуловты, Әкрәм Ҡәйепҡоловты, Флүрә Ноғоманованы, Сәлих Ҡоҙабаевты, Ғәшәр Йосоповты, **Хәйбулла районынан** Әнисә Бикбованы, Абдрахман Аслаевты, Рәзилә Нарбутинаны, Флүрә Хәсәнованы, **Әбйәлил районынан** Сәғиҙә Йәнбирҙинаны, Рәсимә Кәримованы, Әсмә Яхинаны, Рафиҡ Мөхәмәтовты, Вәзир Мусинды, **Өфө ҡалаһынан** Салауат Аҫылбаевты, Ф. Заһиҙуллинаны, **Учалынан** Рафаэль Лотфуллинды, Зиннур Ҡәләмовты, Әлмира Бүләкованы, Лия Фәхрисламованы, **Ейәнсура районынан** Илзирә Дүшәнбаеваны, Гөлнур Яубаҫарованы, Ләйсән Аҡбашеваны, **Көйөргәҙе районынан** Миҙхәт Ишкининды, **Ишембай районынан** Фәниә Йәмилеваны, Фәрит Ишбулдинды, **Дәүләкән районынан** Фәнил Ғирфановты, **Йылайыр районынан** Миңзәлә Түләкованы, Гөлзифа Вәлиеваны, **Әлшәй районынан** Зәңгизә Сәлимованы, Шәрәфетдиновтарҙы, **Күмертау ҡалаһынан** Мәүлиҙә Аҙналинаны, **Ғафури районынан** Вилдан Шәриповты, Рәсилә Ғафарованы, Сәлимйән Туҙбәковты, Зимфира Шәрипованы, **Сибай ҡалаһынан** Мәрфуға Лоҡманованы, Рәмилә Рыҫмөхәмәтованы, **Өфө районынан** Рафаэль Ниғмәтуллинды, Заһит Ғөбәйҙуллинды, **Мәләүез районынан** Нәзиә Йыһаншинаны, **Бәләбәй районынан** З. Үлмәҫҡолованы, **Салауат ҡалаһынан** Рәүфә Кәримованы, Гөлшат Ҡолмөхәмәтованы, **Миәкә районынан** Нәфисә Ғәйнетдинованы, Фәриҙә Аллаярованы, **Белорет ҡалаһынан** Илгиз Айытбаевты, **Баймаҡ ҡалаһынан** Ғәйнетдин Һабанғоловты, Йәнбикә Һабанғолованы, **Стәрлетамаҡ ҡалаһынан** Гөлфирә Шараповины һәм башҡаларҙы ихлас ҡотлайбыҙ! Алдағы тормошоғоҙ тик бәхет-ҡыуаныстарҙан, аяҙ көндәрҙән торһон, барыр юлығыҙҙа фәрештәләр һаҡлаһын. Күңел тыныслығы бер ҡасан да ташламаһын, сәләмәтлек һәм бәхет алдағы көндәрҙә лә тоғро юлдашығыҙ булһын!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

***✓ Сит ил тамашасыһы алдында башҡорт халыҡ йырын башҡарып, көтөлмәгән уңышҡа өлгәштем. Ҡурай моңо аҫтында халыҡ йырын йырлаған саҡта ярты ғүмерҙе бирергә әҙер инем.***



МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

# ИТАЛИЯЛА ҠУРАЙ МОҢО ЯҢҒЫРАНЫ...

## Хәҙер ҡурайыбыҙҙы бөтә донъя белә

**11 ғинуарҙа билдәле опера йырсыһы Илдар Абдразаҡов донъяла иң мәртәбәлеләрҙән һаналған, классик музыканың билдәле сәнғәт әһелдәре генә сығыш яһай торған сәхнәлә - Миландың "Ла Скала" театрында үҙенең концертын бирҙе.**

Донъя опера сәнғәтенең үҙәге булып торған "Ла скала"ның 3200 тамашасы йыйылған залында яҡташыбыҙ ике сәғәт буйы италия арияларын, рус романстарын башҡара һәм... концерт һуңында бөтә тамашасы халҡын таң ҡалдырып, башҡорт халыҡ йырҙары "Азамат", "Ирәндек"те яңғыратып, уны юғары нөктәлә тамамлауға өлгәшә. Ә ҡурайҙа Роберт Юлдашев уйнай. Тәүҙә ул яңғыҙы башҡорт халыҡ көйө "Кәмәлекәй"ҙе башҡара. Виртуоз ҡурайсы был юлы ла сит ил тамашасыһына башҡорт халҡының милли музыка ҡоралының үҙенсәлекле моңон еткереүгә, унын бөтә мөмкинлектәрен асып биреүгә ынтыла һәм һөҙөмтәлә был уникаль уйын ҡоралы менән барыһы ла ҡыҙыҡһына башлай. Баҫма матбуғат сараларында үҙенсәлекле концерт хаҡында яҙмалар урын алһа, электрон почта аша яҡташтарыбыҙға рәхмәт хаттары яуа. Концерттан алынған тәьҫораттары хаҡында тамашасыларҙың береһе бына ни тип яҙа: "Илдар, концертың өсөн ҙур рәхмәт. Был концертта иң яҡшыһы "Азамат" йыры булды. Иҫ киткес! Халыҡ уны тыңлағанда илап ултырҙы. Ҡурай ҙа шәп яңғыраны. Был Европа өсөн көтөлмәгән моң, бөтөнләй икенсе мәҙәниәт. Шуныһы ҡыҙыҡ: минең артымда ултырған өлкән быуын тамашасылары Роберт елән кейеп, ҡурай тотоп сыҡҡас, был көтөлмәгәнлектән аптырап ҡалды һәм "Ла Скала"ның "Ла Скала"һында нисек итеп шундай кейемдә сығырға мөмкин?" - тип бышылдашырға тотондо һәм, күп тә үтмәй, һеҙ яңғыратҡан моңдан үҙҙәре үк хайран ҡалды".

**Ошо концертҡа арналған матбуғат конференцияһында беҙ Роберт Юлдашев һәм Италия менән видеобәйләнеш аша Илдар Абдразаҡовтың үҙе менән дә әңгәмәләшә алдыҡ. Уларҙың сығышын һеҙгә тәҡдим итәбеҙ.**

**Роберт ЮЛДАШЕВ:** Камерный концерт булғас, унда иллеләп тамашасы булыр инде, тип көткәйнем. Ә инде сәхнәгә сығыш яһарға сыҡҡас, алты ҡатлы балкондан торған, 3200 урынлы залдың тамашасы менән шығырым тулы булыуын күреп, хайран ҡалдым. Был тамашасылар юғары сәнғәтте яҡшы аңлаған, баһалай белгән һәм әүҙем күҙәтеп барған музыка һөйөүселәр ине. Йәғни бында көйҙө тәүге нотаһынан уҡ нескә тойоп, башҡарыусы кимәлен алдан тоҫмаллауға һәләтле халыҡ йыйылғайны. Күп сәхнәләрҙә сығыш яһаған бар, әммә бындай тамашасы алдына тәүге тапҡыр сығыуым ине. Ике сәғәт буйы бары тик бер генә йырсының фортепиано һәм аҙаҡтан ғына ҡурай оҙатыуында йыр башҡарыуын тыңлай алыуҙары һушты алды. Ҡайһы саҡта беҙ тышҡы ялтырауыҡ араһында ысын сәнғәтте күрә лә белмәй китәбеҙ. Ә бындағы тамашасы бөтөнләй башҡаса. Мин үҙем өсөн сәнғәттең яңы киңлектәрен астым. Һеҙ белһәгеҙ икән унда Илдарҙы ни тиклем яратыуҙарын! Концерт тамамланғас, уны биш тапҡыр "бис"ҡа саҡырып сығарҙылар, аяғүрә баҫып алҡышланылар. Был яҡташыбыҙҙың "йондоҙ"ло сәғәте ине. Быларҙы күргәндән һуң музыка өсөн бер ниндәй ҙә кәртә юҡлығына инандым. Йыр ниндәй генә телдә башҡарылмаһын, юғары сәнғәтте баһалай белгән тамашасы уны аңлай, тоя, кисерә... Концерт һуңынан тамашасылар ҡурай моңо аҫтында халыҡ йырын тыңлағанда ниндәй тәьҫораттар кисереүен һөйләп киттеләр. Бер тамашасы йәшел туғайҙарҙы, тауҙарҙы күҙ алдына килтереүен әйтте. Бәхетһәң, ул Италияның Швейцария менән сиктәш районында йәшәй икән. Ә беҙ Көньяҡ Уралдың тап шул бәләкәй Швейцария тип аталып йөрөүен беләбеҙ.

Тағы ла. Илдарҙың концертты тамамлағанда әйткән һүҙҙәре бигерәк тә йөрәккә үтеп инде. Ул бөтә тамашасы алдында шул мәлдә залда атаһы Әмир ағай Абдразаҡовты һәм уҡытыусыһы Миләүшә Мортазинаны күрергә теләүен белдерҙе. Был ваҡытта уның шул тиклем тыуған Башҡортостанын яратыуын, һағыныуын тойҙом...

**Илдар АБДРАЗАҠОВ:** Төрлө милләттәр йыйылған Италия сәхнәһендә тарихта тәүге тапҡыр Роберт Юлдашев беҙҙең милли уйын ҡоралыбыҙ - ҡурайҙың бөтә мөмкинлектәрен асып бирә алды. Залда Австралия, Германия, Швейцария, Япония, Америка, Кореянан килгән тамашасылар бар ине, тимәк, хәҙер ҡурай тураһында бөтә донъя белә, тип әйтһәк тә була. Бигерәк тә Италия халҡында ҡурайға ҙур ҡыҙыҡһыныу уянды. Улар концерт булырҙан алда уҡ бөтә баҫма матбуғат сараларында ҡурайҙың ниндәй уйын ҡоралы булыуы һәм уның оҙатыуында йыр башҡарыласағы тураһында яҙып сығарғайны инде. Ә хәҙер, концерт үткәс, үҙҙәре өсөн яңы башҡорт милли уйын ҡоралын асып, бындай үҙенсәлекле көйҙө ишетеү мөмкинлеге биргән өсөн беҙгә рәхмәт әйтеп, мәҡәләләр баҫтырҙылар. Минең сығышымды йәнләндергән һәм баһаһын арттырғаны өсөн Робертҡа ҙур рәхмәт. Ул ҡурайҙа уйнай башлағас, залда шундай тынлыҡ урынлашты, хатта себен осһа, ул да ишетелер ине. Уның уйнауынан минең тәндәрем зымбырҙап китте, күҙгә йәштәр тығылды. Бындай тәрән тойғоларҙы бер ваҡытта ла кисергәнем юҡ ине. Мин быға тиклем сит ил тамашасыһы алдында башҡорт халыҡ йырын йырлағаным булманы, ә был юлы мин уны башҡарып, көтөлмәгән уңышҡа өлгәштем. Ҡурай моңо аҫтында халыҡ йырын йырлаған саҡта ярты ғүмерҙе бирергә әҙер инем. Бындай саҡтар һирәк була һәм мәңге онотолмай. Киләсәк быуын да үҙ моңон тыңлап һәм белеп үҫергә тейеш. Ә ҡурай башҡорт халҡы ла йәшәгән донъяның һәр мөйөшөндә яңғырарға тейеш.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Бөгөн Илдар Абдразаҡов "бас" тауышлылар араһында донъя кимәлендә беренселәрҙән һанала. Уның концерттары төрлө ил сәхнәләрендә алдан билдәләнеп бөтөлгән. Яҡын арала уның Америкала оҙайлы турнелары планлаштырылған. Ә Өфөгә яҡташыбыҙ быйыл май айҙарында ҡайтырға йыйына. Илдар Абдразаҡов менән Роберт Юлдашев "Ла Скала"ла үткән концерттарын быйыл Башҡортостанда иғлан ителгән Республика йылына арнаны.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**



АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БӨРКӨТ БУЛ,

## сәүкәләр араһында беренсе булма

Иң тәүҙә аҡыллы булырға тырыш, буш ваҡытың ҡалһа, ғалимлыҡҡа өйрән.

***

Таш һынды - тышҡы йөҙө, ә кешене уның эше күркәмләй.

***

Бөркөт була алһаң, сәүкәләр араһында беренсе булырға тырышма.

***

Үҙенең теләктәре тотҡонлоғона эләккән кеше ирекле була алмай.

***

Шаяртыуҙы ла тоҙ кеүек самаһын белеп ҡулланырға кәрәк.

***

Ниндәй булһа ла халыҡтың ғөрөф-ғәҙәтен өйрәнер өсөн иң тәүҙә уның телен өйрәнергә тырыш.

***

Тик бер Алла ғына бөтөнөһөн аңлай торған тәрән аҡылға эйә, ә кешегә уға ынтылыу ғына хас.

**ПИФАГОР**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Беҙҙең эраға тиклем 334 йылда Александр Македонскийҙың флоты Финикия ярҙарына килеп туҡтай. Бына-бына иң аяуһыҙ алыштарҙың береһенә инергә тейеш була улар. Ярға килеп теҙәлгәс, полководец дошмандың уларға ҡарағанда өс тапҡырға күберәк булғанын күрә. Александрҙың һәр ваҡыт тоғро һәм батыр яугирҙәре быны күреп тетрәнә, еңеүгә ышанысын юғалта. Еңелмәҫ ғәскәр ҡурҡыу алдында ҡала. Александр Македонский бар яугирҙәрен дошман ярына төшөрөп бөткәс, караблдәрҙе яндырырға бойороҡ бирә. Шунан һалдаттарҙы йыйып ала ла, былай ти: "Күрәһегеҙме, беҙҙең караблдәр яна! Беҙ еңелһәк, өйҙәребеҙгә ҡайта алмаясаҡбыҙ һәм ғаиләләребеҙҙе күрә алмаясаҡбыҙ, мәңгелеккә ошо ерҙә йәшәргә мәжбүр буласаҡбыҙ. Тимәк, беҙ еңергә һәм дошмандарҙың караблендә өйҙәребеҙгә ҡайтырға тейешбеҙ!" Ул алышта Александр Македонскийҙың бәләкәй ғәскәре бик ҙур ғәскәрҙе еңә һәм дошман караблендә өйҙәренә ҡайтып китә. Һөйөү һәм ышаныс бына шундай мөғжизәләр тыуҙыра. Тарихта яндырылған караблдәр тураһында тағы бер ваҡиға бар. Плутарх яҙыуынса, Троя ҡыйратылғас, Троя ирҙәре ҡасып ҡотолорға итеп, портта торған караблдәргә йүгерә. Ләкин уларҙың ҡатындары быға юл ҡуймай: улар караблдәрҙе яндыра, һәм ирҙәргә дошман менән алышҡа инеүҙән башҡа сара ҡалмай..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары — 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 6423
Заказ 212